*✓ Ҡайһы бер балалар шулай була. Аталары үлгәс, мал бүлеү өсөн туған һәм ҡарындаштары менән асыуланыша. Бер-береһе менән әҙәпһеҙ була. Ҡиммәтле ваҡыттарын һәм ғәзиз малдарын тәләф итә. Үҙҙәренең ҡан һәм тән ҡарындаштарын рәнйетеп, сит кешенең ҡорһағын туйҙыра. Ошо юлдан китһәләр, үҙҙәре лә бәхетһеҙ булырҙар. Ата-әсәләренең исемдәрен дә хөрмәтһеҙ итерҙәр, ғаилә һәм ырыуҙарын мәсхәрәлеккә ҡалдырырҙар.*

***РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

26 СЕНТЯБРЬ
2 ОКТЯБРЬ
(ҺАРЫСАЙ - ҠАРАСАЙ)
2009 ЙЫЛ

№39 (353)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәш белгескә...**

ауылда яҡшыраҡ



5

**Әбйәлилдәге өләсәйҙәрем...**

ҡотло донъя өлгөләре



7

**Университет - цивилизация емеше,**

йәки Фән һәм мәғрифәт үҙәгенә - 100 йыл



8-9

**Өндәшмәй ҡалыу...**

ете бәхет туплаусы хазина



12

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Әгәр ҙә йәшлегегеҙгә ҡайтыу мөмкинлеге булһа, тағы ла Башҡорт дәүләт университетына уҡырға барыр инегеҙме?

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ, яҙыусы, "Ватандаш" журналының баш мөхәррир урынбаçары:*

-Һис шикһеҙ. Мин был уҡыу йортонда 1972-1977 йылдарҙа уҡыным. Партия номенклатураһы заманы булһа ла, ул саҡта БДУ-ла башҡорт рухы, милли менталитет бик көслө ине һәм был уҡыу йортонда белем алыусылар милләтебеҙ интеллигенцияһының иң алдынғы ҡатламын тәшкил итте. Һәм 80-се йылдарҙың аҙағында, 90-сы йылдарҙың башында киң ҡолас алған милли яңырыу хәрәкәтенең башында ла тап ошо уҡыу йортонда белем алыусылар торҙо. Беҙ, студенттар ул саҡта ысын мәғәнәһендәге әҙәби, ғилми, милли тормош менән йәшәй инек. Беҙҙе Кирәй Мәргән, Лев Бараг һымаҡ уҡытыусылар уҡытты. Шулай уҡ башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары менән тығыҙ аралашып йәшәү ҙә беҙҙең күнелдә эҙһеҙ үтмәне, беҙҙең студенттар һуңынан үҙҙәре лә әҙәбиәт, фән донъяһына аяҡ баçты.

*Рәмил ЙӘНБӘК, шағир, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррир урынбаçары:*

-Башҡорт әҙәбиәтен Башҡорт дәүләт университетынан башҡа күҙ алдына килтереп тә булмай. Шуға күрә мин был һорауға шулай тип яуаплар инем: мин, шиғриәткә ғашиҡ кеше булараҡ, барыбер шиғыр яҙыр инем һәм үҙемдең был йүнәлештә белемемде арттырыр, оçталығымды камиллаштырыр өсөн мотлаҡ рәүештә ошо уҡыу йортон һайлар инем. Икенсенән, Башҡорт дәүләт университетында белем алған йылдарым - йәшлегемдең алтын йылдары, йәшлегемдең үҙе бит. Ә кемдәр үҙ йәшлегенә кире ҡайтырға теләмәй икән?

**(Теманың дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**Беҙ журналистарҙың кешеләр өсөн, республика үçеше өсөн көнүҙәк булған темалар күтәреүе яҡлы. Проблема бар икән, унан ҡасып ҡалыуҙан фәтеүә юҡ. Минеңсә, уны асыҡлау, дөрөç диагноз ҡуйыу, һәм, бәлки, уны хәл итеү юлын табырға ярҙамлашыу - журналистың профессиональ бурысы булып тора.**

**Мортаза РӘХИМОВ,
Башҡортостан Республикаһы Президенты.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УҠЫМЛЫ БАÇМА

**"Киске Өфө" республикала сыҡҡан бар гәзиттәр араһында иң уҡымлыһы һәм халыҡҡа кәрәкле мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер баçма. Уҡымлылығы йәһәтенән уны "Комсомольская правда", "Московский комсомолец", "Независимая газета" баçмалары менән тиңләргә була, тик ул баçмаларҙың хәҙерге һандарынан айырмалы рәүештә, "Киске Өфө" экстремизмдан, шәрә декларативлыҡтан азат. Мин уны сыға башлағандан алып алдырам һәм алдыраcаҡмын. Унда бирелгән мәғлүмәттәр тәрән йөкмәткеле, фәһемле, журналист позицияһы көслө, шулай уҡ шәхси фекерҙәргә лә өçтөнлөк биреләүе баçманы ҡыҙыҡлы итә. Был баçма журналистары Башҡортостан Хөкүмәте һәм Рәсәй Федерацияһы үткәргән сәйәсәт хаҡында аңлайышлы һәм объектив баһа биреү маһирлығына эйә. Гәзит үҙенең биттәрендә күтәрелгән мәсьәләләрҙә һәр саҡ алтын урталыҡты таба белә: кемгәлер ҡырҡа ҡаршы ла сыҡмай, шул уҡ ваҡытта тормошобоҙҙоң киçкен ваҡиғаларына битарафтарҙы вайымһыҙлыҡ йоҡоһонан уятыр көскә лә эйә. Гәзитте уҡыған кеше үҙебеҙ йәшәгән донъяға, уның проблемаларына битараф ҡала алмайҙыр. Гәзиттең уҡымлы булыуының бер сәбәбе - уның телендә, стилендә, мәҡәләләрҙең әҙәби зауыҡлы булыуындалыр, тип тә уйлайым. Ошо йәһәттән, гәзиттә әҙәби әçәрҙәрҙе лә күберәк уҡығы килә.**

**Мазһар ИÇӘНБАЕВ,**

**Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре.**



**"Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин тора.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# МӨҒЖИЗӘЛӘРЕБЕҘ ЕТӘҮ ГЕНӘМЕ?

## Йәки Һоҡлана белгән кеше үҙе мөғжизә бит ул…


1 БАШҠОРТ БАЛЫ


2 БАШҠОРТ ҠЫМЫҘЫ


3 ҠУРАЙ


4 "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ


5 "ШҮЛГӘНТАШ" МӘМЕРЙӘҺЕ


6 АСЫЛЫКҮЛ


7 ЯНҒАНТАУ


8 ИРӘМӘЛ


9 АҒИҘЕЛ


10 КРАСНОУСОЛ МИНЕРАЛЬ СЫҒАНАҠТАРЫ


11 САЛАУАТ ЮЛАЕВ ҺӘЙКӘЛЕ


12 БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ


13 КЕЙЕҘ


14 ДЕБЕТ ШӘЛ


15 МОРАҘЫМ ТАРЛАУЫҒЫ


16 ТОРАТАУ

**Башҡорт балы, ҡурай, башҡорт бейеүе, "Урал батыр" эпосы, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе, Асылыкүл, Янғантау, Ирәмәл, Ағиҙел, Красноусол минерал сығанаҡтары, Салауат Юлаев һәйкәле, башҡорт халыҡ йырҙары, кейеҙ, дебет шәл, ҡымыҙ, буҙа, башҡорт милли аштары, Мораҙым тарлауығы, Торатау, Ирәндек һырттары, Талҡаҫ күле, Ғәҙелша шарлауығы, "Өфө-II" ҡаласығы, "Улаҡ" ҡаласығы, Баҙал, Мәсем тауҙары, Әүешкүл шишмәһе, Бағырусман шишмәһе, Бәләбәй ҡалҡыулығы, Йылайыр платоһы, Шайтантау, Ҡандракүл, Тоҙлокүл (Әбйәлил районы территорияһындағы 30-ҙан ашыу күлдең һәр ҡайһыһы үҙенсә мөғжизәле), "Башҡортостан", "Көньяҡ Урал" ҡурсаулыҡтары, Башҡортостан йылғалары (Ҡариҙел, Дим, Әй, Йүрүҙән, Ыҡ, Ҡорғаҙаҡ, Яйыҡ, Нөгөш, Ашҡаҙар, Таштуғай, Һаҡмар, Таналыҡ, Һүрәм, Инйәр, Эйек, Ҡаҫмарт, Өҫкәлек, Ҡыҙыл, Ҡармасан, Сәрмәсән, Сөн, Танып, Өршәк һ.б.), Ҡуңыр буға юлы, Ҡәнифә юлы һәм башҡалар, һәм башҡалар.**

Был исемлекте 7-нән 777-гә тиклем һуҙырға булыр ине. Конкурс иғлан ителеү менән Башҡортостандың төрлө төбәктәренән беҙгә хат яҙыусылар, шылтыратыусылар, асылда, үҙ төбәктәренең мөғжизә тип иҫәпләгән урындарын, күренештәрен тәҡдим итергә тотондо. Был хәл тәбиғи һәм аңлашыла ла. Салауат, Мәсетле, Ҡыйғы яҡтары - Янғантау шифаханаһын, Әй, Йөрүҙән, Ыҡ йылғаларын, баймаҡтар - Талҡаҫ күлен, Ирәндек һыртын, Ғәҙелша шарлауығын, әбйәлилдәр - Бағырусман шишмәһен, күлдәрен, кейеҙен, учалылар - Ирәмәл тауын, Әүешкүл шишмәһен, буҙаһын, башҡорт милли аштарын, ғафуриҙар - Красноусол минераль сығанаҡтарын, бөрйәндәр - "Шүлгәнташ" мәмерйәһен, Башҡортостан ҡурсаулығын, Ағиҙел йылғаһын, Мәсем, Баҙал тауҙарын, хәйбуллалар - Таналығын, ҡылғанлы далаһын, ҡымыҙҙы, өфөләләр - Салауат Юлаев һәйкәлен һ.б. тәҡдим итергә һәм һәр береһе үҙҙәренең фекерен иҫбатларға хаҡлы.

Бөгөн килеп, беҙ шуға инандыҡ. 7-әү генә лә, 77 генә лә, 777 генә лә түгел икән Башҡортостаныбыҙҙың мөғжизәле урындары. Эйе, донъяның 7 мөғжизәһе хаҡында күп һөйләйҙәр. Ошоға ярашлы, "Россия" телеканалы "Рәсәйҙең 7 мөғжизәһе" тигән телеконкурс та үткәрҙе. Беҙ ҙә уларға эйәреп, шундай уҡ конкурсты үткәрә башланыҡ та, Башҡортостаныбыҙҙа мөғжизәнең мөғжизәһе булырлыҡ урындарҙың етәү генә булмағанын белеп, иҫ-аҡылыбыҙ китте. Әле башта килтерелгән исемлеккә Уралтауыбыҙҙың ҡуйынында сылтырап ағып ятҡан меңәрләгән-меңәрләгән көмөш һыулы шишмә-инештәрҙе, мөғжизәле тауҙарҙы, ҡаяларҙы, урмандарҙы, әүлиә зыяраттарын, тәбиғәт, кеше тарафынан тыуҙырылған башҡа бик күп төрлө ҡиммәттәребеҙҙе индерергә була бит. Уйлай китһәң, Уралтауҙа үҫкән һәр ағас, һәр үлән, Уралтау - үҙе мөғжизә бит. Юҡҡа ғына, теге риүәйәттә әйтелгәнсә, Аллаһы Тәғәлә үҙе өсөн генә тип ҡалдырған ошо илаһи ерҙе башҡорттарға бирмәгән икән.

Ситтән килеүсе бик күп халыҡтарҙы үҙенең еренә һыйындырған башҡорт милләтенең тәбиғи булмышы ла оло мөғжизә, шулай уҡ ошо ерҙә бик күп милләт вәкилдәренең үҙ милли ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп, һыйышып, дуҫ һәм татыу йәшәүе лә мөғжизәнең мөғжизәһе. Ошоларҙың барыһын да үҙендә сағылдырған Башҡортостаныбыҙ үҙе - мөғжизәнең мөғжизәһе. Был хаҡта беҙ әйтмәйбеҙ, республикабыҙға ситтән килеүселәр әйтә.

**ҠЫҪҠАҺЫ:**

**Конкурстың "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тип аталыуы шартлы ғына икәнлеген үҙегеҙ тойғанһығыҙҙыр, туғандар. Кемдер тыуған йә торған еренең быуаса иғтибар ҙа итмәгән бер урынына, төшөнсәһенә, күренешенә ҡарап һоҡлана һәм шул һоҡланыуын беҙгә еткерә икән, беҙ үҙ маҡсатыбыҙға ирешкәнбеҙҙер, тип уйлайбыҙ. Ул һоҡланыу - ысын мөхәббәт һәм тыуған еренең бер биҙәгенә ҡарата тыуған бындай тойғо бер ҡасан да ялған булмағанын, ғүмер-ғүмергә мөҡәддәс икәнлеген дә беләбеҙ. Беҙ бик күп уҡыусыларыбыҙҙа, телевизор ҡараусыларҙа ошондай тойғоно уята алдыҡ һәм маҡсатыбыҙға ирештек. Күңелендә нимәгәлер һөйөү, мөғжизәле мөнәсәбәт йөрөткән кеше - үҙе мөғжизә бит ул. Шуға күрә, конкурс шарты буйынса 7 мөғжизә күрһәтелә икән, был һеҙ һоҡланғандың мөғжизәлеген һис тә инҡар итмәй. Ошо донъя үҙе бер мөғжизә бит ул - ҡәҙерҙәрен белгән кешегә…**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## ОЯТҺЫҘ ЙОЛАҒА СИК ҠУЯЙЫҠ!

Ауыл урамы буйлап туй килә. Ауыл урамы буйлап бер йәм килә. Кейәү менән кәләште дуҫтары, туғандары уратып алған. Йәштәр шулай етәкләшеп, яҡындары оҙатыуында үҙ аллы тормош һуҡмағында тәүге аҙымдарын атлай. Уларҙы күңелле тауыштар, йыргармун моңо ла оҙата килә. Шул саҡ ауыл урамының ҡайһылыр бер йорто тәңгәлендә туйҙа ҡатнашыусыларҙың юлын бүлделәр. Юлға арҡыры йөк машинаһы ултыртып ҡуйғандар, унан ары үтерлек түгел. Юлды бүлеүселәр кәләш менән кейәүҙән... юҡ, йола буйынса, бәке йәки ҡулъяулыҡ түгел, ә "бер ярты" талап итте. Йәштәр, күрәһең, бындай ваҡиға булырын алдан белгәндер, шунда уҡ быларға "бер ярты" сығарып та тотторолдо. Шунан ғына йөк машинаһы, ауыр гөрһөлдәп, төтөнлө газын борхолдатып, туйҙағылар юлынан ситкә күсереп ҡуйылды. Ләкин туй илле метр ҙа атлап өлгөрмәне, уларҙың юлын тағы бүлделәр. Был юлы ат арбаһы юлға арҡыры ултыртып ҡуйылғайны. Юлды быуыусылар шулай уҡ йәштәрҙән шешәбикә алып ҡыуанды...

Йолалар бына нисек түңкәрелә икән хәҙер! Туй мәлендә, эйе, кәләш менән кейәү ҡаршыһына сығып, еңгәләрҙең бүләк көҫәү йолаһы булған. "Арҡан быуыу" тип аталғанмы әле ул йола? Ә хәҙер арҡан түгел, машина, ат арбаһы, бүрәнә эшкә егелә икән юл быуыу өсөн...

Был хәлде мин Ишембай районында күҙәттем. Тетрәндем. Оятһыҙлыҡтың, белекһеҙлектең сигенә сығыу тип баһаланым быны. Йәштәрҙең иҫтәлекле көнөндә уларҙы эскелек йолаһына йәлеп итеү, "Һинең тормошоңда бына шулай араҡы менән иҫәпләшергә тура киләсәк хәлдәр күп буласаҡ, шуға әҙер бул", тигәнгә оятһыҙ ишаралау бит был...

Кемдер туҡтатырға тейеш был йоланы. Ә инде... кейәү йә кәләш һаран икән, тип уйламаһындар, тиһәгеҙ, туй ҡаршыһына сыҡҡандарға, боронғоса, ҡулъяулыҡ йә бәке әҙерләгеҙ, йә булмаһа, кәнфит, тәңкә һибеп китегеҙ. Бик булмаһа, иң изге ризығыбыҙ - икмәк булһа ла тотторорғоҙ, әйҙә. Тик араҡы түгел! Йә, кем башлай оятһыҙ йолаға ҡаршы ошо көрәште?

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә 23 илдән 300-ләп ғалим ҡатнашҡан ҙур сара - нанотехнологиялар конгресы булып үтте. "Фәндән - инновацияларға" девизы аҫтында үткән конгрестың маҡсаты - илдәге инновацион үҫешкә ярҙам итеү, фәнни-техник хеҙмәттәшлекте үҫтереү, конкуренцияға һәләтле продукция етештереү. Конгреста БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡатнашты.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Екатеринбургта үткән Рәсәй Федерацияһы субъекттарының үҙ-ара иҡтисади бәйләнештәре "Ҙур Урал" төбәк-ара ассоциацияһы советы ултырышында ҡатнашты. Был ассоциация Башҡортостанды, Удмурт Республикаһын, Ҡурған, Свердловск, Төмән, Силәбе өлкәләрен, Пермь крайын берләштерә. Ултырышта ҡатнашыусылар Урал төбәгендәге социаль-иҡтисади хәлде тикшерҙе, финанс көрсөгөнән сығыу юлдарын барланы.

✓Өфөлә "Уралстройиндустрия - 2009" форумы, XIX Халыҡ-ара һәм "Аҙ ҡатлы төҙөлөш" I махсус күргәҙмәләре асылды. Был форумдарҙа Рәсәйҙең 18 төбәгенән 120 предприятие ҡатнаша. Улар төҙөлөштә кәрәкле бар тауарҙарҙы тәҡдим итә. Форум сиктәрендә ойошторолған "Аҙ ҡатлы төҙөлөш" күргәҙмәһе саранын төп ваҡиғаһына әйләнде. Әле "Үҙ йортоң" программаһы буйынса Жуков, Шамонин ауылдарында төҙөлөш алып барыла. Республика көнөндә Жуковта - 39, Шамонинда 79 ғаилә яңы йорт туйлаясаҡтар, тип көтөлә.

✓РФ Хөкүмәте ҡарары менән ЮНЕСКО эштәре буйынса РФ комиссияһының яңы составы һайланды. Комиссия составына ингән федераль министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре, төбәк башлыҡтары араһында Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов та бар.

✓Быйыл октябрь-ноябрҙә һөт һатып алыу хаҡы 10-15 процентҡа артасаҡ. Был турала РФ ауыл хужалығы министры Елена Скрынник белдерҙе. Бынан тыш, 2010 йылда пастеризацияланған һөт, һыйыр майы һәм ҡаты сырҙар һатып алыу хаҡтары ла үҙгәреш кисерәсәк.

✔ *Джунгли законларын беҙ ҙә беләбеҙ ул. "Маугли"ҙы уҡыған кешеләрбеҙ. Бер нәмә генә аңлашылмай: сүтәки, Президентты кем һайлай? Халыҡмы? Әллә "үҙ-ара килешеп"ме?*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# "БЕҘ БЕР ҠАНДАН. ҮҘ-АРА ХӘЛ ИТЕРБЕҘ ӘЛЕ",

## йәки "Проблема - 2012"-не кем тыуҙырҙы?

**Ҡапыл ғына, көтмәгәндә, бөтөнләй уйламағанда, "Проблема - 2012" тигән бер нәмәкәй ҡалҡып сыҡты бит әле, йәмәғәт. Ишетмәнегеҙме ни әле? Мәскәү шаулапмы шаулай, тиҙәр бит. Кәмәне ҡайһы ярға алып барып терәргә, кемгә һыйынырға, ә кемдән ситләшергә, кемдең ҡуҙҙәренә тултырып ҡарарға, ә кемгә арҡаны ҡуйырға, кемде ҡолас йәйеп ҡаршыларға, ә кемде урап үтергә - берәү ҙә бер нәмә лә белмәй. Билдәһеҙлек шәүләһе ҡаплап алды бөгөн Мәскәй... ғәфү, йәмәғәт, Мәскәүҙе. Уларҙың күңелдәрен шом солғап алды. Йөрәктәренә һыуыҡ йүгерҙе. Киләсәк хаҡында борсола башланы улар. Кем менән генә ҡалырбыҙ икән? Кем - беренсе, ә кем бер кем дә түгел, тип аптырananлар.**

Йәмғиәткә, күлгә ташланған таштар кеүек, бер-бер артлы йәмәғәтселеккә "һоғондорол-ған" аңлашылмаған сигналдарҙан, ым-ишараларҙан таралған тулҡындар илебеҙҙең быға тиклем тыныс ҡына ятҡан сәйәси "һаҙлығын" болғатып ебәрҙе. Был "тулҡын"дар төбәктәргә әлегә барып етмәне. Унда әле һаман булһа ла көрсөк менән көрәш бара. Ә Үҙәктә көрсөктө енеп алып баралар, шикелле. Юғиһә, 2012 йыл хаҡында уйланмаҫтар ине. Унда, Үҙәктә, бөтәһен дә бер генә мәсьәлә борсой - 2012 йылда кем президент буласаҡ та, кем премьер-министр буласаҡ? Дәғүәселәрҙең исемдәре күптән билдәле инде. Уларҙың урынлашыу тәртибе генә аңлашылмай - тәүҙә Медведев, шунан Путинмы? Әллә, тәүҙә Путин, ә Медведев? Башҡа дәғүәселәр тураһында һүҙ ҙә юҡ, имеш.

Нисек килеп тыуҙы һуң был мәсьәлә? Ябайыраҡ итеп әйткәндә, ҡайһы тишектән килеп сыҡты? Ҡайһы бер журналистар фекеренсә, 10 сентябрь көнө Интернетта, ә аныҡлабыраҡ әйткәндә, "Газета.Ру" сайтында Президент Дмитрий Анатольевич Медведевтың "Алға, Рәсәй!" тип аталған мәҡәләһе, ә, асылда, яңы (быға тиклем күрелмәгән, беленмәгән тип әйтәйем микән?) дәүләт төҙөү буйынса манифесмы, әллә программалы документмы шунда, - донъя күргән минуттан алып.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, бик ҡыҙыҡ хәлдә ҡалынды ул мәҡәлә менән. Кемгә мөрәжәғәт итә икән Президент тигән уй борсоно мине. Уйлап ҡараһаң, бөтә халыҡҡа һымаҡ. Сөнки тик Интернет уҡыусылар менән генә Рәсәйҙе күтәреп булмай ҙа баһа. Рәсәйҙә донъя көткән бөтә кешеләр бер төптән булып аяғүрә баҫып, "Рәсәй, алға!" тип һөрәнләмәһә, илебеҙҙе ҡуҙғатып булмаясаҡ кеүек. Бигерәк ҙур бит ул. Президенттың ораны һәр бер кешегә етһен өсөн ул хатты интернет-баҫмаларҙа һәм ике-өс эре федераль гәзиттә генә баҫтырыу етмәй. Беҙҙең илебеҙҙә Интернет түгел, гәзит барып етмәгән, почтальон аяғы баҫмаған мөйөштәр бар һаман. Улай ғына ла түгел, район гәзитенән башҡаны алдырмағандар ҙа байтаҡ илебеҙҙә. Һәм, ниһайәт, бер ниндәй гәзит уҡымай, көнө-төнө телевизорға текәлеп ултырғандар ҙа бихисап. Был мәҡәлә улар өсөн булмай сыға түгелме? Улар яңы Рәсәй төҙөүҙән мәхрүм ҡала ла баһа.

Дмитрий Анатольевичтың мөрәжәғәтен уҡыным да, илһамландым. Ә мин кемдән кәм һуң, тигән уй килде башҡа. Мин дә яңы Рәсәй төҙөүгә үҙ өлөшөмдө индерәйем, тигән уй менән ултыра һалып Президентыбыҙға хат яҙа ла башланым. Тик башлап ошо һүҙҙәрҙе генә яҙып өлгөрҙөм. "Хөрмәтле Дмитрий Анатольевич! Хатығыҙҙы уҡыным. Рәхмәт. Матур бер йыр тыңлаған кеүек булдым. Илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың, йәмғиәтебеҙҙең яҡты киләсәге хаҡындағы оло ышаныс менән әйтелгән бындай һүҙҙәрҙе күптән ишеткән юҡ ине. Һуңғы тапҡыр, беренсе класта уҡығанда микән, класс сәғәтенә мәктәп директоры инеп, ыҙрыҡ биш минут буйына илебеҙҙә төҙөләсәк коммунизм тураһында һөйләгәйне. 1970-1971 йылдар тирәһе булғандыр ул. Шунан бирле йылы һүҙ ишеткәнем юҡ ине. Бына, ишеттерҙегеҙ. Рәхмәт".

Хатымды дауам итеп булманы. Ваҡиғалар ҡапыл ҡуйырып китте. Дмитрий Анатольевичтың мәҡәләһе киң халыҡ массаларына етеп өлгөрҙөмәюкмы, икенсе көнө үк Премьер-министр Владимир Владимирович Путин "Валдай" Халыҡ-ара дискуссия клубы ағзалары - донъяның күренекле политологтары, күҙәтеүселәре һәм журналистары менән осрашып, үҙенең ҡыҫҡа ғына, әммә ифрат тос һәм тәрән мәғәнәле һүҙҙәре менән бар донъяны шаҡ ҡатырҙы. Клуб ағзаларының береһе, Донъя иҡтисады һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтының Рәсәй һәм Азия программалары директоры Николай Злобин 2012 йыл хаҡында һорау биргән булған. Йәнәһе, яңы президент һайларға ваҡыт еткәс, һеҙ Дмитрий Анатольевич менән бер-берегеҙгә конкуренция тыуҙыра алаһығыҙмы? Злобинды ла әйтәйем инде, тапҡан бирер һорау. Улайтып, ҡапыл кешене албырғатырға ярамай ҙа баһа! Владимир Владимирович уға ауыҙын йыра әйткән дә ҡуйған. Беҙ Дмитрий Медведев менән 2008 йылда бер-беребеҙгә конкурент булманыҡ, тигән ул. 2012 йылда ла булмаясаҡбыҙ. Беҙ ултырып һөйләшербеҙ ҙә, үҙ-ара хәл итербеҙ әле. Беҙ бер-беребеҙҙе яҡшы аңлайбыҙ. Беҙ - бер ҡандан, тип тамамлап ҡуйған ул һүҙен. Редьярд Киплингтың "Маугли" әкиәтен уҡығандар джунглиҙарҙа ғүмер иткән хайуандарҙың оранын яҡшы хәтерләйҙер - "Беҙ бер ҡандан - һин һәм мин!" Владимир Владимирович әйткән һүҙҙәр менән бер ни тиклем оҡшаш, эйе бит! Аңлауымса, Премьер-министрыбыҙҙың бәләкәй сағында яратҡан китабы тап "Маугли" булған. Ул әкиәттә, хәтерләһәгеҙ, һүҙ бүре өйөрөнә эләккән бәләкәй малай тураһында бара. Бүреләр уны үҙ итеп, һунар серҙәрен асып бирә, джунглиҙарҙың тылсымлы әйтемен өйрәтә - "Беҙ бер ҡандан - һин һәм мин!" Джунгли законлары беҙ ҙә беләбеҙ ул. "Маугли"ҙы уҡыған кешеләрбеҙ. Бер нәмә генә аңлашылмай: сүтәки, Президентты кем һайлай? Халыҡмы? Әллә "үҙ-ара килешеп"ме? Ә инде Премьер-министрыбыҙҙың һәр саҡ отҡор һәм образлы фекер йөрөтөүен иҫәпкә алғанда ("Беҙ-рәфкә мансырбыҙ" тигәнен генә иҫкә төшөрәгеҙ әле!), бәлки, беҙгә Акела һәм Путин, Маугли һәм Медведев араһында ниндәйҙер ассоциациялар эҙләргә кәрәктер, ә? Эш быны менән генә тамамланмай әле, йәмәғәт. Тағы ла бер нисә көн үтеп өлгөрҙөмәюкмы, "Валдай" клубы ағзалары менән Дмитрий Медведев осрашты. Хас та һайлауҙарға әҙерләнгән сәйәсмәндәр кеүек, ике етәксебеҙ бер үк майҙандарҙа тапана. Әлбиттә, Владимир Путиндың үҙенсәлекле яуабынан һуң Дмитрий Медведевҡа ошондай үк һорауҙы бирмәй ҡалманылар. Президентыбыҙ киләсәк тураһында кәрәгенән артыҡ уйланмаҫҡа тырышам, әммә үҙ яҙмышыма битараф түгелмен, тип яуап бирҙе. Уйлап ҡараһаң, бәйләнерлек урын юҡ һымаҡ. Эйе бит? Ашыҡмайыҡ. Тағы ла бер нисә көндө артҡа ташлайыҡ.

17 сентябрь көнө Рәсәй сәнәғәтселәре һәм эшҡыуарҙары союзының вице-президенты, граждандар йәмғиәтен һәм информатизацияны үҫтереү буйынса Президент советтарының ағзаһы, Заманса үҫеш институты идараһы рәйесе Игорь Юргенс "Рейтер" мәғлүмәт агентлығына интервью бирә. Кисәге президент һәм бөгөнгө премьер-министр Владимир Путин яңы Брежневҡа әүерелергә йөрөй, тип белдерә ул. Эш нимәлә һуң? Хәтерләйһегеҙҙер, Рәсәйҙең Төп Законына ҡайһы бер үҙгәрештәр индерҙеләр. Уларҙың берәүһенә ярашлы, 2012 йылда һайланасаҡ президенттың был вазифала тороуы 6 йылға тиклем оҙайтылды. Юргенс фекеренсә, Владимир Владимирович 2012 йылда һайланып (ә уны һайлап ҡуйыуыбыҙға шигем юҡ), 6 йылдан ҡабаттан үҙ кандидатураһын күрһәтһә, һәм халыҡ уны тағы бер осорға һайлап ҡуйһа, ул Рәсәй президенты креслоһында йәмгеһе 12 йыл ултырасаҡ. Был, әлбиттә, Брежнев кеүек оҙаҡ түгел. Әммә Юргенсҡа (нишләптер?) оҡшамай.

Маугли тураһындағы әкиәттә лә бит өйөр башлығы Акела ҡартайғас, бүреләргә кеше балаһы баш булып ала. Үҙен сабый сағында ботарлап ырғытмай ҡарап, имеҙеп үҫтергән инә бүрегә ул мәрхәмәтлек күрһәтә. Уның тыныс ҡартлығының ышаныслы гарантына әүерелә. Беҙҙе лә шул уҡ сценарий, йәғни Киплинг әкиәте көтәме икән? Әкиәттә йәшәргә ризамын. Ә бына джунглиҙарҙа - юҡ.

**Тәһир ИШКИНИН.**

---

*ДӘҒҮӘСЕ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ*

## ӘЛДӘ ТАҺИР БАР

Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға дәғүә итеүселәр араһында талантлы, бай ҙа, ябай ҙа тел менән сәйәси хәл-ваҡиғаларҙы уҡыусыларға еткереүсе Таһир Ишкинин был премияға иң лайыҡ журналист. Хәҙерге матбуғат саралары сәйәси мәғлүмәтте һөҙөп алып, дөрөҫ йүнәлеш биреүе ауыр булып киткән мәлдәрҙә, әлдә Таһир бар, тип ҡыуанам. Бер ваҡиға иҫемә төштө лә, шуны гәзит уҡыусылар менән уртаҡлашырға булдым. Рәсәй һәм Чечен республикаһы араһында низағтар башланған йыл. Бер йыйында барыһы ла чечен халҡын көрәген биреп әрләй, сөнки телевизорҙан нимә күрһәтелә, унда ваҡиғаға ниндәй баһа бирелә, шуға ҡарап ҡына фекер йөрөтә, шунда әйтелгән һүҙҙе ысын итеп ҡабул итә бит халыҡ. Иләп кенә мәсьәләнең айышына төшөндөрөргә тура килде, гел генә Үҙәк телевидение тапшырыуҙарын ҡарап, баҫмаларын уҡып, кеше яңылышып та китергә мөмкин. Таһир Ишкинин республикаларҙың хәлен хата фекергә урын ҡалмаҫлыҡ итеп уҡыусыларға еткерә белә. Юғиһә, анын-тоноп төшөнмәйенсә, көтөүҙәге сүбәк көйшәүселәрҙең йыйрын йырлап йөрөүселәргә әйләнер инек.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Президенты Мортаза Рәхимов Мәскәүҙә Союздар йортонда үткән "Рәсәй һәм Ислам донъяһы: тотороҡлолоҡ хаҡына партнерлыҡ" халыҡ-ара конференцияһы эшендә ҡатнашты. Форум Рәсәй Федераль Йыйылышы Федерация Советы, РФ Сит ил эштәре министрлығы, Ислам конференцияһы ойошмаһы ярҙамында Рәсәй мөфтөйҙәре советы тарафынан ойошторолдо. Конференция эшендә донъяның 40-тан ашыу мосолман иле вәкилдәре ҡатнашты. Форумда Мортаза Ғөбәйҙулла улы ла сығыш яһаны һәм мосолман донъяһы, Башҡортостан мосолмандары өсөн актуаль булған бик күп мәсьәләләр хаҡында һөйләне.

✔БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышы булды. Депутаттар Башҡортостан Республикаһы Конституция суды рәйесе вазифаһына Люциә Ғүмәрованы тәғәйенләне. Ултырышта БР Хөкүмәтенең ике закон проекты ҡаралды. Береһе - БР Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына үҙгәрештәр индереүгә ҡағыла. Республика Хөкүмәте күмәк мәҙәни һәм спорт сараларында йәмәғәт тәртибен боҙған өсөн административ яуаплылыҡ билдәләүҙе тәҡдим итә. Был, вәкәләтле кешеләрҙең тыйыуына ҡарамаҫтан, трибуналарға, сәхнәләргә, спорт майҙансыҡтарына, йүгереү юлдарына, футбол һәм хоккей майҙандарына сығыуға, сит предметтар ташлауға ҡағыла.

✔Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов журналистар менән осрашыуҙа баш ҡала балаларының йәйге ялы тураһында һөйләне. Балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға быйыл төрлө сығанаҡтарҙан 232 миллион һум аҡса бүленгән. 122 мең бала мәктәптәр эргәһендәге 148 көндөҙгө лагерҙа, 5 хеҙмәт һәм ял, 18 ҡала ситендәге һауыҡтырыу лагерҙарында, балалар поликлиникалары һәм реабилитация үҙәктәре эргәһендәге 17 көндөҙгө стационарҙарҙа ял иткән.

✔Өфөгә танышыу сәфәре менән Болгария Республикаһының рәсми делегацияһы килде. Сәфәрҙең төп маҡсаты - Дөйөм Европа йорто тураһындағы идея юҫығында Болгария менән Рәсәй араһындағы төбәк хеҙмәттәшлеге ҡоронда ҡатнашыу. Ҡунаҡтар Бөтә Рәсәй күҙ һәм пластик хирургия үҙәгендә, "Алексеевка" совхозында булды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҪКЕ МАШИНА ӨСӨН - АҠСА

**Ҡабаттан һатмаһындар өсөн хөкүмәт иҫке автомобилдәре булған кешеләргә 50 меңгә тиклем аҡса түләйәсәк. Был сара ҡала ихаталарын йылдар буйы торған иҫке машиналарҙан бушатасаҡ, экологияға зыян аҙыраҡ киләсәк.**

Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә, фаразлауҙар буйынса, Мәскәү, Мәскәү яны, Санкт-Петербург, Һамар, Нижегородск, Ульяновск өлкәләрендә һәм Алыҫ Көнсығыш төбәктәрендә был сара киләһе йылдан ҡулланыла башлаясаҡ. Әгәр ҙә тәжрибә уңышлы үтһә, ҡайһы бер үҙгәрештәр менән был программа илдең башҡа төбәктәренә лә таратыласаҡ. Ил етәкселәре 10 йыл һәм унан да оҙайлыраҡ ҡулланылышта булған машиналар өсөн был аҡсаны түләргә әҙер, тик бының өсөн транспорттың ауырлығы 3,5 тоннанан артмаҫҡа, юл-транспорт фажиғәләренә тарымаған булырға һәм хужа унының менән 1 йылдан ашыуыраҡ йөрөгән булырға тейеш. Аҡса ҡулаҡса менән түгел, ә 50 мең һумға тиклем номиналлы сертификат рәүешендә түләнәсәк. Сумманың күләмен билдәләгәндә автомобилдең тотонолған машиналар баҙарында торған хаҡы иҫәпкә алынасаҡ. Иҫке машина өсөн аҡса сертификаты унының хужаһы яңы машина алған саҡта ғына түләнә һәм унының үҙебеҙҙең илдә етештерелгән булыуы мотлаҡ.

# СИТ ИЛДЕКЕН - ҮҘЕБЕҘҘЕКЕНӘ

**Сит илдә етештерелгән дарыуҙарҙы үҙебеҙҙә етештерелгән аналогтар менән алыштырыу ярҙамында миллиард һумдарҙы һаҡлап ҡалырға мөмкинлек тыуасаҡ. Был турала Башҡортостанда үткән түңәрәк өҫтәлдә Рәсәй фармацевтик етештереүселәре Ассоциацияһы директоры (АРФП) Виктор Дмитриев белдерҙе.**

Башҡортостан Рәсәйҙә иҡтисади яҡтан тотороҡло төбәк булараҡ ҡына түгел, ә дарыуҙар етештереү сәнәғәте менән дә билдәле. Шуға ла күтәрелгән был һорау республика өсөн дә бик мөһим һанала. Эксперттар белдереүенсә, дәүләт һатып алған дарыуҙар араһында Рәсәйҙә етештерелгәне аҙ, мәҫәлән, 2009 йылдың тәүге яртыһында был һан аҡсалата сағылышында 4,5 процент тәшкил итә. Әммә был Рәсәйҙә етештерелгән дарыуҙың сифаты насар, тигәнде аңлатмай. Сит ил дарыуҙарын күпләп ҡулланыуҙың факторҙары бер нисә: беренсенән, Рәсәй фармацевтика етештереүселәре яңы ныҡлап аяҡҡа баҫа, икенсенән, төбәктәрҙә был ситуацияға анализ үткәрелмәй һәм улар үҙебеҙҙә етештерелгән дарыуҙарҙы һатып алырға ашҡынып тормай. Һөйләшеү барышында урындағы етештереүселәргә йә дәүләт ярҙамы, йә инвесторҙар кәрәклеге тураһында ла һүҙ булды.

АФАРИН!

# КЕЙЕҘ БАҪЫУ...

## йәштәр ҡулына күсте



**Кейеҙ, тигәндә, иң беренсе ата-бабаларыбыҙҙың боронғо көнкүреше, йәйләү, теҙелеп киткән кейеҙ тирмәләр күҙ алдына килеп баҫа. Һуңғы йылдарҙа башҡорт кейеҙе тураһында күп һөйләнелә, яҙыла - был бик ҡыуаныслы хәл. Унының "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында ҡатнашыуы ла юҡҡа түгел, сөнки кейеҙ башҡорттоң кейеме лә, түшәге лә булып хеҙмәт иткән, ҡыштарын сатнама һыуыҡтарҙан һаҡлаһа, йәйгеһен ҡайнар ҡояштан ышыҡ булған. Беҙгә кейеҙҙең медицина күҙлегенән ҡарағанда һаулыҡ өсөн файҙалы, кейеҙ баҫыуҙың ата-бабаларыбыҙҙың борондан килгән йолаһы икәнен иҫтә тотоу, был оҫталыҡты киләсәк быуындарға тулыһынса еткереү мөһимдер.**

Ошо көндәрҙә БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында студенттарҙың диплом һәм уҡыу эштәренән кейеҙ күргәҙмәһе ойошторолдо. "Студенттарҙың кейеҙ буйынса диплом эштәре иҫ китерлек, - тип һөйләне "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһы етәксеһе Кәримә Кайдалова. - Замана йәштәре ижади эҙләнә, ҙур теләк һәм ҡыҙыҡһыныу менән кейеҙ баҫа, уларҙың эштәрендә халыҡсанлыҡ ярылып ята..."

Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның художество-графика факультеты бына ун йыл инде кейеҙ баҫыу һөнәрен тергеҙеү буйынса эшләп килә. Университеттың презентация залы, кейеҙ баҫыу өсөн оҫтаханаһы бар. Т.Мәсәлимов һәм унының ярҙамсылары, уҡыусылары был йоланы тергеҙеү өсөн күп көс һала. Унының уҡыусылары республиканың бөтә районларына таралған, кейеҙ баҫыу буйынса төрлө семинар, күргәҙмәләрҙә әүҙем ҡатнаша.

- Беҙ студенттарҙы кейеҙ баҫыу сәнғәтенә инде өсөнсө йыл өйрәтәбеҙ. Был махсус курс булараҡ уҡыу планына ла индерелде, тип һөйләй Тәлғәт Мәсәлимов. - Йәштәрҙә был һөнәргә ҡыҙыҡһыныу йылдан-йыл арта ғына бара. Был турала уларҙың үҙ ҡулдары менән яһалған эштәре, яҙған дипломдары һөйләй.

Быйылғы конкурста Башҡортостандан ғына түгел, ә Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән дә кейеҙ оҫталары ҡатнаша. Улар үҙ төбәктәрендә түңәрәктәр асып, балаларҙы, йәштәрҙе кейеҙ баҫыу серҙәренә төшөндөрә икән. Шулай итеп, кейеҙ конкурсы яйлап тағы ла киң билдәлелек ала бара. Ойоштороусыларҙың тиҙҙән кейеҙ буйынса бындай конкурстарҙың бөтә Рәсәй фестиваленә әйләнеренә өмөтө ҙур.

**Шулай итеп...**

**Ысынлап та, башҡорт кейеҙе шөғөлө яңырыу осоро кисерә, тип әйтә алабыҙ. Ошо семинарҙа кейеҙ күргәҙмәһен иҫем китеп ҡарап торҙом. Быға тиклем өләсәйемдең аҡ һәм ҡара йөндәрҙән эшләгән ябай кейеҙҙәрен генә күргәнем бар ине. Ә бында... Замансалап тороп ниндәй генә һырҙар һалмағандар ҙа, ниндәй генә биҙәктәр төшөрмәгәндәр! Баҙарҙарҙа һатылған затлы-затлы келәмдәрең ары торһон! Баҡтиһәң, хәҙер кейеҙҙән берет, шапка, шарфтар, сумка, йомшаҡ аяҡ кейемдәре, хатта заколка, алҡа кеүек биҙәүестәр ҙә эшләйҙәр икән. Һәм улар күптән инде модала! Ошо йоланы тергеҙеүсе йәштәребеҙгә: "Машалла!" - тип әйтергә генә ҡала.**

**Нәзирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

ХОККЕЙ

# ИКЕ ЕҢЕҮ, БЕР ОТОЛОУ

**Сит ҡалаларҙа өс матч үткәргәндән һуң "Салауат Юлаев", ниһайәт, үҙ боҙонда Хабаровскийҙың "Амур" командаһын ҡабул итте. Әйтергә кәрәк, "Өфө-Арена" боҙ һарайы ни тиклем генә ҙур булмаһын, көйәрмәндәрҙең барыһын да һыйҙыра алманы. Спорттың был төрөн яратыусыларҙың байтағы баштарын эйеп, ҡайтып китергә мәжбүр булды, ә билеты булған бәхетлеләр юлаевсыларҙың бик матур, мауыҡтырғыс уйынын ҡарап һоҡланды.**

Матч майҙан хужаларының көслө һөжүме менән башланды. Йәшел формалы юлаевсылар Алыҫ Көнсығыш командаһы ҡапҡаһына тулҡын-тулҡын булып ябырылды. Уйын башланыуҙың туғыҙынсы минутында уҡ Өфө хоккейсыһы Дмитрий Калинин ҡунаҡтар ҡапҡаһын асты. Күп тә үтмәй, юлаевсылар аҙсылыҡта ҡалды. Шулай ҙа шайба майҙан хужаларыныҡына түгел, ә ҡунаҡтар ҡапҡаһына ояланы. Кирилл Кольцов Алыҫ Көнсығыш уйынсыларын йырып үтеп, Андрей Таратухинға шайба сойорғотто. Ул бындай бүләкте оҫта файҙаланды һәм иҫәпте икегә еткерҙе. Бынан һуң Андрей Таратухин йәнә бер шайба индерҙе, ә еңеүле голды юлаевсылар сафына яңы баҫҡан Патрик Торесен сәпәне. Был мауыҡтырғыс уйында майҙан хужалары 4:2 иҫәбе менән отто.

**22 сентябрҙә** Өфө егеттәре Түбәнге Кама ҡалаһынан "Нефтехимик" командаһы уйынсылары менән көс һынашты. Хәйер, көс һынашты, тип әйтеү дөрөҫлөккә бик үк тура ла килмәй. Өҫтөнлөк тулыһынса майҙан хужалары яғында булды. Дөрөҫ, беренсе осорҙа таблолағы 0:0 һандары үҙгәрмәне. Икенсе осор башланып китеү менән үк Алексей Медведев иҫәп асты. Күп тә үтмәй, Олег Твардовский Иван Касутин ҡапҡаһына икенсе шайбаны сәпәне. Икенсе осор тамамланып килгәндә юлаевсылар сафына яңы баҫҡан Виктор Козлов ҡунаҡтар ҡапҡаһы артында өсөнсө тапҡыр ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Өсөнсө осорҙа Өфө егеттәре йәнә дүрт шайба сәпәне. Етенсе еңеүле шайбаны Олег Твардовский индерҙе. Уйын юлаевсылар файҙаһына 7:2 иҫәбе менән тамамланды.

**24 сентябрҙә** "Салауат Юлаев" Тольятти ҡалаһының "Лада" командаһы менән уйнаны һәм 1:3 иҫәбе менән отолдо. Үкенесле отолоу! Был уйын юлаевсылар өсөн әсе һабаҡ булып ҡына ҡалһын, тип теләйек.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Үткән аҙнала Өфөлә тәүге ауыл хужалығы йәрминкәләре булып үтте. Өфөләләргә ун дүрт майҙанда ауыл хужалығы продукцияһы тәҡдим ителде. Йәрминкәлә бигерәк тә Ғафури, Шаран һәм Өфө райондары әүҙем ҡатнашты. Йәрминкәләр был аҙнала ла, теге аҙналарҙа ла дауам итәсәк.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Республика көнөндә буласаҡ мәҙәни һәм спорт саралары барланды. Баш ҡаланың барлыҡ майҙандарында ла халыҡ өсөн байрамдар ойоштоpоласаҡ. Иң ҙур сара, әлбиттә, Ҡала советы эргәһендәге майҙанда буласаҡ. 11-дә был майҙанда "Фабрика звезд" проектында ҡатнашыусы Ираклий һәм йәш рипер Dino MC 47 йырлаясаҡ. Бынан тыш, өфөләләр 25 минутлыҡ лазер-шоу һәм фейерверкты тамаша ҡыласаҡ.

✓Ҡырауҙар һөжүме туҡталһа ла, сентябрь аҙағына тиклем көндәр ун градустан да йылыраҡ булмаясаҡ, ти гидрометеорологтар. Күптәрҙе фатирҙарҙа ҡасан йылы бирерҙәр, тигән һорау борсой. Ҡағиҙә булараҡ, йылытыу сезоны урамда өс көн буйы 8 градус йылы торһа ғына башлана. Әле температура 8-ҙән аҫҡа төшкәне юҡ, тимәк, фатирҙар ҙа әлегә йылытылмаясаҡ. Етмәһә, октябрь башында көндәр 16 градусҡа тиклем йылыта, тиҙәр.

✓БР Хөкүмәте Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының санитар авиация бүлексәһенә һигеҙ миллион һум торған реанимобиль һатып алып тапшырҙы. Йыл аҙағына тиклем бүлексәнең ошондай уҡ тағы бер реанимобиль менән тулылыныуы көтөлә.

✓Телефон аша ҡыҫҡа ғына 128 һандарын йыйып, БР Эске эштәр министрлығының махсус хеҙмәтенә - ышаныс телефонына әлегә алаһығыҙ. Ярты йыл эшләү дәүерендә уға хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренең законһыҙ ҡылыҡтары, ниндәйҙер енәйәт эштәре һәм башҡа хәлдәр тураһында 3740 шылтыратыу булған. Шылтыратыуҙар дауам итә.

✓1 октябрҙән ҡағыҙ ун һумлыҡтарҙы тимер ун һумлыҡтар алыштырасаҡ. Тимер аҡсаларҙың ҡулланыу ваҡыты оҙайлыраҡ булыуын күҙҙә тотоп, Үҙәк банк ошондай аҡсалар менән күпмелер һумды экономияларға ниәтләнә. Яңы аҡса индереү һәм ҡағыҙ аҡсанан ҡотолоу аҡрынлап тормошҡа ашырыласаҡ.

***✓ Һәр бер ата-әсә үҙенең балаһына яҡшыраҡ белем бирергә, йәмғиәттә "модалы" тип һаналған һөнәргә уҡытырға тырыша. Уҡый аламы ул, юҡмы - был турала, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер кем дә уйлап бирмәй.***



БЕЛЕМ УСАҒЫ



# ЙӘШ БЕЛГЕСКӘ...

## ауылда яҡшыраҡ

**Өфө районының Михайловка ауылында урынлашҡан 83-сө һөнәрселек училищеһы эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше - ауыл хужалығы белгестәре әҙерләү. Агросәнәғәт өлкәһен кадрҙар менән тәьмин итеүсе был уҡыу йорто яңыраҡ "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә Мәскәүҙә уҙғарылған конкурста еңеү яулап, башланғыс һөнәри белем биреү учреждениелары араһындағы лайыҡлы урынын тағы ла бер тапҡыр раҫланы.**

**Ҡырҡ йылдан ашыу тарихы булған белем усағында ниндәй яңылыҡтар, студенттарға башланғыс һөнәри белем биреүҙә ниндәй үҙгәрештәр бар? Ошо һорауҙарға яуап алыу өсөн 83-сө һөнәрселек училищеһының директоры Илшат Нәжмитдин улы ӘМИНЕВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

### Студенттар көтөп ҡалабыҙ

Башланғыс һөнәри белем биреүсе һөнәрселек училищелары һәр районда бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең училищела төрлө райондарҙан килгән студенттар белем ала, был уҡыу йортоноң күптән эшләп килеүе менән дә бәйле, күрәһең. Быйыл студенттар йыйыуы ауырыраҡ булды. Бының сәбәптәре төрлөсә, тип уйлайым. Беренсенән, 1992-1993 йылғы балалар уҡырға килде, ә был йылдарҙа тыуым әҙерәк булған, тимәк, демографияның насарайыуынан уҡыу учреждениелары ла зыян күрә. Икенсенән, һәр бер ата-әсә үҙенең балаһына яҡшыраҡ белем бирергә, йәмғиәттә "модалы" тип һаналған һөнәргә уҡытырға тырыша. Уҡый аламы ул, юҡмы - был турала, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер кем дә уйлап бирмәй. Уҡыу йылы башланып, бер-ике ай үткәс, баланың уҡый алмауы асыҡланһа, беҙгә шылтырата башлайҙар. Шул сәбәпле, элек 25 августа тиклем студенттар йыйып бөтөргә тейеш булһаҡ, хәҙер Мәғариф министрлығы рәсми рәүештә башланғыс белем биреү учреждениеларына декабрь айына тиклем ҡабул итеү ваҡытын оҙайтырға мөмкинлек бирҙе. Бөгөнгө көндә һөнәрселек училищеһында бөтәһе 190 студент белем ала, уларҙың 80-ен быйыл ҡабул иттек, сентябрь-октябрь айында тағы ла уҡырға килергә теләүселәр булыр, тип көтәбеҙ.

### Умартасылыҡ - төп йүнәлеш

Училищела белем биреү өс йүнәлеш буйынса алып барыла: механизаторҙар әҙерләү, үҫемлекселек, умартасылыҡ. Умартасы дипломына ҡушып, В,С категорияларына водитель танытмаһы ла алып сығырға мөмкинлек бар. Был йүнәлештәрҙең өсөһө лә бер кимәлдә уҡытылһа ла, умартасылыҡты беҙ төп йүнәлештәрҙең береһе тип һанайбыҙ, сөнки уның буйынса башҡа бер башланғыс белем биреү учреждениеһында ла беҙҙәге кеүек төплө белем бирелмәй. Икенсе яҡтан, уҡыу йорто ойошторолған тәүге йылдарҙа беҙҙә нигеҙҙә умартасылыҡ буйынса белем бирелгән.

Умартасы булырға теләүселәр һаны бер мәл кәмеп алһа ла, һуңғы йылдарҙа был һөнәрҙең абруйы тағы артты. Ҡасандыр үҙҙәре ошонда уҡып сыҡҡан кешеләрҙең балалары ла белемде бында ала. Былтыр 30 йәште үткән өс кеше, унан алдағы йылда 50 йәшлек бер ағай уҡып ҡайтты, йәғни умарта тотоп йәшәргә теләгәндәрҙе йәшенә ҡарамай, уҡырға алабыҙ. Умартасылыҡ - ҡатмарлы һөнәр, ул тәбиғәт шарттары, башҡа тышҡы факторҙар менән бәйле. Был өлкә яҡшы килем килтерә, әммә көтөлмәгән хәлдәрҙән дөрөҫ сыға белеү өсөн төплө белем кәрәк. Бал ғына түгел, башҡа биологик продукттарҙы ла - инә ҡорт һөтө, һитә, һеркә, ҡорт елеме һәм ағыуын да әҙләп ала белеп, һата алһаң, шул саҡта ғына бал ҡорто килтергән килем бермә-бер арта, тип уйлайым. Студенттарға белемде махсус фәндәр буйынса 28-30 йыл уҡытыу стажы булған белгестәр бирә, улар бик тәжрибәле уҡытыусылар, өйҙәрендә үҙҙәре лә умарта тота, дәрестәрҙе лә ҡыҙыҡлы итеп алып бара.

Үҫемлекселек һөнәрен дә алғы планға ҡуйыуыбыҙ аңлашылалыр, тип уйлайым, сөнки беҙҙең эргәлә генә "Алексеевка" совхозы бар, ул райондың ғына түгел, ә тотош республиканың иң алдынғы йәшелсә етештереүсе ойошмаһы һанала. Был совхоздың теплицалары ғына 30 гектарҙан ашыу, шуға күрә уларға белгестәр кәрәк булып тора. Ҡыҙҙар бер юлы ике-өс һөнәр алырға тырыша, сөнки эшкә урынлашыу мөмкинлеге арта. Училищела яңы һөнәрҙәрҙе йыш асабыҙ, мәҫәлән, автомеханик, электромонтер, фельдшер, ветеринар - ҡыҫҡаһы, ауыл хужалығы буйынса ниндәй һөнәрҙәр булһа, уларҙың барыһы буйынса ла уҡытырға рөхсәтебеҙ бар.

Йәшерен-батырыны юҡ, үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң ауыл хужалығына иғтибар кәмене. Әммә хәҙер бар ерҙә лә фермерлыҡ үҫешә, башҡа төрлө хужалыҡтар ҡалҡып сыҡты, иген үҫтереү ҙә яйлап шәхси формаға күсеп бара. Ауыл хужалығына хөкүмәт ярҙам итергә тырыша, ауыл кешеһенең продукция етештереү, уны ҡалаға килтереп һатыу мөмкинлеге бар, төрлө дәүләт программалары эшләй. Был, бер яҡтан, йәшәйем, эшләйем, тигән кешенең күңелендә иртәгәге көнгә ышаныс тыуҙырһа, икенсенән, ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуҙың бер юлы ла. Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алып, студенттарҙы уҡытыу формаһын да үҙгәртергә тырышабыҙ. Ауыл хужалығын үҫтереү, эшҡыуарлыҡ һ.б. буйынса дәүләт программаларын студенттарға еткерәбеҙ. Минең уйымса, эш хаҡы түләнмәгән осраҡта ла ауылда йәшәп китеүе еңелерәк, сөнки ҡалала 12 квадрат бүлмә һатып алыу өсөн генә лә 600-700 мең һум аҡса кәрәк. Ә ауылда үҙең тырыш булһаң, тыуғандар ярҙамы менән йорт һалып инеү мөмкинлеге бар. Ошоларҙы йәш белгестәргә аңлатырға тырышабыҙ ҙа инде. Йыл һайын училище тамамлаған белгестәрҙең 60 проценттан ашыуы ауылға ҡайтып эшләй.

### Уҡыу һәм йәшәү өсөн шарттар бар

Кешене тәрбиәләйем, тиһәң, иң тәүҙә яҡшы шарттар булдырырға кәрәк. Шуға ла училищела матди-техник базаны тулыландырыу һәм яңыртыу маҡсатында байтаҡ эш эшләнә. Хөкүмәт ярҙамы менән ятаҡты ремонтлай алдыҡ, милли проект буйынса конкурста еңеп алған 32 миллион һум аҡса уҡыу кабинеттарын, оҫтаханаларҙы, техника һәм ҡорамалдарҙы яңыртыу мөмкинлеге бирҙе. Заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған лабораториялар ҙа студенттарға белем алыуҙа ярҙам итәсәк, яңы КамАЗ, МТЗ, ХТЗ тракторлы ла булдыҡ. Сәскес, культиваторҙар, картуф үҫтереү комплексы һатып алдыҡ.

Практик эш күптән яйға һалынған, училищеның 80 гектар ере бар, унда иген сәсәбеҙ, умарталар һаны ла 100-ҙән ашыу. Үҫемлекселек буйынса уҡыған студенттар "Алексеевка" совхозы теплицаларына йөрөп эшләй.

Студенттың белемен генә түгел, һаулығын да ҡайғыртыу мөһим икәнен яҡшы аңлайбыҙ, сөнки һаулығы насар белгестең бер ерҙә лә кәрәге булмаясаҡ. Был йәһәттән төрлө түңәрәктәр, секциялар даими эшләй. Спорт ярыштарында ҡатнашабыҙ, был саралар барыһы ла балаларҙы бер-береһе менән аралашырға өйрәтә. Ҡыҫҡаһы, училищела аҡыллы, йәмғиәт өсөн кәрәкле белгестәр тәрбиәләү өсөн барыһы ла эшләнә.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## Урлашыумы, мутлашыумы?

**Велосипедымды магазин янына һөйәнем дә, кеүәҫ алырға инеп киттем. Кире әйләнеп килеүемә, велосипедтан елдәр иҫкән. Милицияла, бур тотолған хәлдә лә уны яуапҡа тарттырыуы ҡатмарлы мәсьәлә, тип аңлаттылар. Йәнәһе, кешеләрҙең, ана, машинаһын ҡыуып алып китәләр, ә һеҙҙең - ниндәйҙер велосипед, имеш. Ғәйепләне тотҡан хәлдә лә, ул урланым, тип әйтмәйәсәк, ә осраҡлы рәүештә таптым, тиһә, был енәйәткә иҫәпләнмәй, тип тә өҫтәнеләр милицияла. Был нимә, "баштан себен" осороумы, әллә ысынлап та шулаймы?**

**И. Вәлишин.**

Милиция хеҙмәткәрҙәре һеҙҙең башығыҙҙы бутаған. Эйе, ысынлап та, РСФСР-ҙың 1960 йылғы Енәйәт кодексынан айырмалы, яңы Енәйәт кодексы буйынса, табып алғанды үҙләштереү йәки осраҡлы рәүештә сит кешенең ҡиммәтле милкен тотоноу енәйәт тип иҫәпләнмәй. Ләкин милексенең биләмәһенән алып сығылмаһа ла, тәғәйен бер урында ваҡытлыса ҡалдырып торолһа (махсус ҡараусыһы булмаған хәлдә лә), уның юғалыуы урлашыу булып иҫәпләнә һәм ғәйепләнең ғәмәле сит милекте урлау тип баһалана.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Хәлде шәбәйтә торған иҙмә

Аппетитты күтәреп, бауырҙың үт ҡыуыу һәләтен шәбәйтеп, ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшырта, хәлде шәбәйтә торған иҙмә: Бер баш һарымһаҡты иҙеп, 2 лимон һутын өҫтәп, 100 г бал, ярты стакан һыу ҡушып болғатырға. Көнөнә бер тапҡыр алты көн дауамында эсергә. Ашҡаҙан, эсәк, ашҡаҙан аҫты биҙе ауырыуҙары киҫкенләшкән ваҡытта ас ҡарынға эсергә ярамай.

### Андыҙ тамыры

Андыҙ тамыры үпкә һәм тын юлдары ауырыуҙарын дауалай. Дарыухананан һатып алһаң, ҡабында яҙылған инструкция буйынса ҡулланырға. Үҙең йыйһаң, апрель йә сентябрь айҙарында ҡаҙып алырға. Бер ҡалаҡ туралған андыҙ тамырына бер стакан һыу өҫтәп, 10-15 минут ҡайнатырға. Ошо саҡлы ваҡытҡа ҡалдырып торорға ла, һөҙөп алып, көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап 2 ай буйы эсергә.

Андыҙ тамыры ашҡаҙан, эсәк ауырыуҙарын дауалағанда ла һәйбәт файҙа бирә. Эт тырнағы сәскәһе, етен орлоғо, ҡайын япрағы ҡушып ебәрһәң, тиҙерәк йүнәлерһегеҙ. Нервылар системаһын тынысландырыу өсөн андыҙ тамыры менән бергә юл япрағы, ҡомалаҡ, һары мәтрүшкә, валериана үләндәрен ҡушып эсергә була. Бик ҡаты йәки оҙайлы йүтәл йонсотһа, тәмәкене ташларға уйлаусыларға бер ҡалаҡ андыҙ тамырын шул уҡ күләмдә фиалка сәскәһе менән ҡушып ҡайнатып, 5 көн эсергә. Фиалканы 5 көндән артыҡ эсергә ярамай. Артабан 7 көн йүкә сәскәһе, тағы 10 көн ҡайын япрағы ҡушып эскәс, ике ай тулғансы андыҙ тамыры эсеүҙе дауам итергә.

Оҙаҡ бөтмәй яфалаған йүтәлдән:

20 гр туралған андыҙ тамырына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатҡас, һөҙөп алырға. Йүтәл бөткәнсе көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Туғандарығыҙҙа ярамаған эш күренһә, яҡшы һүҙ менән: "Былай булмағыҙ, ғәйептер!" - тип ҡаршылыҡ күрһәтегеҙ һәм бындай эштең килешмәүен аңлатығыҙ, матур юлға күндерегеҙ.*






# ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Туғандар

● Ата-әсәгеҙҙән һуң туғандарығыҙ - иң яҡын кешеләр. Шуның өсөн улар менән һәр ваҡыт әҙәпле һәм мәрхәмәтле булығыҙ. Уларҙың ололарын ата-әсә кеүек иҫәпләп һөйләшегеҙ, итәғәтле ғәмәл итегеҙ. Кеселәренә шәфҡәтле булығыҙ, уларҙы һис рәнйетмәгеҙ һәм ҡаты күңелле булмағыҙ. Оятһыҙлыҡ һәм тәрбиәһеҙлектә уларға үрнәк күрһәтмәгеҙ, уларҙы һүкмәгеҙ, ҡулдарында булған әйберҙәрен тартып алмағыҙ. Сөнки был уларҙың холҡон боҙоуға һәм ата-әсәне асыуландырыуға сәбәп булыр.

● Туғандарығыҙҙа ярамаған эш күренһә, яҡшы һүҙ менән: "Былай булмағыҙ, ғәйептер!" - тип ҡаршылыҡ күрһәтегеҙ һәм бындай эштең килешмәүен аңлатығыҙ, матур юлға күндерегеҙ.

● Туғандарығыҙ өҫтөнән ата-әсәгеҙгә һүҙ әйтмәгеҙ. Сөнки бындай балалар ошондай эштәргә ғәҙәтләнә, ҙурайғас та һүҙ йөрөтөүсе була. Әгәр була ҡалһа, матур яҡтан ғына һөйләгеҙ.

● Туғандарығыҙҙың әйтеүҙәрен көтөп тормай, һәр эштәрендә ярҙамсы булығыҙ, ҡулығыҙҙан килгән изгелектәрҙе уларҙан һис ҡыҙғанмағыҙ.

● Туғандарығыҙҙың серҙәрен матур һаҡлағыҙ, уларға шатлыҡлы хәбәрҙәр һөйләгеҙ. Әгәр уларға зарар килтерә торған булһа, ямандарын һөйләмәгеҙ. Һүҙ һәм фиғелдәрегеҙ менән уларға ихлас булығыҙ. Ғәйептәрен йәшерегеҙ. Һәр ваҡыт асыҡ йөҙ һәм киң күңел менән ҡаршы алығыҙ.

● Ҡайһы бер балалар шулай була. Аталары үлгәс, мал бүлеү өсөн туған һәм ҡарындаштары менән асыуланыша. Бер-береһе менән әҙәпһеҙ була. Ҡиммәтле ваҡыттарын һәм ғәзиз малдарын тәләф итә. Үҙҙәренең ҡан һәм тән ҡарындаштарын рәнйетеп, сит кешенең ҡорһағын туйҙыра. Ошо юлдан китһәләр, үҙҙәре лә бәхетһеҙ булырҙар. Ата-әсәләренең исемдәрен дә хөрмәтһеҙ итерҙәр, ғаилә һәм ырыуҙарын мәсхәрәлеккә ҡалдырырҙар. Һеҙ үҫкәс, бындай балалар кеүек булмағыҙ. Юғиһә оят була. Киреһенсә, туғандарығыҙ менән һәр ваҡыт бергә булығыҙ, нәжесте (боҙоҡ холоҡ һәм асыу сәбәптәрен) һәр ваҡыт тупраҡ аҫтына күмегеҙ. Бындай булғанда аҙ мал да оҙаҡ һаҡлана, ҡыҫҡа ғүмер ҙә ҡатмарһыҙ үтер.

## Яҡын ҡарындаштар

● Ата-әсә һәм туғандарығыҙҙан һуң һеҙгә иң яҡын кешеләр үҙегеҙҙең ҡарындаштарығыҙ булыр. Улар ҙа һеҙгә бәхет һәм рәхәтлек теләй. Шуның өсөн уларға ата-әсә һәм туғандарығыҙға булған кеүек мөнәсәбәттә булығыҙ. Бөтәһен дә бер тигеҙ, дуҫ күрегеҙ. Ауырыһалар, хәлдәрен һорағыҙ, шатлыҡ-ҡайғыларын уртаҡлашығыҙ. Үтенестәрен матур итеп үтәгеҙ.

● Ялҡау һәм боҙоҡ холоҡло заттарға изгелек итеү ялҡаулыҡтарын арттырыуға, боҙоҡлоҡтарын көсәйтеүгә сәбәп булған өсөн, яҡын ҡарындаштарығыҙға изгелек иткән ваҡытта мәхрүм ҡалғандарҙы һәм саф күңеллеләрҙе айырып ҡарағыҙ. Йәғни изгелекте тейешле урындарҙа сарыф итергә тырышығыҙ.

(Дауамы бар).

АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

# ЙЫЛМАЙ ҺӘМ ИЗГЕЛЕК ҠЫЛ -

## оҙаҡ йәшәү сере шунда



**Күптәр йә үткәне, йә киләсәге менән йәшәй, ә бөгөнгөһөнөң ҡәҙерен белмәй. Һөҙөмтәлә, ике арала йөрөп, ғүмер үткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Шундай кешеләр ҙә бар: улар Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмерҙең һәр минутын, һәр мәлен тойоп, уның ҡабатланмаҫ хозурлығына һоҡланып, шунан йәм таба белеп, һәр көнөн лайыҡлы итеп йәшәргә тырыша. Сталинградты дошман ғәскәрҙәренән һаҡлауҙа ҡатнашҡан Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, оло йөрәкле, изге күңелле 90 йәшлек Сәүиә инәй МӘСӘҒҮТОВА тап шундайҙарҙан. Бер быуаттай ғүмер кисергән ағинәй заман, ғүмер, кешелек асылы хаҡында үҙ фекерҙәре менән уртаҡлаша. Һүҙ - Сәүиә инәйгә:**

### Сталинградты һаҡланым

Мин Илеш районы Илеш ауылынанмын. Алты бала үҫкән ҙур ғаиләлә тәрбиәләндем. Әсәйебеҙ кинйәбеҙҙе тапҡан ваҡытта мәрхүм булды, күп тә тормай, кесе туғаныбыҙ ҙа үлеп китте. Ғаиләгә бер бала эйәртеп, үгәй инәй килде. Беҙгә ҡарата һәйбәт булды ул. Шуныһына рәхмәтлемен: ул мине эшкә өйрәтте. Баҡса ҡарау булһынмы, һыйыр һауыумы - барыһы ла миңә йөкмәтелә ине. Ҡушҡанын үтәгәс, ул да мине яратты.

Бөйөк Ватан һуғышында ғаиләбеҙҙән дүрт кеше ҡатнаштыҡ. Ағайым 17-се танк дивизияһында хеҙмәт итте, бик яҡшы танкист булды. Хәлил ҡустым алғы һыҙыҡҡа эләгеп, тәүге бәрелештә үк хәбәрһеҙ юғалды. Үгәй ҡустыбыҙ һуғышҡа барып етмәгән, Әлкәлә әҙерлек үткән саҡта үлеп ҡалған. Мин Сталинградты немец ғәскәрҙәренән һаҡлауҙа ҡатнаштым. Дүртөйлө районынан тәүгеләрҙән булып илле ҡыҙҙы һайлап алдылар, улар араһында мин дә бар инем, ул саҡта миңә 22 йәш ине. Беҙ, 3 430 ҡыҙ, башҡорт дивизияһының тәүге эшелоны булып, 1942 йылдың 20 майында Сталинградҡа барып еттек. Был ваҡытта немецтар ҡаланан 600 километр алыҫлыҡта ине. Беҙҙе тәүҙә самолетҡа атырға өйрәттеләр, зенитчица булдыҡ. Беҙҙең батареяла 132 кеше ине. Мин, кеше етмәгәнлектән, бер үк ваҡытта санинструктор һәм ашнаҡсы булып эшләнем.

Беҙ дошман һөжүменән Сталинград заводын, Варапоново, Котельниково, Дубовка станцияларын һаҡланыҡ, 10-25 километр алыҫлыҡта алғы һыҙыҡта йөрөнөк. Баш осонан егермешәр-иллешәр дошман самолеты осоп үтә лә, нефть бактарына бомба ташлай, бөтә нәмә яна, көндө лә, ҡояшты ла күрерлек түгел. Волганың нисек итеп һелкенеп тороуын күрҙек. Иң мәхшәр, иң ауыр, иң көсөргәнешле алыш Сталинградта булды, шуға ла мин уны еңеүсе ҡала, тип иҫәпләйем. Ул еңгәс, бүтәндәр юлға һалынды. Һуғышта күпте күрергә, күпте кисерергә тура килде. Һуғыш мине сыныҡтырҙы ла, эшкә лә өйрәтте, ҡыйыулыҡ та тәрбиәләне.

### Аҡса ҡолдары хәүефләндерә

Беҙҙең заман кешеләре аҡса ҡоло булманы, бер киҫәк икмәге менән дә бүлешергә әҙер ине. Беҙҙең замандаштар һәр ваҡыт кешене ҙурлай, ашата, ҡайғыһын уртаҡлаша белде. Хәҙерге заман кешеһенә аҡса булһын да, байлыҡ булһын. Бөгөн кеше өйөн мебель менән тултыра, ә балаларына торорға урын юҡ. Мин донъяла күпте күрҙем, әммә бөгөнгө кеүек матди ҡиммәттәрҙең рухи ҡиммәттәрҙән өҫтөн тороуын, намыҫ, выждан, ғәҙеллек төшөнсәләренең юғала барыуын күреү барыһына ҡарағанда аяныслыраҡ. Телевизорҙан тик үлтереш, әхлаҡһыҙлыҡ күрһәтелә, әсәләр балаларын ташлап китә, ирҙәр ҡатын алмаштыра, ғаиләләр тарҡала. Әле беҙ тарихта иң алама ваҡыт кисерәбеҙ. Кеше бөгөн аҡса өсөн үҙен әрәм итә. Бәхет аҡсала түгел бит, шуны аңлау кәрәк.

### Һөйгәнемә түгел, яҙғанына кейәүгә сыҡтым

Ауылдағы мәктәптә Ғафуров тигән башҡорт ағайы беҙҙе әсә теленән уҡыта торғайны. Уның шул тиклем матур, йомшаҡ итеп һөйләүенә, ябайлығына, эскерһеҙлегенә ҡарап, ирем башҡорт булһын ине, тип теләй торғайным. Теләгем тормошҡа ашты. Ғафури егете Зиннур менән ғаилә ҡорҙом. Ә уға кейәүгә сығыуым ошолайыраҡ килеп сыҡты. Мин ул саҡта Өфөлә эшләй инем. Әхирәтем таныш егетенә минең фотографиямды күрһәткән. Ул иһә: "Мин уны беләм, беҙ һуғышта бергә хеҙмәт иттек, беҙҙе осраштыр әле", - тигән. Әхирәтем тегене мин эшләгән типографияға алып килгән. Ә мин уны бер ваҡытта ла күргәнем юҡ, теге мине оҡшатҡан да, танышыр өсөн, шулай мутлашҡан икән. Шулай Зиннур менән йәшәнек тә киттек.

### Кеше дауалағанда тәжрибәмә таянам

Мин һөнәрем буйынса акушермын. Миндә заманса медицина белеме булмаһа ла, тәжрибә күп. Ошо тәжрибәм арҡаһында кешене йәлләй, уға ярҙам күрһәтә беләм. Мин әле кешеләрҙе остеохондроз, радикулиттан массаж яһап дауалайым. Мин бының өсөн аҡса ла алмайым, кешеләрҙең шат йөҙөн күрһәм, шул етә.

Акушер булараҡ, ҡатындарға кәңәшем дә бар: бала ҡорһаҡта ятҡанда уҡ уның менән һөйләшергә, бер үк ваҡытта эш эшләй йөрөргә кәрәк. Ҡан йөрөшөнә ҡарап, балаң тәртипле лә, эшсән дә булып тыуа. Ауырлы саҡта эшләмәһәң, бала артыҡ ҙур үҫә, шунлыҡтан, уны тыуҙырыу ауыр була.

### Хәрәкәт һәм йылмайыу йәшәтә

Кешеләргә ярҙам ит, уларға тик изгелек ҡыл һәм үҙеңде бәхетле тойоп йәшә - оҙаҡ йәшәүҙең сере шунда ла инде. Оҙаҡ йәшәүҙең икенсе сере - хеҙмәт яратыуҙа. Мин бер эштән дә ҡурҡмайым. Иртән торғас та иң тәүҙә өйөмдө йыйыштырып алам, бесәйҙәремде ашатам, шунан һуң ғына үҙем ултырып ашайым. Быларҙы тәнде яҙып алыу өсөн эшләйем. Бынан тыш, төрлө физик күнекмәләр яһайым. Тәбиғәткә сығып, үләндәр йыйям, был да күп көс бирә. Кешене хәрәкәт йәшәтә. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр. Президентыбыҙ Рәхимовты алайыҡ, көнө-төнө юлда, халыҡ араһында йөрөй, башҡа берәү булһа, урындан ғына бойороҡ биреп ултырыр ине әле. Әгәр ҙә эсем бошоп китеп, нимә эшләргә белмәһәм, иң тәүҙә өйөмдө таҙалап алам, мебелдәрҙең урындарын алмаштырам, шулайтып, көнөмдө үҙгәрып ебәрәм. Яңыса балҡыш алған өйөмә ҡарап, күңел күтәрелеп китә, башҡа яҡты уйҙар килә.

Үҙеңде лә ятырырға кәрәк. Һәр ваҡыт таҙа, үтекләнгән кейем кейеп йөрөйөм. Яңы кейем дә һатып алғаным юҡ, әммә элекке күлдәктәремде ҡупшы итеп кейеп сыҡһам: "Сәүиә апай, был һинме, ҡайһылай матурһың", - тип, барыһы ла һоҡланыуын белдерә. Миңә тағы ла рәхәт булып китә. Шунан артығы кәрәкмәй ҙә. Үҙемде-үҙем тәрбиәләп торғас, ҡартайыу ҙа әллә ни һиҙелмәй. Йөҙөмдән йылмайыу киткәне юҡ, һәр ваҡыт көләсмен. Кешегә бер ваҡытта ла, теге ерем ауыта, был ерем ауырта, тип зарланып ултырғаным юҡ. Ни өсөн кешегә үҙеңдең сиреңде һөйләп, уның да, үҙеңдең дә кәйефен ҡырырға? Сирҙе табиптарға ғына һөйләйҙәр. Тормошомда булып үткән ауыр мәлдәремде лә иҫләп тә, ҡайғыға батып ултырғаным юҡ. Үткән үткән инде, хәҙерге көн менән йәшәргә кәрәк. Тәмле телле, аҡыллы булырға, ауыҙ асып һүҙ әйтер алдынан тәүҙә уйларға өйрәнергә кәрәк. Яман һүҙ әйтеп, кешенең күңелен ҡыйырға ярамай. Мин үҙемде бик бәхетле һанайым, бөтә кеше лә минең кеүек рәхәт йәшәһен ине.

**Шулай итеп...**

**Яу юлы үткән 90 йәшлек Сәүиә инәй янынан уйҙарым яҡтырып, күңелем ҡанатланып сыҡтым. Әллә күпмегә етерлек энергия алдым, унан бигерәк, фәһем, аҡыл туплап ҡайтылды ағинәй янынан. Уның хәрәкәтсәнлегенә, етеҙлегенә, ғәйрәтлегенә ҡарап, хайран ҡалырлыҡ. Кем әле, ошо йәшкә етеп, яңғыҙы мебель күсерә, йә иһә балконын таҡта менән көпләй ала? Ә күңеле һуң? Мәрхәмәт тойғоһо менән типкән йөрәге тик изгелек нуры өләшер өсөн яратылған. Хәйер, Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмеркәйҙәребеҙҙең төп асылы ла ошоға ҡайтып ҡала бит, әммә бик һирәктәребеҙ генә был бөйөклөккә өлгәшә алыусан. Сәүиә инәй Раббыбыҙ биргәненә шөкөр ҡылып, кешеләргә йылы һүҙен, көләс йөҙөн бүләк итеп йәшәй. "Күңеле пак, тәне сәләмәт, барына ҡәнәғәт кеше - иң бәхетле кеше", ти Бәйғәмбәребеҙ. Бәхет сере ошо түгелме ни?**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

✓ *Төрлө төҫтәргә мансып, буяп һуғылған балаҫтары, сағыу сәскәле ҡорамалары, аҡҡош сигелгән мендәрҙәре, атлас тышлы юрғандары Асрар бабам эшләгән һандығы өҫтөндә түбәгә ҡәҙәр өйөлөп торор ине.*

ҠОТ

**Гәзиттә "Әбйәлилдең ҡотло өләсәйҙәре" тип яҙылған фотоһүрәт баҫылғайны, унда үҙемдең Нәсимә еңгәмде, Сәкинә инәйемде һәм Тайыпова Тәнзилә апайҙы танып ҡалдым да, тулҡынланып, тағы ҡулыма ҡәләм алдым. Хәҙер инде был ҡатын-ҡыҙҙарҙың күптәре өләсәй, хатта бүлә-бүләсәрҙәренә ҡартинәй булып бөтһәләр ҙә, һаман йәш сырайлы, көләс йөҙлө, осҡор ҡараштарынан сихри нур, наҙ сәселә. Алсаҡ йөҙҙәренән ҡотло изгелек нурҙары ағыла. Шау сәскәле кизе яулыҡтары, йәйғор таҫмалы күлдәктәре, ҡайып тегелгән алтын төҫөндәге уҡалы, көмөш тәңкәле камзулдары һәм сәнғәттең иң юғары нөктәһенә еткерелеп башҡарылған, аҡыҡ ҡашлы биҙәүестәр менән байытылған селтәр һаҡалдары үҙҙәрен хур ҡыҙылай матур итеп күрһәтә.**

# ӘБЙӘЛИЛДӘГЕ ӨЛӘСӘЙҘӘРЕМ...

## ҡотло донъя өлгөләре

Ысынлап та, Буранғолдоң, һөйөклө илгенәмдең, ғәзиз инәләре ил-йортомдоң рухын, ҡотон, мәртәбәһен намыҫлы һаҡлай, ихлас тарата, арттыра, республика менән генә сикләнмәйенсә, хатта сит илдәргә лә еткерә! Уларҙың иҫ киткес эшсән, бөтмөр булыуҙары һәм төрлө сараларҙа, байрамдарҙа теләп ҡатнашыуҙарына, һәр саҡ йәш сырайлы, ҡотло йөҙлө, бәхетле ҡала белеүҙәренә Әбйәлилемдең хозур тәбиғәте, Башмағосҡан, Ҡутырҙы, Ҡыйышбаш кеүек мәғрүр тауҙары һәм ярһып аҡҡан Ҡыҙыл йылғаһының да йоғонтоһо булмай ҡалмағандыр ул. Еңгәләремдең, инәйҙәремдең, өләсәйҙәремдең мөғжизәләр тыуҙырыусы ҡотло ҡулдары барлыҡҡа килтергән, халҡым рухы һеңдерелеп башҡарылған тылсымлы эштәрен тиҙ арала ҡарап, күреп сығыу мөмкин дә түгелдер. Был хазиналарҙың тыуыу мәле уларҙың һәр ҡайһыһының сайыр еҫтәре аңҡып торған ырыҫлы йорттарындағы йомарт күңеллелектән, тәртип- таҙалыҡтан, ә, бәлки, туҡмас таҡтаһы кеүек һап-һары итеп ҡырып йыуылған тупһанан башланалыр ул.

Бала саҡта Нәсимә еңгәмә туғандарымды ҡарашып, Сәкинә инәйемдәрҙә Таһир ҡустым менән уйнап үҫтем. Ғәйшә һәм "һәйбәт инәй"емдәрҙә йыш булдым. "Һәйбәт инәйем" миңә ломпаси кәнфиттәрен биреп ҡайтарыр ине. Өйҙәгеләрҙең: "Ҡайҙан алдың?" - тигән һорауына: "Һәйбәт инәйем бирҙе", - тип яуаплар инем. Ысынында иһә, "Һәйбәт инәйем"дең Шәмсеҡәмәр исемле икәнлеген үҫкәс кенә белеп ғәжәпләндем. Ә инде күрше генә йәшәгән мәрхүмә Ғәйшә инәйемдең балаҫ, шәл һуҡҡанын, юрған һырығанын, ҡорама ҡорағанын күҙәтеп йәки аялаған мамығын тотошҡан булып, эргәһендә уралыр инем. Үҙе өйҙә юҡ сағы тура килһә, станок артына ултырып, сүреһен үткәреп, һуғып булашҡан арала йә ебе сейәлер, йә бөтөнләй өҙөлөп ҡуйһа, тиҙ генә белмәмеш-күрмәмеш булып уйнап ултырыуҙарыма әле лә көрһөнөп ҡуям. Ҡасан барма, йорттары сынъяһау итеп йыйыштырылған, һап-һары итеп ҡырып йыуылған иҙәндәренә аяҡ баҫҡыһыҙ булыр ине. Күҙ ҡамаштырырлыҡ һәр төрлө төҫтәргә мансып, буяп һуғылған балаҫтары, сағыу сәскәле өскөл, шаҡмаҡ яһап ҡоролған ҡорамалары, күгәрсен, аҡҡош сигелгән мендәрҙәре, атлас тышлы юрғандары Асрар бабам һырлап, ғәжәйеп семәрҙәр яһап эшләгән һандығы өҫтөндә түбәгә ҡәҙәр өйөлөп торор ине. Ә инде ырғаҡ менән бәйләнгән койка, өҫтәл ябыуҙарын бәйләр өсөн күпме ваҡыт, күпме күҙ нурҙары, сабырлыҡ, иҫ киткес нескәлек, теүәллек талап ителгәнен Хоҙай үҙе генә беләлер. Ошо ерҙә Асрар бабайымдың заманында даны тирә-яҡҡа таралған һандыҡ эшләүсе оҫта булғанлығын әйтмәү яҙыҡ булыр. Уның ҡотло ҡулдары яһаған һандыҡтарына, шундай ҙур оҫталыҡ, үтә нескә теүәллек менән башҡарылған семәрҙәренә, зауыҡлы биҙәктәренә иҫ китерлек ине. Ғөмүмән, Асрар бабайым да, Ғәйшә инәйем дә ижади эҙләнеүсән шәхестәр, үҙ эштәренең маһиры булдылар.

Ә инде еңгәләремдең, инәйҙәремдең, апайҙарымдың кейеҙ баҫыу серҙәре йолаһын бөтә республика, хатта сит яҡтар халҡы менән уртаҡлашыуҙарын зәңгәр экрандарҙан ҡарап, уларҙың ырыҫлы эштәренә, ҡотло ҡулдарына һоҡланып: "Ней сыҡһа, ошо әбйәлилдәрҙән сыға," - тип һоҡланып ултырҙым. Афарин, быуаттар төпкөлөнән саф ынйылай бөтөн килеш килеп еткән хазиналарыбыҙҙы түкмәй-сәсмәй, киләсәк быуынға тапшырыуҙары ла баһалап бөткөһөҙ ҡаһарманлыҡ.

Ҡот ҡойоу, ҡот ҡайтарыу... Ошо төшөнсәгә бәйле бер ваҡиғаны һаман хәтерләйем әле. Һеңлем эттән ҡурҡып, ауырып китте. Өләсәйем самауыр ҡуйҙы, йыуаса бешерҙе лә бер өләсәйҙе саҡырҙы. Теге өләсәй доғаларын уҡый-уҡый, өф-өф өрөп, ҡот ҡойҙо. Сүместәге ҡурғаштан мин үҙебеҙҙең урамдағы бер этте төҫмөрләнем. Артабан һеңлемә үлән сәйҙәре эсереп, үҙебеҙҙең ырыу тамғаһы баҫылған кейеҙгә урап һалып ҡуйҙылар. Иртәнсәк уйнап йөрөгән һеңлемдең шат тауышына уянып киттем.

Бала саҡта беҙ шаһит булған күңелле ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ байтаҡ булды ул. Әсәйем яңы күлдәк тегеп кейҙерһә, һеңлем менән кем уҙарҙан ҡотлатырға сығып йүгерәбеҙ. Күрше-тирәгә кереп, сәйҙәр эсеп, бейеп күрһәтеп, тиҫтәрҙәрҙән "ҡотло булһын", "ҡот ҡайтһын" тип семеттереп сыҡҡан саҡтар йыш булды. Их, бала саҡтың ғәмһеҙ, ҡотло мәлдәре! Ошо рәүешле семетеләүҙәргә лә түҙә-түҙә, ҡот йыйҙыҡ, ырыҫлы, ҡотло тормошҡа ынтылдыҡ. Өләсәйем Хәҙисә Яҡшембәтова Зәки Вәлидиҙең тәүге йәмәғәте Нәфисә Яҡшембәтова менән ике туғандар булған.

Бай балаһы булараҡ, төрки, ғәрәп, фарсы телдәрен яҡшы белде, боронғо китаптарын көйләп уҡып ултырыр булды, биш рәкәғәт намаҙҙы ла ҡалдырманы. Шулай, йыш ҡына ололарға эйәреп, Теләкә йылғаһы буйына беҙ ҙә сығып, ямғыр теләп, һыу һибешер, донъяға ҡот, үҙебеҙгә бәрәкәтле тормош теләгәндәр хәтерҙә. Ололар аҙаҡтан көмөш һыулы Теләкәгә теләктәренең бойомға ашыуын һорап, ҡоттоң ташлап китмәүен Тәңренән ялбарып, таралышыр инеләр.

Ҡотло урындар... Бала саҡта гел өләсәйемә эйәреп, емеш-еләккә йөрөр инем, сөнки уның ҡотло урындарында емеш-еләк ишелеп уңыр ине. Өләсәйем һәр ваҡыт көйләп йөрөр йәки теге-был урындың исемен, тарихын һөйләп ишеттерер, үҙенең үткән тормошондағы булған хәл-ваҡиғаларҙы бәйән итер булды. Уның һөйләп ҡалдырғандары әле булһа ҡотло, бай әкиәт иле булып күҙ алдында ҡалһа, яғымлы тауышы һаман ҡолағымды наҙлап иркәләгән кеүек... Төш йәки өйлә намаҙы ваҡытын ул ҡояшҡа ҡарап самалай ҙа, берәй шишмә буйына төшөп, бит-ҡулдарын сайҡап, ситеген сылатып тәһәрәт алғас, намаҙға баҫа: "Илаһи ниәт ҡылдым ошо көндә өйлә намаҙын уҡымаҡҡа..." Һуңынан оҙаҡ итеп доға ҡылыр, ил-йортҡа ҡот, бәрәкәт, һаулыҡ теләр ине.

Шулай бер ҡайтып килеүебеҙҙә Зәйнәпосҡан тауы башында бер соҡор йыланға осраныҡ. Иң өҫтөндә ап-аҡ йылан борғоланып ята ине. Өләсәйем тиҙ генә: "Ҡурҡма, улар ҙа Аллаһ яралтҡан мәхлүктәр, ә аҡ йылан иләүҙең ҡото", - тип иплап кенә алға юрғаланы. Шөкөр, ҡот йыланын осратыуым тормошомда бәхетле, ҡотло осраҡтарға йыш юлыҡтырҙы, эшемдән йәм, ҡот табып эшләргә, йәшәйешемдән ҡәнәғәтлек тойоп, айыҡ, ҡотло тормош көтөргә булышлыҡ иткәндер, тим.

Инәйҙәремдең һөйләшеүе лә ипле, яғымлы, ә атлап йөрөүе ҡупшы, йомшаҡ һәм мәртәбәле. Бала саҡта улар беҙҙе ҡысҡырышмай ғына тәртипле уйнарға өгөтләһә, йәш сабыйҙар янында шым ғына, итәғәтле булыуҙы хуп күрҙеләр: "Сабый янында шым, һаҡ ҡына һөйләшегеҙ, юҡһа, ҡотон осороп ҡуйырһығыҙ!" Машалла, уларҙың аҡыл даирәһенә хайран ҡалырлыҡ шул - көслө тауышҡа баланың ҡото осоу хәүефе, аураһы йыртылыу ҡурҡыныһын күҙаллағандар ҙа баһа.

Ҡотло ҡулдар... Өләсәйемдең күҙ нурҙарын түгеп, ҡотло, маһир ҡулдары һуҡҡан аҫалы балаҫын, аллы-гөллө ҡорама юрғандарын, нағышлы кейеҙҙәрен, боронғо һандығын күҙ ҡараһылай һаҡлайым. Йәйге эҫе көндәрҙә балаҫтарымды елләтергә элгән мәлдә уларҙың һәр береһен күргәндәй, хатта баҫалҡы тауыштарын ишеткәндәй итеп, һиҫкәнеп ҡуям. Уларҙың мәртәбәле "ҡот" һүҙенең бәсен ебәрмәй йәшәргә, яҡын-тирәләгеләргә йомарт ҡот өләшеп, ҡотло ҡартлыҡта бәхетле ғүмер кисереүҙәренә аҡылым камил. Әгәр ошо мәҡәләм берәйһененең күҙенә салынып ҡалып, үҙҙәренең исем-шәрифтәренә юлығып, сәләмемде ҡабул итһәләр, бала саҡта үҙем белмәй ҡылған шуҡлыҡтарыма ярлыҡау булыр, саҡ ҡына бурысым кәмер, һағыныуҙарым бер аҙ баҫылыр төҫлө.

**Рәйхана ЙӘҺҮҘИНА.**
**Ишембай районы**
**Кинйәкәй ауылы.**



✓ *Физика, математика факультеттарында райондарҙан килгән студенттар күп. Техник һөнәрҙәрҙе һайлаусылар аҙ әле, авиация, нефть университеттарына, сервис технологияһы академияһына инеүселәр аҙ.*



# УНИВЕРСИТЕТ – йәки Фән һәм

**1909 йылда асылған Өфө уҡытыусылар институты һуңынан республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттары флагманы сифатында дан ҡаҙанған Башҡорт дәүләт университеты тарихының тәүге биттәрен яҙа башлай. Әлбиттә, 1917 йылдағы инҡилабҡа тиклем был уҡыу йортонда башҡорттарға урын булмай. Башҡорттар араһында дини мәғрифәт ярайһы уҡ яҡшы үҫешкән булһа ла, Рәсәй юғары уҡыу йорттарында белем алырға теләгән алдынғы ҡарашлы йәштәрҙең мөмкинлектәре бик сикләнгән була. Совет осоронда тәүҙә педагогия институты булып, һуңынан университет статусын алған ошо юғары уҡыу йорто Башҡортостан фәнен һәм мәҙәниәтен бөтә донъя кимәленә сығара алды. Ошо абруйлы уҡыу йортоноң 100 йыллыҡ юбилейы айҡанлы ҡоролған әңгәмәбеҙҙә БДУ профессорҙары, фән докторҙары, башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультеты деканы Марат ЗӘЙНУЛЛИН һәм физика факультеты деканы Роберт ЯҠШЫБАЕВ ҡатнашты.**

**▸ 1908 йылдың йәйендә 18 йәшлек Көҙән башҡорто Әхмәтзәки Вәлидов, Холмогорҙың аң-белемгә сарсаған Ломоносовы кеүек, атаһынан ҡасып-боҫоп, яңыса белем эстәү маҡсатында сит-ят яҡтарға сығып китергә мәжбүр була. Уҙған быуат башындағы башҡорт мәғрифәтен бөгөнгө ҡаҙаныштарыбыҙ бейеклегенән нисек баһалар инегеҙ?**

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Минеңсә, XX быуат башында халҡыбыҙҙың үҙ заманына күрә юғары кимәлдә белем биреүсе мәҙрәсәләре булған, һәм улар артабан фән-ғилем юлын һайлаған зыялыларыбыҙҙы әҙерләп сығара алған. Мәҫәлән, "Ғәлиә" мәҙрәсәһе башҡорт халҡы өсөн классик университет ролен үтәгән, ошонда белем алған байтаҡ зыялылар артабан мәғрифәт, фән, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт өлкәһендә билдәле шәхестәр булып таныла. Зәки Вәлидиҙең бик белемле зыялылар затынан булған ғаиләлә тәрбиәләнеүе хәл иткес була. Унын атаәсәһе ғәрәп-фарсы телдәрен бик яҡшы белһә, олатаһы Хәбибназар Үтәк ауылында шулай уҡ халыҡ араһында абруй ҡаҙанған мәҙрәсә тота. Улар һуңынан донъя кимәлендә тиңдәшһеҙ ғалим булараҡ танылыу тапҡан Әхмәтзәкиҙә Көнсығыш мәҙәниәте һәм ғилеменә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята алған. Ғөмүмән, ҙурыраҡ ауылдарҙың барыһында ла мәҙрәсәләр асылыуы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Ғилем сығанағы булған китаптар айырыуса һаҡлап-ҡәҙерләп тотола.

**▸ Ваҡыттар үтә килә, Әхмәтзәки Вәлиди ҙә үҙен үҫтереп, ҙур ғилем юлына алып сыҡҡан тыуған мөхитен юғары баһалай. Уның либераль фекерле олатаһы йәштәрҙең инженер, агроном, хоҡуҡсы һөнәрҙәренә өйрәнергә теләүен хуплай, Әхмәтзәки кеүек тарих, әҙәбиәт һәм фәлсәфә өлкәһе менән ҡыҙыҡһыныусыларға Европа һәм Шәреҡ ғилемен сағыштырып өйрәнеп, башҡорт ғилеме һәм мәҙәниәте үҙәген ойоштороу зарурлығы тураһында аңлата. "Мин үҫкән был мөхит кешеләре араһынан байтаҡ күренекле шәхестәр сығасаҡ ине. Әммә урыҫ инҡилабының милләтебеҙгә ҡарата тиҫкәре йоғонтоһо быға юл бирмәне. Ҡыҙыл урыҫтар, йәнәһе, уҡыу-яҙыу белмәйҙәр ине, беҙ өйрәттек, тип бөтә донъяға иғлан итһә лә, асылда иһә, юғары мәҙәниәткә эйә булған был даирәне тамырынан ҡоротто", - тип яҙа һуңынан Әхмәтзәки Вәлиди Туған...**

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Эйе, Октябрь революцияһына тиклем үк башҡорттарҙа белемгә ынтылыш бик көслө була. Быны раҫлар өсөн тағы ла бер фактты дәлил итеп килтереү урынлы булыр. Әхмәтзәки Вәлиди ғәскәрендә бик күп ҡаһарман башҡорт офицерҙары була, улар башлыса Ырымбур кадет корпусын тамамлаған заттар. Махсус тикшеренеү һөҙөмтәһендә унда уҡыған 50-нән ашыу башҡорт хәрбиҙәренең исемлеген төҙөй алдыҡ. Ошо хәрби уҡыу йортонда урыҫ телендә белем алыу ул заманда ла еңелдәрҙән булмағандыр, әммә ошо ауырлыҡтарҙы үтеп сығыу зарурлығы яугирлыҡтары милли булмышынан килгән башҡорт егеттәре өсөн тотҡарлыҡ булмаған.



**▸ 1899 йылда Санкт-Петербургта күренекле урыҫ антропологы Д. П. Никольскийҙың "Башҡорттар: этнографик һәм санитар-антропологик тикшеренеү" исемле китабы баҫылып сыға. Ошо китапта беҙҙең өсөн бик фәһемле мәғлүмәт бар. Баҡтиһәң, башҡорттарҙың баш мейеләре лә, уның уртасаланған күләме күрһәткесе лә күрше йәшәгән башҡа халыҡтарҙыҡынан ҙурыраҡ икән. Йәғни, башҡорттар тәбиғәттән ҙур башлы кешеләр була инде. Ошоға нигеҙләнеп, прогрессив ҡарашлы ғалим башҡорт халҡы өсөн заманса белем алыу шарттарын булдырғанда улар араһынан бик күп күренекле ғилем эйәләре сығыу мөмкинлеген фараз итә. Ысынлап та, XX быуат башында гуманитар белемле билдәле зыялыларыбыҙ байтаҡ булған хәлдә лә, тәбиғи фәндәр, техника өлкәһендә уҡымышлыларыбыҙ юҡҡа тиң була. Революцияға тиклем Рәсәй университеттарында белем алыу мөмкинлеге уҡымышлы башҡорттарҙың бик һирәгенә генә насип була. Был халҡыбыҙҙың капитализм шарттарына яраҡлаша, үҙенең үҫеш потенциалын ғәмәлгә ашыра алмауы сәбәптәренең береһе түгелме?**

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Йәмғиәт үҫешенең бөтә илдәр өсөн дә уртаҡ булған күрһәткестәре бар. Университет асылыу ошо күрһәткестәрҙең иң мөһимдәренең береһе. Университетлы ил - цивилизациялы ил. Донъяла тәүге университет Италияның Болонья ҡалаһында XII быуатта уҡ асыла. 1200 йылда Париж университеты Франция короленән Рим Папаһы раҫлаған автономия хоҡуғын ала, XIII быуатта Англияла Оксфорд һәм Кембридж университеттары бик абруйлы була. Испанияла, Германияла, Чехияла һәм Европаның башҡа төбәктәрендә меңәрләгән студенттар ошондай уҡ уҡыу йорттарында шул заман фәндәрен өйрәнә, XV быуатта университеттарҙың дөйөм һаны 80-гә етә. Уларҙа теология, философия, медицина, юриспруденция, тәбиғи фәндәр, телдәр, башҡа фәндәр бик төплө өйрәтелә. Университеттарҙың күпләп асылыуы Европа фәне үсеше өсөн яҡшы шарттар булдыра.

Рәсәй университеттары тарихын Европа илдәренеке менән сағыштырырлыҡ та түгел, был юҫыҡта беҙ бик ныҡ артта ҡалғанбыҙ. Бөйөк ғалим М. В. Ломоносов һәм граф И. И. Шуваловтың ныҡышмалы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә 1755 йылда тәүге юғары уҡыу йорто - Мәскәү университетына нигеҙ һалына. Һуңынан Ҡаҙанда 1804 йылда, Санкт-Петербургта 1819 йылда яңы университеттар асыла. Революцияға тиклем бөтә Рәсәйҙә ни барыһы тиҫтәнән ашыу университет эшләй. Илебеҙҙең юғары белем биреү системаһының 250 йыллыҡ тарихы булһа, Башҡортостан ерлегендә ул бер быуат ҡына тәшкил итә. Шулай итеп, Рәсәйҙә цивилизация үҫеше Европаға ҡарағанда иң кәмендә 250 йылға һуңлап башлана, тап шуның өсөн дә беҙ әлегә тиклем йәшәйештең күп өлкәләрендә алдынғы илдәрҙән артта ҡалғанбыҙ.

Бында тағы ла бер нәмә мөһим: башҡа илдәрҙә юғары белем биреү системаһы йәмғиәт аңы үҫешенең һөҙөмтәһе булып, милләттең төплө белемгә, фәнгә ихтыяжы барлыҡҡа килеү менән бәйле булһа, беҙҙә университеттар тик айырым шәхестәрҙең һәм дәүләт етәкселәренең ихтыяри эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә өҫтән төшөрөлгән ҡарарҙар нигеҙендә асыла. Башҡорттар араһында белемгә ынтылыш көслө булған хәлдә лә, уларҙың Рәсәй университеттарына эләгә алыу мөмкинлеге үтә сикле булып, халҡыбыҙҙың интеллектуаль потенциалы бөтә тулылығында асылмай ҡала бирә. Башҡорт мәҙрәсәләре аң-белем таратыуҙа үҙ ролен үтәһә лә, ғилми мәҙәнилек һәм фән үҫеше университеттарҙа тамырлана. Беҙҙең Көнбайыш илдәренән ниндәйҙер өлкәләрҙә артта ҡалыуыбыҙ, илебеҙ менән идара итеүҙә демократик принциптарҙы үтәмәүебеҙ, дәүләт кимәлендәге проблемаларҙы оҙаҡ йылдар буйына хәл итә алмауыбыҙ ҙа университеттарҙа ғына формалаша торған интеллектуаль мәҙәнилек кимәлебеҙҙең түбән булыуынан ул. Был йәһәттән беҙҙең быуаттар дауамында тупланған тарихи тәжрибәбеҙ юҡ.

*Беҙҙең Көнбайыш илдәренән ниндәйҙер өлкәләрҙә артта ҡалыуыбыҙ, илебеҙ менән идара итеүҙә демократик принциптарҙы үтәмәүебеҙ, дәүләт кимәлендәге проблемаларҙы оҙаҡ йылдар буйына хәл итә алмауыбыҙ ҙа университеттарҙа ғына формалаша торған интеллектуаль мәҙәнилек кимәлебеҙҙең түбән булыуынан ул. Был йәһәттән беҙҙең быуаттар дауамында тупланған тарихи тәжрибәбеҙ юҡ.*

Университеттар эшмәкәрлеге мәғариф һәм фән менән генә сикләнеп ҡалмай, уның халыҡтың дөйөм мәҙәни кимәленә, театр һәм башҡа сәнғәт төрҙәрен үҫтереүгә индергән өлөшөн баһалап бөткөһеҙ. Иң мөһиме, тарихи статусы буйынса дәүләт власы менән бәйлелек мөнәсәбәттәренән азат булған университеттар һәр дәүерҙә лә демократик ҡараштар өҫтөнлөк иткән интеллектуаль-мәҙәни үҙәк ролен үтәп килә. Европа университеттары Көнбайыш демократияһының төп сығанаҡтарының береһе булып тора. Хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, ә университет ғалимдарына ғилми дискуссиялар барышында башҡа ғалимдарҙың фекеренә хөрмәт менән ҡарап, үҙ һүҙен раҫларға тырышыу хас. Ә беҙҙә ундай традициялар үҫешә алманы, сөнки юғары уҡыу йорттары һәр саҡта ла дәүләт власы органдарының ҡаты контролендә тотолдо. Шуның өсөн дә бит беҙҙә власть вәкәләттәренә эйә булған партия етәкселәре фекер айышы башҡасараҡ булған кешеләр менән дискуссияға инеүҙе лә артыҡ бер мәшәҡәт тип кенә һанай.

**▸ Хәҙерге замандa теге йәки был милләттең уҡымышлылығы 15 йәштән өлкәнерәк һәр 1000 кеше иҫәбенә нисә юғары белемле кеше тура килеүе менән билдәләнә. 2002 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Башҡортостанда ошо күрһәткес украиндарҙа 146 булһа, татарҙарҙа - 128, урыҫтарҙа - 126, ә башҡорттарҙа 98 генә. Һуңғы йылдарҙа вуздарҙа уҡыусы студенттарыбыҙ байтаҡҡа арта бирһә лә, беҙ башҡа милләттәрҙән һаманға тиклем ҡалышабыҙ әле. Ни өсөн шулай килеп сыға, халҡыбыҙҙың генетик потенциалы ла ҙур, белемгә ынтылыш та бар кеүек бит?**

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Эйе, был күрһәткес буйынса беҙ хатта ҡайһы бер төньяҡ халыҡтарынан, мәҫәлән, яҡуттарҙан да артта ҡалғанбыҙ. Был хәлдең билдәле сәбәптәре бар. Халҡыбыҙҙың күпселеге элек-электән ауылда йәшәй, хәҙер ҙә ауылда йәшәүсе милләттәштәребеҙ һаны ҡаланыҡынан күберәк. Бына Өфө башҡорттарының ҡалалағы икенсе быуыны ла яңы ғына үҫеп етте. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарына тиклем йәштәргә ауылдан сығып китеүе еңел түгел ине. Колхозсыларға хатта паспорт алыу ҙа бик ауырға төштө. Ауыл хужалығы менән шөғөлләнеү халҡыбыҙҙың традицион шөғөлө булғас, бының да йоғонтоһо көслө булғандыр. Ҡалаға барып, уҡырға инә алғандарҙы һәр ауылдан берәмләп тигәндәй һанап сығырға була ине. Ғөмүмән, кемдеңдер юғары уҡыу йортона уҡырға инеүе ул саҡта ауыл мөхите өсөн үҙе бер оло ваҡиғаға тиң ине. Әммә һуңғы йылдарҙа был мәсьәлә буйынса һынылыш булды, юғары уҡыу йорттарына инергә теләүсе йәштәребеҙ күбәйә бара. Университетыбыҙҙың физика, математика факультеттарында райондарҙан килгән студенттар күп. Шул уҡ ваҡытта техник һөнәрҙәрҙе һайлаусылар һаман да аҙ әле, авиация, нефть университеттарына, сервис технологияһы академияһына инеүселәр аҙ. Хатта был уҡыу йорттарына уҡырға ингәндәр ҙә үҙҙәрендә ниндәйҙер дискомфорт тоя, байтағы түбән курстарҙа уҡ уҡыуын ташлап, ҡайтып китергә мәжбүр була.

70-90-сы йылдарҙа йәштәр менән юғары белем алыу хаҡында өгөт-нәсихәт эштәре бик әүҙем алып барылды, лицей-гимназияларыбыҙҙың һөҙөмтәле эшләүе лә был өлкәлә ыңғай динамика барлыҡҡа килтерҙе. Юғары белемле башҡорттар һаны артабан да үҫешә барасаҡ, тип раҫларға ныҡлы нигеҙ бар. Унан һуң, уҡымышлы ата-әсәнән тыуған балаларға белем алыу өсөн бик уңайлы шарттар барлыҡҡа килә, был да беҙгә киләсәккә оп-

***✓ Элек физика-математика уҡытыусылары бик көслө булды, был фәндәр республикабыҙҙың мәктәптәрендә юғары кимәлдә уҡытылды. Хәҙер талантлы балаларҙы уҡытыу буйынса эш алып барылмай.***

# ЦИВИЛИЗАЦИЯ ЕМЕШЕ,

## мәғрифәт үҙәгенә - 100 йыл

тимизм менән ҡарау мөмкинлеген бирә.

Шулай ҙа халыҡтың үҙаңын күтәреү буйынса туҡтауһыҙ эш алып барыу зарур, шунһыҙ милләтебеҙҙең белем күрһәткестәре яҡшырмаясаҡ. Милли үҙаң үҙенән-үҙе генә формалашмай, бик түбән кимәлдә ҡала. Йыш ҡына бына нисек була: башҡорт егете республиканан ситтә уҡый, техник белем алып сыға ла, мәрйә ҡыҙына өйләнеп, тыуған яғына кире әйләнеп тә ҡайтмай. Бындай уҡымышлыларҙан ниндәй файҙа, улар милләтебеҙ өсөн йәшәмәгәс? Уларҙың балалары ла сит милләт кешеһенә әйләнә, милли тамырынан яҙа. Бына мин Ырымбур өлкәһендә, һуңынан Свердловскиҙа уҡыным. Унда һин башҡорт ни ҙә, татар ни - барыһын да татарға һанай инеләр. Милли үҙаңы түбән булған башҡорт шунда татар була ла китә, йәнәһе, үҙенең башҡортлоғон ситһенә инде. Был осраҡта һәр кемдән үҙенең милли үҙаңына тоғро ҡалыу талап ителә: әгәр һин юғары белемле башҡорт икәнһең, балаларыңды ғына түгел, ейәндәреңде лә башҡорт рухында тәрбиәләй алырға тейешһең. Шулай булмаһа, һинең йәшәүең дә бушҡа ғына сарыф ителгән ваҡыт булып ҡаласаҡ.

**▸ Психология фәнендә баланың үҫеше өсөн ниндәй йүнәлештә уңайлы шарттар булдырыла, уның һәләттәре лә башлыса шул юҫыҡта формалашыуы хаҡында фекер бар. Ысынлап та, баланың ата-әсәһе гуманитар йүнәлеште үҙ иткән икән, уларҙың балалары ла ошо уҡ мөхитте яҡын итә, буласаҡ һөнәри шөғөлөн дә ошо өлкәнән эҙләй. Халҡыбыҙ сәнғәт, әҙәбиәт өлкәһенә битараф түгел, тап шуның өсөн дә Башҡортостандың үҙенсәлекле милли мәҙәниәтен донъя кимәленә алып сығырлыҡ таланттарға байбыҙ. Гуманитар йүнәлештәге үҫешебеҙҙе лә етешһеҙлек итеп түгел, ә әҙәбиәт, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу, балаларҙың һәләттәрен үҫтереү өсөн тейешле шарттар булыу менән бәйләп аңлатыу дөрөҫөрәктер ул…**

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Университеттары булған илдәр генә мәғрифәт һәм фән аша донъя кимәленә сыға ала. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең мөхиткә университет һуңлабыраҡ инде, әммә уның халҡыбыҙ үҫешенә яһаған йоғонтоһо баһалап бөткөһөҙ. Халҡыбыҙҙың үҙаңын, мәҙәниәтен үҫтереүгә, уның үҙен-үҙе һаҡлап ҡала алыуына гуманитар фәндәр, шул иҫәптән филология өлкәһендә эшләгән ғалимдарыбыҙ айырыуса иғтибарлы булды. Хәҙер бына шундай ҡараш бар, һәм мин уның менән килешәм: кешелек тарихы һуғыштар йәиһә техник прогресс тарихы түгел, асылда ул - мәҙәниәт үҫеше тарихы. Бына беҙгә тарихты өйрәткәндә башлыса төрлө илдәр араһында барған һуғыштар хаҡында күберәк һөйләнеләр, ә милләттәрҙең мәҙәни үҫеше гел ситтә ҡала ине. Минеңсә, гуманитар фәндәрҙе бөгөн дә тәбиғәт һәм техник фәндәр менән бер кимәлдә уҡытырға кәрәк.

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Хатта уларҙың бер кимәлдә булыуы ла етерлек түгел, сөнки гуманитар фәндәр алданыраҡ та алып барылырға тейеш.

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Был дөрөҫ, хәҙер бөтә донъя элек һис ҡасан булмаған көрсөк кисерә, ул көрсөктәң башында мәҙәнилек етмәүе ята. Тап шуның өсөн мәҙәни үҫеш ихтыяжын беҙ бөтә ил кимәлендә лә, милли аңыбыҙ мөхитендә лә асыҡ тоябыҙ. Был өҫтән төшөрөлгән күрһәтмә түгел, халыҡ үҙе лә уны бик яҡшы аңлай. Ошо хәл гуманитар фән һәм милли-мәҙәни тәрбиә мәсьәләләренең өҫтөнлөклө булып ҡалыуын талап итә. Был беҙҙең университетыбыҙҙың шул уҡ филология факультеты миҫалында бик асыҡ күренә. 160 башҡорт яҙыусыһы, ә журналистарҙың 90 проценты беҙҙең факультетта уҡып сыҡҡан. Башҡа фән йүнәлештәрендә ғилми эш менән шөғөлләнеп, күренекле ғалим булып танылғандар ҙа, хужалыҡ һәм идара итеү органдарында эшләгәндәр, дәүләт эшмәкәрҙәре булып киткәндәр ҙә аҙ түгел ошо факультетыбыҙҙа белем алғандар араһында. Был факт телдең фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә ниндәй ҙур роль уйнағанына дәлил булып тора.

***160 башҡорт яҙыусыһы, ә журналистарҙың 90 проценты беҙҙең факультетта уҡып сыҡҡан. Башҡа фән йүнәлештәрендә ғилми эш менән шөғөлләнеп, күренекле ғалим булып танылғандар ҙа, хужалыҡ һәм идара итеү органдарында эшләгәндәр, дәүләт эшмәкәрҙәре булып киткәндәр ҙә аҙ түгел. Был факт телдең фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә ниндәй ҙур роль уйнағанына дәлил булып тора.***

**▸ Японияның байтаҡ ҡына вуздарында тәүге ике йылда факультеттарға бүлеп уҡытыу ҡаралмаған икән. Ошо ваҡыт эсендә талиптарға кешенең мәҙәни кимәлен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүсе гуманитар фәндәр уҡытылып, шәхес вуз талап иткән кимәлгә күтәрелгәс кенә, буласаҡ һөнәр буйынса уҡытыу башлана. Был факт та гуманитар әҙерлектең шәхес үҫеше өсөн нисек мөһим булғанына тағы ла бер дәлилдер.**

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Башҡорт милли мәктәбендә гуманитар әҙерлек көслө булды. Ун йыл буйына тик башҡортса ғына уҡыған йәштәр өсөн урыҫса уҡымау әллә ниндәй кәртә булып торманы. Мәҫәлән, минең замандаштарымдың күбеһе шул уҡ ҡәҙимге башҡорт мәктәбендә белем алды. Мин уҡыған Мораҡ педучилищеһын тамамлаусылар хатта Рига политехник институтына уҡырға инә алды. Был ул саҡтағы милли мәктәптә уҡытыу сифатының бик юғары булыуы хаҡында һөйләй. Мин дә филология факультетының рус бүлегенә уҡырға ингәйнем, әммә башҡорт телен дә һәйбәт белгәс, мине һәм Марат Минһажетдиновты шул йылда асылған рус-башҡорт бүлегенә күсерҙеләр. Булат Рафиҡов ҡына рус бүлегендә ҡалды, әммә был уға билдәле башҡорт яҙыусыһы булып үҫеү өсөн һис бер ҡамасаулыҡ итмәне.

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Бына ауылда үҫкән башҡорт балаһын алайыҡ. Уның теле менән бергә фекерләүе лә башҡорт телендә формалаша. Әммә ул урта мәктәпкә уҡырға килһә, тоталар ҙа физика-математика фәндәрен русса уҡыта башлайҙар. Минеңсә, был осраҡта бик күп кенә балаларҙың күнегелгән фекерләү механизмы рус телендә яңы ғына үҙләштерелә башлаған формаһы менән ҡапма-ҡаршылыҡҡа килә. Киреһенсә, башҡортса фекерләү математик һәләттәрҙе үҫтереү өсөн кәртә була алмай.

**▸ Совет осоронда АҠШ-тан Мәскәүгә ғилми конференцияға килгән профессор, математика фәне докторынан: "Ни сәбәпле америкалылар үҙ илендә һәләтле математиктар әҙерләй алмай?" - тип һорайҙар. Уның яуабын тап Һеҙҙең фекерегеҙҙе раҫлаусы бер дәлил сифатында ҡарап була. "Бөтә нәмәләрҙең дә иң һәйбәте Америкала, тигән фекер ҡамасаулай беҙгә. Инглиз телен бар донъяла өйрәнгәс, беҙҙекеләр башҡа телдәрҙе һанға һуҡмай, уларҙы өйрәнергә тырышмай. Телдәрҙе өйрәнергә теләмәү фекерләү һәләтен дә үҫтермәй", - тип әйтә ошо ғалим.**

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Был бик дөрөҫ фекер. Әммә мине икенсе бер нәмә борсой бөгөн. Силәбе өлкәһендә йәшәгән 160 мең башҡорт үҙ телендә уҡый алыу мөмкинлегенән дә мәхрүм. Һөҙөмтә бер генә: ундағы башҡорттарға ассимиляцияға дусар булыу янай. Беҙҙәге вуздарҙа улар өсөн маҡсатлы урындар бүленә, тик уҡырға килеүселәр генә юҡ. Силәбенән 25-ләп студентты уҡытып та сығарғайныҡ, береһе лә кире ҡайтманы, сөнки улар өсөн алған һөнәре буйынса эш урындары ла юҡ. Силәбе өлкәһе етәкселегә күпме вәғәҙәләр бирһә лә, уларҙың береһе лә үтәлмәне.

**▸ Башҡорттар үҙҙәрен бары гуманитар фәндәр өлкәһендә генә күрһәтә ала, тәбиғәт, техник фәндәр яғынан уларҙан күпте өмөт итеп булмай, тигән ҡараш әлегәсә йәшәп килә. Шул уҡ ваҡытта республикала уҡыусыларҙың тәбиғәт фәндәре буйынса һәм техник, технологик һәләттәрен үҫтерә алырлыҡ бер генә лә махсус мәктәп-интернат юҡ. Ошо хәлде Һеҙ нисек баһалар инегеҙ?**

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Халҡыбыҙҙың физика-математика, техник фәндәр өлкәһендә потенциалы бик ҙур. Ошо фәндәр өлкәһендә һәләтле студенттарыбыҙ бар, фән кандидаттары, докторлыҡ дәрәжәһенә эйә булған талантлы йәш ғалимдарыбыҙ ҙа байтаҡ. Бындай ҡараштың таралыуының билдәле сәбәптәре лә бар: халҡыбыҙҙың гуманитар мәсьәләләре менән башлыса үҙебеҙҙең ғалимдарыбыҙ шөғөлләнгәс, улар хаҡында күберәк беләбеҙ, йышыраҡ ишетәбеҙ, һәм, ғөмүмән, улар үҙ халҡыбыҙ мөхитендә ҡайнап йәшәй. Шулай ҙа техник фәндәр, яңы технологиялар өлкәһендә башҡорт белгестәрен бермә-бер арттырыу фарыз, сөнки цивилизация үҫеше тап ошо йүнәлештә бара. Элек физика-математика уҡытыусылары бик көслө булды, был фәндәр республикабыҙҙың интернат-мәктәптәрендә юғары кимәлдә уҡытылды. Хәҙер талантлы балаларҙы эҙләп табыу һәм уларҙы уҡытыу буйынса эш алып барылмай. Ә интернаттарға социаль яҡтан мохтаж балалар күберәк алына башланы. Быныһы ла кәрәк, әммә һәләтле балаларға ла юл асыу зарур. Шуның өсөн физика, математика, химия фәндәре буйынса махсуслаштырылған республика мәктәбенең ойошторолоуы һәләтле балаларға ла, дәүләтебеҙгә лә бик файҙалы булыр ине. Унан һуң, мәктәптәрҙән физика, химия фәндәре аҙлап-аҙлап "йыуылып" сығарылып бара. Мәҫәлән, физика өсөн аҙнаһына ни барыһы 2 сәғәт ваҡыт бүленә. Был баланың һәләттәрен үҫтереү өсөн үтә наҡыҫ.



**▸ Шул уҡ ваҡытта 6-сы синыфтан уҡ "Йәмғиәтте өйрәнеү" предметы индерелә бөгөн...**

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Минеңсә, күп хилафлыҡтар, хаталар Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығынан баш ала. Унда мәктәптә бер көн дә эшләмәйенсә, мәғариф өлкәһенең бөгөнгө ҡағыҙәләрен яҙып ултырыусылар күбәйҙе. Шул уҡ министр Фурсенко милли мәктәпте юҡҡа сығарыу өсөн ҡуйылған кеше кеүек күрһәтә үҙен. Йәнәһе, беҙҙә бөтәһе лә Америкалағы һымаҡ булырға тейеш: рәсәйле тип аталған граждан милләтле берҙәм халыҡҡа бер телдә һөйләшеп, тик бер төрлө, йәғни урыҫса йәшәү рәүешенә күсергә генә ҡала.

**▸ Мәғарифтың милли-мәҙәни кимәлен юҡҡа сығарыуға алып барған сәйәсәтте бер нисек тә хуплап булмай. Был республикабыҙҙың юғары белем биреү системаһының һәм уның флагманы булған Башҡорт дәүләт университетының бер быуатлыҡ тәжрибәһен инҡар итеү булыр ине.**

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Мәҙәнилек бар өлкәләргә лә ҡағыла. Халыҡтың мәҙәнилеге етерлек булмаһа, ул үҙ проблемаларын ҡырағайҙарса, һуғыш асып хәл итә. Университет мәҙәниәте нигеҙендә халыҡ-ара дипломатия ысулдарына нигеҙләнгән йәшәйеш тәжрибәһе үҫеш ала. Бөгөн республикабыҙҙың төрлө өлкәләрҙә һәйбәт үҫешкән фән мәктәптәре булған университеты бар. Уны Башҡортостандың төп милли университеты, тип атаһаҡ та хаҡлы булырбыҙ.

**М. ЗӘЙНУЛЛИН:** Университетыбыҙ Башҡортостан фәне үҫешенә баһалап бөткөһөҙ өлөш индерҙе. Беҙҙең филология фәндәре өлкәһендә кандидатлыҡ һәм докторлыҡ дәрәжәләрен яҡлау буйынса ғилми Советта ғына ла 160-тан ашыу ғилми диссертациялар яҡланды. Факультетыбыҙҙа эшләгән 50 уҡытыусының барыһы ла үҙебеҙҙә уҡып сыҡҡан. Был үҙе үк бер уникаль күренеш.

**Р. ЯҠШЫБАЕВ:** Университытыбыҙ эшмәкәрлегенең тағы ла бер саф алтындай һөҙөмтәһе тураһында әйтеп үтеү урынлы булыр. Күптән булмаһа ла, беҙҙең республикабыҙҙың үҙ энциклопедияһы барлыҡҡа килде, был тарихи ваҡиғаны шулай уҡ цивилизациябыҙ үҫешенең бер гүзәл символы итеп ҡарау фарыз. Уны әҙерләү өсөн университетыбыҙ ғалимдары ла күп көс һалды, һәм беҙ алға табан яңы аҙым яһай алдыҡ. Киләсәктә лә фән һәм мәҙәниәт өлкәһендә университет ғалимдары тарафынан өр-яңы фундаменталь хеҙмәттәр яҙылыуына өмөтөбөҙ ҙур.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикабыҙ тарихында Башҡорт дәүләт университеты тотҡан урын баһалап бөткөһөҙ. Ул республикабыҙҙың фән, мәғрифәт һәм мәҙәниәт үҙәгенә әйләнде. Бөгөн ҡасандыр халыҡ шағиры Мостай Кәрим әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатлау бик урынлы: университеты булған халыҡтың өмөтлө киләсәге лә бар.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ДӘҒҮӘСЕ ҺҮҘЕ

# ҮҘ ЯЙЫН БЕЛЕП ӘЙЛӘНЕР

## Алтын аҡыл - тәгәрмәс...

**Хәбәр ителеүенсә, БР Хөкүмәтенең журналистика өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына дәғүәселәр билдәләнде. Уларҙың бер нисәһенә беҙ түбәндәге һорауҙарҙы биреп, яуаптарын алдыҡ. Уларҙы уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

**1.Хәҙерге заман ваҡытлы матбуғатының, киң мәғлүмәт саралырының ил, халыҡ тормошондағы ролен ниҙә күрә-һегеҙ? Ул оператив мәғлүмәт еткереүсеме? Сәйәсмәндәр трибунаһымы? Зауыҡ тәрбиәләүсеме? Идеология үткәреүсеме? Әллә... Ғөмүмән, ниндәй һәм нисек булырға тейеш һуң ул ваҡытлы матбуғат, киң мәғлүмәт сараһы?**

**2.Һәр ваҡыт үҙең теләгәнде яҙып та, һөйләп тә булмай. Ҡайһы ваҡыт әйткән һүҙеңдең ваҡытлы матбуғатта баҫылмауы, киң мәғлүмәт саралары аша яңғырамауы ла бар. "Киске Өфө" һеҙгә ҡасандыр, ҡайҙалыр яңғыратырға мөмкин булмаған фекерҙе әйтергә, дәлилде килтерергә мөмкинлек бирә.**



**Тамара ЮЛДАШЕВА:**

**1.** Тәү ҡарашҡа ваҡытлы матбуғат был сифаттарҙың барыһын да үҙендә туплай һымаҡ. Беҙ шуға күнеккәнбеҙ, шул тәртипте ҡабул иткәнбеҙ. Кемдер беҙҙең өсөн үҙенә кәрәкле йүнәлештә мәғлүмәт туплай, кемдер беҙҙең аңыбыҙға сәйәси һөжүм яһай, кемдер зауыҡ кимәлебеҙҙе үҙе теләгәнсә (үҙ мәнфәғәтенә ярашлы) тәрбиәләй. Был хаҡта бер шиғырымда ла яҙғанмын икән:

Мәғлүмәттәр шарлауығын,
Ваҡиғалар теҙемен
Башым аша үткәрәмен,
Саҡ-саҡ йыйып түҙемем-
Нисәнсе ҡат һүтәләр бит
Уй-аҡылым тегемен.

Иләктәй ҡалған башымды
Ике услап ултырам:
Зәһәрләнеп зәңгәрләнеп,
Йота ыулы эк(ы)ран,-
Эше юҡ һинең фекерҙә,
Үҙ туҡраны туҡ(ы)ран.

Йөҙ төр сүп-сар, ҡый-һай хәбәр
Түгә минә матбаға.
Теҙә ферздәр, королдәрҙе
Аҡ-ҡаралы таҡтаға.
Мин шаһ булдым ғына, тиһәң,
Мыҫҡыл итеп, "мат" баға.

Ысынлап та, ҡайһы берҙә гәзит-журналдарға бер генә күҙ һалыу ҙа етә. Барыһында ла бер үк хәбәр, мәҡәлә баштары зиһендә бер фекер ҙә уятмай, улар егерме йыл элек ниндәй булһа, әле лә шундай. Радио, телевидение эфирында ла уйландырырлыҡ тапшырыуҙар аҙ. Яңы фекер, тетрәндерерлек асыш - хәҙерге киң мәғлүмәт саралары өсөн һирәк ҡунаҡ. Ни өсөн шулай һуң? Бәлки, заман икенсерәктер? Үткән быуаттың 90-сы йылдары башындағы күтәренкелек етешмәйҙер, ихтимал?

Улай тимәҫ инем. Уҡыусының иң ҡыҙыҡтырған нәмә - ул кеше яҙмыштары, рухи асыштар. Уларға бит бер ҡасан да ҡытлыҡ юҡ. Ил-халыҡ тормошондағы хәл иткес ваҡиғалар айырым кеше яҙмышында ниндәй сағылыш таба? Кешенең рухы именме? Миһырбан төшөнсәһе ҡысырыҡлап сығарылғанмы беҙҙең сәйәси, иҡтисади, социаль көнитмешебеҙҙән? Халҡыбыҙ, илебеҙ тарихы инҡар ителмәйме?

Бына нәмәләр иң тәүҙә журналист йөрәгендә ятырға тейеш. Шуларға нигеҙләнгән күңелдә генә яңы, үҙе бер асыш булырҙай фекер тыуалыр ҙа инде.

Шарлауыҡтар ҙа сарламаҫ,
Буш хәбәргә әүрәмәҫ,
Аҡты күреп ағарынмаҫ,
Күкте күреп күгәрмәҫ,
Үҙ яйын белеп әйләнер
Алтын аҡыл - тәгәрмәс...

Уҡыусы, тамашасы беҙҙән аҡыллыраҡ икәнен дә күҙ уңында тотайыҡсәле, ҡәләмдәштәр. Тиҙ үҙгәреүсән заманда уның кирбес-кирбес яҙмалар уҡып ултырырға ваҡыты ла самалы икәнен онотмайыҡ. Иғтибарын йәлеп итеү сараларын табайыҡ. Кем әйткән әле,"Минә таяныс бирегеҙ - һәм мин Ерҙе түңкәрәм", тип? Журналист һүҙенең халыҡҡа барып етеү-етмәүе лә шул уҡ рычаг (һалмауыр) көсөнә бәйһоналыр һымаҡ минә. Гәзит-журналда йә эфирҙа мәғлүмәтте биреү ысулдары ошоға оҡшаш. Ә улар оҫталыҡҡа бәйле.

**2.** Журналистың бөтә оҫталығы, минеңсә, әйтеп булмағанды әйтеүҙә. Ярып әйтеп булмаһа, ишаралап, уратып килтереп фекер төйнәп, барыбер үҙең теләгән һүҙҙе халыҡҡа еткереүҙә. Иң мөһиме, һүҙең яҡшылыҡҡа хеҙмәт итһен. Утыҙ йылға яҡын республика матбуғатында, айырыуса "Йәншишмә", "Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәре, "Ватандаш", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдары биттәрендәге мәҡәләләремдә, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы эфирында яңғыраған тапшырыуҙарымда мин ижади һүҙҙең халыҡҡа ни тиклем кәрәк икәнен яҡшы тойомлап эшләнем һәм үҙемдә сикләгән бер ниндәй ҙә ҡыҫымды белмәнем. Күңелем ҡушҡанды бөтә көсөмдө биреп, ышаныс менән башҡарҙым. Һәр журналистың үҙ өлкәһе була, минең яратҡан темаларым мәҙәниәт, милли сәйәсәт, әҙәбиәт булды, әле лә шулай булып ҡала.



**Миләүшә ИҘРИСОВА:**

**1.** Беҙ информацион йөмғиәттә йәшәйбеҙ, һәм киң мәғлүмәт сараларының тормоштағы роле бөгөнгө көндә баһалап бөткөһөҙ ҙур, сөнки рухи аҙыҡты, иң тәүге сиратта, киң мәғлүмәт саралары- гәзит-журналдар, радио һәм телевидение тапшырыуҙарынан, интернеттан алабыҙ. Уйлап ҡараһаң, үҙе бер мөғжизә бит - әлеге заманда төпкөл ауылда ултырып та бөтә донъя мәҙәниәте ҡаҙаныштары менән танышып, Ер шарының теләһә ҡайһы төбәгенә виртуаль сәйәхәт ҡылып, теләһә ҡайһы континент кешеләре менән күрешеп-аралашып була. Әммә һәр миҙал ике яҡтан тора. Был ҡаҙаныштар, берҙән, бик ҙур мөмкинлектәр тыуҙырһа, икенсенән, халыҡтың ошо мәғлүмәт дарьяһында аҙашып ҡалыуы ла ихтимал. Матбуғат баҫмаһының бит ниндәйе генә юҡ - ағы, һарыһы, ҡараһы... Аҡыллы, алға әйҙәүсе, изгелеккә өндәүсе дуҫың да, рух бейеклектәренә әйҙәүсе, күңелеңде үҫтереүсе остазың да булырҙай баҫмаларыбыҙ бар, шөкөр. Шуларҙың береһе - үҙем яратып уҡыған "Киске Өфө". Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡоро ғәйбәткә йәки эпатажға - шаҡ ҡатырғыс факттарға ҡоролған, тормоштағы бысраҡлыҡтарҙы ғына йыйып, уларын дә күпертеп күрһәтеүсе баҫмалар ҙа етерлек. Бында мин, иң тәүге сиратта, ҡайһы бер үҙәк телеканалдарын телгә алыр инем - уларҙы ҡараған дан һуң: "Был донъя әллә аҡылдан яҙамы икән",- тип уйлайһың, сөнки психик йәһәттән нормаль режиссер йәки журналист тәмләп-тәмләп үлтереш, һуғыш, кешеләрҙең бер-береһен кәмһетеүен, йәберләүен, язалауын йәки фәхишәләр тормошон тасуирламаҫ. Әлбиттә, был осраҡта ваҡытлы матбуғатта эшләүселәрҙең әхлаҡи яуаплылығы хаҡында һүҙ йөрөтөргә кәрәк. Ғөмүмән, киң мәғлүмәт саралары йәмғиәт тормошон сағылдырыусы көҙгө, ә журналист - күргәндәрен тасуирлаусы, вайымһыҙ тылҡыусы ғына булып ҡалырға тейеш түгел, юғиһә, ул да ошо емергес эштә ҡатнаша булып сыға. Журналистың иң ҙур дошманы - ул битарафлыҡ. Буш күңелле, ояһыҙ, намыҫһыҙҙар ҡулындағы баҫма бая телгә алынған миҙалдың кире яғы менән әйләнә. Бөгөн журналист иң тәүге нәүбәттә үҙ намыҫы алдында саф һәм рухи йәһәттән сәләмәт булырға тейеш, сөнки уның һүҙе меңәрләгән, миллионлаған кешенең уй-фиғелен формалаштыра.

Халыҡтың нәфис менталитеты йәмғиәттең дөйөм рухи тормошона туранан-тура бәйле, шуға күрә музыкаль журналистика алдында ла шул уҡ бурыстар тора. Сәнғәт, айырыуса музыка сәнғәтенең рухиәттә тотҡан урыны бөгөнгө ҡатмарлы заманда, минеңсә, бигерәк тә мөһим, сөнки билдәле булыуынса, "Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр"! Ғөмүмән, башҡа сәнғәттәргә ҡарағанда, музыка сәнғәтенең - бигерәк тә классик әҫәрҙәрҙең - кеше күңеленә, аңына яһаған йоғонтоһо күпкә көслөрәк, сөнки ул, иң тәүге сиратта, кешенең хис-тойғоларына, аҡкы аңына мөрәжәғәт итә. Ә улары, үҙ сиратында, кешенең зиһенен уята, фекер тыуҙыра, күрәшкә күтәрә, уңыштарға илһамландыра... Һәм, киреһенсә, зауыҡһыҙ, түбән кимәлдәге "әҫәр"ҙәр кешенең аңын томалап, уны зомби хәлենә төшөрөүенә, маңҡортҡа әйләндереүенә шигем юҡ.

Башҡортостанда музыкаль журналистикаға тәүге нигеҙ ташын Ғәзиз Әлмөхәмәтов һалған. Үҙенең мәҡәләләрендә, "Башҡорт совет музыкаһын үҫтереү өсөн көрәш юлында" тигән китабында ул милли мәҙәниәт, сәнғәт проблемаларын күтәрә, шул иҫәптән ваҡытлы матбуғаттың тәрбиәүи роле, мәҙәни-ағартыу эшенең әһәмиәтен билдәләй. Шуныһы фәһемле: композитор күтәргән проблемаларҙың күбеһе беҙҙең заманға ауаздаш, һәм улай ғына ла түгел, бөгөн улар айырыуса киҫкен яңғырай, әйтерһең дә, 70-80 йыл элек түгел, ә замандашыбыҙ тарафынан яҙылған. Әлмөхәмәтов үҙе йәшәгән үтә лә ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы заман ҡуйған талаптарҙан ғына сығып түгел, ә ҙур, етди темалар хаҡында уйланып, киләсәк быуындарға төбәп мөрәжәғәт итеүе һоҡланыуға лайыҡ. Минеңсә, журналист тап шулай - конъюнктура хеҙмәтсеһе, көндәлек ығы-зығы ҡоло түгел, ә мәғрифәтсе, зауыҡ тәрбиәсеһе һәм уҡытыусы ла булырға тейештер.

Үҙемдең төп бурысым итеп тамашасыға юғары сәнғәт өлгөләрен еткереүҙе күрәм. Шөкөр, Башҡортостан телевидениеһы милли музыка сәнғәтенең классик ҡаҙаныштарын, халыҡ ижадын пропагандалауға күп көс һала, эфир селтәрендә тейешле ваҡыт бүленә. Ғ. Әлмөхәмәтовҡа бағышланған китаптың идеяһы ла Ҡош юлы программаһынан үҫеп сыҡты, һәм был эштә Башҡортостан ДТРК-һы ярҙам итте.

**2.** "Киске Өфө"нө уҡыусыларға тәҡдимем бар. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә һалған хеҙмәте тау саҡлы, һәм улар күптәргә мәғлүм. Уның иң оло ҡаҙаныштарының береһе - республикала музыкаль театр сәнғәтен булдырыу. Башҡортостандың берҙән-бер опера һәм балет театрының нигеҙе тап уның тырышлығы менән һалынған, һәм быны беҙҙең республика ғына түгел, ә Мәскәү, Ҡазан, Ырымбур архивтары ла дәлилләй. Республикабыҙҙың данын бөтә донъяға таратҡан йырсыларбыҙ, балет бейеүселәребеҙ, композиторҙарыбыҙ бар, бөгөн Башҡортостан мәҙәниәтен уларҙан башҡа күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Ә бит иң беренсе йырсыларҙы, буласаҡ композиторҙарҙы Ғәзиз Сәлих улы үҙе ауылдарҙан йыйып, Мәскәүҙә уҡытыуға өлгәшкән... Театрҙың бөгөнгө ҡаҙаныштарының башында - Әлмөхәмәтовтың башҡорт халҡының талантына ышанысы, уның матур киләсәген алдан күрә белеү һәләте ята. Күмәкләгәнәу ҡайтарған - тиҙәр. Әйҙәгеҙ әле, бергәләшеп, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовтың исемен биреү хаҡында уйлашайыҡ. Театр, һис шикһеҙ, Әлмөхәмәтов исемен йөрөтөргә хаҡлы.



**Хәмит НӘБИЕВ:**

**1.** Әле ҡасан ғына киң күләмле мәғлүмәт саралары, атап әйткәндә, гәзиттәр йәмғәтселек фекерен булдырыуҙа тәьҫирле сара тип иҫәпләнә ине. Шөп яңғырай. Шулаймы? Быңың ысынбарлыҡта нисек булыуы тураһында бәхәсләшергә

***✓ Ваҡытлы матбуғатты дүртенсе власть тип әйтеүгә ҡырҡа ҡаршымын. Матбуғаттың власть булыуы һис тә кәрәкмәй. Киң күләмле матбуғат сараларын дүртенсе көс, тиер инем мин.***

мөмкин. Һуңғы йылдарҙа илдең ижтимағи-сәйәси тормошонда ҙур үҙгәрештәр булды. Бындай шарттарҙа мәғлүмәт саралары ла даими, үҙгәрешһеҙ бирәмек булып ҡала алмай, тимәк. Коллектив агитатор, коллектив пропагандист һәм массаларҙы коллектив ойоштороуҙан бик аҙы ғына тороп ҡалды. Сығыштар тематикаһы киңәйҙе, журналистар иркенләберәк, ҡыйыуыраҡ яҙа башланы. Шул уҡ ваҡытта авторҙар активы бер ҡәҙәр аҙайҙы, ябай хеҙмәт кешеһенә иғтибар хаҡһыҙ рәүештә кәмей башланы. Очерк кеүек нәфиспублицистик жанр - район ғына түгел, хатта республика матбуғатында ла гәҙәттән тыш һирәк күренеш. Ә фельетон бөтөнләй юҡҡа сыҡты шикелле. Ана шуға күрә лә ысын публицистар исемлеге әллә ни оҙон түгел.

Ваҡытлы матбуғатты дүртенсе власть тип әйтеүгә ҡырҡа ҡаршымын. Матбуғаттың власть булыуы һис тә кәрәкмәй. Киң күләмле матбуғат сараларын дүртенсе көс, тиер инем мин. Тик ижад итеүсе, тормошсан көс, ә емереүсе түгел. Ваҡытлы матбуғат дәүләт сәйәсәтенә, ил курсына йоғонто яһау институтына әүерелергә тейеш.

**2.** Матбуғатта демократия "нимә теләйем, шуны яҙам" түгел ул. Үҙен журналист тип иҫәпләүсе һәр кемдә лә эске цензор, дөрөҫөрәге, контроллэүсе "ултырырға" тейеш. "Зыян яһама!" тигән дин ҡануны - беҙҙең һөнәрҙең төп ҡағиҙәләренең береһе. Мине шуныһы гәжәпкә ҡалдыра: федераль баҫмаларҙа илебеҙ, уның тарихы, дәүләт башлыҡтары тураһында ни тиклем бысраҡ һүҙҙәр яҙыла, хайран ҡалырлыҡ. Туған төбәгеңде шул тиклем ҡәҙерһеҙләү, уны яратмау ярай торған эшме ни? Бынан һуң беҙ кем булабыҙ? Кем беҙҙе ихтирам итһен? Һәм нимә өсөн?



**Руфина ХӘСӘНОВА:**

**1.** Ваҡытлы матбуғаттың ил, халыҡ тормошондағы роле элек тә ҙур булды, әле шулай дауам итә. Республикала нәшер ителеүсе гәзит-журналдар барыбер ябай халыҡ массалары үҙәренең һүҙен еткерә. Мәҫәлән, беҙ, "Өмөт" гәзите журналистары, уҡыусыларыбыҙҙы республикалағы хәлваҡиғалар менән таныштырып ҡына ҡалмайбыҙ, хәбәрсе булараҡ, үҙебеҙҙең ҡараштыла еткерәбеҙ. Ваҡытлы матбуғат объектив булырға тейеш. Бына шул объективлыҡ һаҡланһа, гәзит үҙенең популярлығын юғалтмаясаҡ, тигән һүҙ. Журналист булараҡ, минә ябай, аңлайышлы тел менән яҙылған, әммә шул уҡ ваҡытта етди проблемаларҙы яҡтыртҡан төплө яҙмалар оҡшай.

**2.** Әйтергә теләгән фекерен әйтә, яҙа алыу - журналист оҫталығына бәйле. Мин "Өмөт" биттәрендә баҫылған яҙмаларымда нисек тә үҙемдең уй-фекерҙәремде матур итеп ябай халыҡҡа еткерергә тырышам. Был объектив булырға ынтылыуҙан килә. Һәр бер журналист та шундай булырға тейеш, тип уйлайым.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…*

# ҺӨНӘР МӘРТӘБӘҺЕН АРТТЫРЫП

**Фәрит Вафа улы бына байтаҡ йылдар "Ватандаш" журналының баш мөхәррире вазифаһын уңышлы атҡарып, баҫманың йөкмәткеһен һәм биҙәлешен юғары кимәлгә күтәреүгә өлгәште. Журнал үҙенең билдәләнеше, концепцияһы, баҫылған мәҡәләләрҙең тос, төплө, аналитик йөкмәткеле булыуы менән республика баҫмалары араһында лайыҡлы рәүештә үҙ урынын тапты.**



Ижади ҡомар менән янған, һәр ваҡиға, күренешкә етди фекере, күнегелгән ҡалыптарға үҙенсәлекле ҡарашы булған Фәрит Вафа улы инде өсөнсө йыл Башҡортостан Республикаһы Журналистар союзын етәкләй. Ҡәләм оҫталары ҡатнашлығында уҙған һәр сараның юғары кимәлдә үтеүендә ул бар көсөн, илһамын һала. Матбуғат көнө, Йәш журналистар фестивале, семинарҙар - былар барыһы ла уның йәмәғәт эшмәкәрлегенә маһирлығын күрһәтә.

Быйыл Фәрит Әхмәҙиевтың ике китабы ("Башҡорт журналистикаһының әхлаҡи мәҙәниәте традициялары" һәм "Журнал журналистикаһы") донъя күреүе иһә уны эҙләнеүсән, фән менән етди ҡыҙыҡһыныусан журналист булараҡ һүрәтләй.

"Башҡорт журналистикаһының әхлаҡи мәҙәниәте традициялары" журналистика этикаһына, әхлаҡи традицияларҙы үҫтереү, Рәсәй йәмғиәтендә киң мәғлүмәт сараларының йәмғиәттең әхлаҡи торошона йоғонтоһо, ветерандар өлгөһөндә йәш белгестәр әҙерләү кеүек мөһим мәсьәләләргә арналған. Журналист морале, автор фекеренсә, ниндәйҙер бер айырым гәзит, журнал йәиһә телеканалдың мәнфәғәттәренә генә йүнәлтелергә тейеш түгел, ул, барыһынан элек, йәмғиәтҡә хеҙмәт итергә бурыслы. Баҫмала шулай уҡ коллективта һөнәри этиканы булдырыуҙа баш мөхәррирҙең роле, "идеаль журналист" тәрбиәләүҙең анығ юлдары һүрәтләнә. Башҡорт журналистикаһының әхлаҡи мәҙәниәте традицияларын һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү республика киң мәғлүмәт сараларының тейешенсә эшмәкәрлегенә булышлыҡ итәсәк, тип иҫәпләй автор.

"Журнал журналистикаһы" монографияһында Ф.Әхмәҙиев күләмле баҫма редакцияһында эште ойоштороу мәсьәләләрен тикшерә, журналдың баш мөхәррире булып эшләү осоронда туплаған ҙур тәжрибәһе нигеҙендә журнал хеҙмәткәрҙәре эшмәкәрлегенең этик аспекттарын һәм редакция эше практикаһын дөйөмләштерә һәм анализ яһай. Китаптың инеш өлөшөндә былай тиелә: "Был китап - авторҙың башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә сыға килгән "Ватандаш" - "Соотечественник" - "Compatriot" айлыҡ ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис журналында баш мөхәррир вазифаһында оҙаҡ йылдар (2000 йылдан алып әлегәсә) эшләү осорондағы эшмәкәрлеге, этика, журнал журналистикаһы, хәҙерге заман мәғлүмәт өлкәһендә журналдың баш мөхәрриренең роле хаҡында уйланыуҙар һөҙөмтәһе. Билдәле булыуынса, журнал билдәле циклда ҡабатланып, ай һайын сыға. Һәләтле журналистарҙың эш тәжрибәһен өйрәнеү, эшкә яңы килеүселәрҙе өйрәтеү, редакция эшенә етәкселек итеү, хеҙмәткәрҙәр менән оператив кәңәшмәләрҙә журналист этикаһы һәм уның яуаплылығы, мөхәррирләү, материалдың мәғлүмәтлелеге, резюме яҙыу, кварталға план төҙөү хаҡында бер үк производство инструкциялары ҡабатлау, тираж, гонорар, корректура, журналдың тышлығын биҙәү, журналды алдырыусы уҡыусылар тураһында мәсьәләләрҙе хәл итеү ошо китапты яҙыуға алып килде лә инде. Ҡыҫҡаһы, был китап беҙҙең нисек яҡшы журнал эшләргә тырышыуыбыҙ хаҡында".

Бөгөнгө көндә киң мәғлүмәт саралары үҫешенең бик күп проблемалары буйынса фәнни әҙәбиәт байтаҡ, әммә журнал редакцияһы эшмәкәрлеген, айырыуса күләмле баҫманың эш үҙенсәлектәрен этик йәһәттән яҡтыртыуға арналған хеҙмәттәр юҡ тиерлек. Киң мәғлүмәт сараларында һәм Башҡортостан һәм Рәсәй Журналистар союзында күп йыллыҡ эш тәжрибәһе нигеҙендә мәҙәни-философик материалдарҙы уңышлы ҡулланып яҙылған был хеҙмәттәр - башҡорт журналистикаһында яңы күренеш, уларҙың әһәмиәте һәм үҙенсәлеге баһалап бөткөһөҙ. Был хеҙмәттәр, һис шикһеҙ, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына лайыҡ.

**Рәйлә ШӘКҮРОВА,**
**"Ватандаш" журналының**
**бүлек мөхәррире.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## "Партизан малай"

Атаһы Азаматты ауыл хужалығы техникумына алып барып индерҙе. Малай бик ҡарышты, унда уҡырға теләмәне, шулай ҙа ҡалды. Азамат өйҙә булмаһа ла, бына гәжәп, 1-2 малай быларға килә. Береһе Азаматтың әсәләре менән һөйләшә, икенсеһе сығып китә. Сер аҙаҡ сиселде. Атаһы ҡайтыуҙың иртәгәһенә үк малайбыҙ ҡайтҡан да һарай ҡыйығында йәшенгән. Ә иптәштәре көн һайын ашарға ташый, яҫтыҡ-түшәк килтергән икән. Атаһы ҡыйыҡтан нимәләр эҙләгәндә, улын "табып алған". Шунан бирле уны "партизан малай" тип йөрөтәләр. Теләмәгән шөғөлдә кешегә көсләп тағып булмай, тигәндәре дөрөҫ икән.

## Морат бесәйгә исем ҡуша

Малай өләсәһе менән Ҡөрьән ашында, исем ҡушыу мәжлесендә була. Мулланың бәпәй ҡолағына исемен әйтеүҙе бик ҡыҙыҡһып ҡарай. Ҡайтҡас, бесәйен мендәргә һалып: "Исемең Киска булһын, Аллаһу әкбәр", - тип ҡабатлай. Бала нимә күрә, шуны ҡабатлай икәнде онотоорға ярамай.

## Рәйсә ҡаҙ себешен "тикшерә"

Ҡыҙ, әсәһенең ҡаҙ йоморҡаларын һыуға һалып, себешлеметүгелме икәнен белергә теләүен тыңлап тора. Әсәһе эшкә китеү менән "эшкә тотона". Таҫҡа ҫеҫ һыу ҡоя ла ҡаҙ йоморҡаларын тупырҙатып шунда һала. Әсәһе эштән ҡайта ла йоморҡаларҙы иҫкә ала. Ә Рәйсә: "Әсәй, мин уларҙы эҫе һыуға һалдым инде, ыҙалама", - ти. Йомортҡа эсендәге себештәр бешеп үлгән, береһе лә ҡалмаған. "Әсәнән күргән - тун бескән" мәҡәле был эштә киреһен күрһәтте. Гел ыңғай булмай шул - ни хәл итәһең.

## Ғәлим себештәр сала, "ит әҙерләй"

Шәмсиә килен йыл да бик күп тауыҡ себеше һатып ала, көҙ уларҙан бик күп ит әҙерләй. Ғәлимгә 5 йәш, ул тауыҡ салғанды күреп тора. Бер көндө, өләкәндәр юҡ саҡта, ваҡ тауыҡ себештәрен салып, ялғашҡа ултыртып ҡуя. Әсәһе ҡайтҡас: "Әсәй, мин ит әҙерләнем, бер ялғаш", - тимәһенме. Әсәһе ни әйтергә лә белмәй, малайҙы әрләй. Ғәлимдең иҫе лә китмәй: "Атайым өлкән тауыҡтарҙы салһа ла әрләмәйһең, мин себештәрҙе генә салдым", - тип әрәпләшә. Ҡайһы бер эштәрҙе, бигерәк тә мал, ҡош-ҡорт салыуҙы балаларға күрһәтергә ярамай икәнен һәр саҡ иҫебеҙҙә тотайыҡ.

## Ҡояш байымаған, улар үбешә

Дүрт йәшлек Розаның телдәрлегенә бөтәбеҙ ҙә хайран ҡалабыҙ. Ниндәй һорау бирһәң дә яуабын таба, үҙе лә төпсөнә. Бер көндө ҡыҙ күрше инәйенә килә. Инәһе эргәһендә бабайы ла ултыра. Роза: "Ни эшләп ултыраһығыҙ?" - тип төбәшә. Инәһе лә шаяртып: "Бына, бабай менән үбешеп ултырабыҙ, өйҙә бесәй күрә, оялабыҙ", - ти. Ҡыҙ аҙыраҡ өндәшмәй генә баҫып тора ла китеп бара. Осраған берәүгә: "Ҡояш байымаған, лампочка ла һүнмәгән, анау икәү үбешеп ултыра", - тип һөрән һала. Шунан бирле ике кеше бергә торһа, ҡояш байымаған, үбешеп тораһығыҙмы, тип мәрәҡәләйҙәр. Бала күңеле - саф шишмә, нимә әйтһәң дә ысынға ала, һүҙ менән дә, эш-фиғыл менән дә һаҡ булырға кәрәк.

## Һалмуҡ кәрәк

Әсәһе Илнурҙы поезд менән Белоретҡа ҡунаҡҡа алып бара. Хужабикә Физия апайҙың гармуны ла була, ул уйнағанда Илнур бейеп күрһәтә, ҡыҫҡаһы, ҡунаҡтан бик күңеле булып ҡайта малайҙың. 1-2 ай үткәс, малай тағы, ҡунаҡҡа барайыҡ, тип мыжый башлай. Әсәһе Яңы йыл байрамына уны тағы Белоретҡа алып китә. Сәй эсергә ултырыу менән малай "Һалмуҡ ҡайҙа, һалмуҡ кәрәк", - ти башлай. Төрлө ризыҡ күрһәтеп ҡарайҙар, ахыры, һорағанын үҙенә эҙләргә ҡушалар. Бер мәл ул карауат аҫтынан гармун килтереп сығара, үҙе көлә, шатлана. Шунан бирле гармун күрһәләр: "Илнурҙың һалмуғы" тип көләләр. Бала теле мең ҡырлы: береһен дөрөҫ әйтһә, икенсеһен үҙенсә уйлап сығара, башҡаларҙы ла аңларға мәжбүр итә.

## Эльвира һыйырҙан ояллы

Йәй етһә, ҡалалағы ейән-ейәнсәрҙәр ауылдағы өләсәйгә ҡунаҡҡа ҡайтыла. Эльвира ла ауылға килде, себештәр ашатып, быҙау баҫтырып көндө үткәрҙе. Кис өләсәһе менән көтөүҙән һыйыр ҡаршыларға китте был. Тау артынан мал төшә башлағайны: "Ах, ояттһыҙ һыйырҙар, көтөүгә ыштанһыҙ барғандар, мин уларҙан оялам", - тип, йүгереп ҡайтып китмәһенме. Эй, бала, кешеләге бөтә сифат һәр йән эйәһенә хас тип фекер йөрөтә шул ул.

## Харрастың эсе көтөлдәй

Элек бала-саға нигеҙ буйлап ҡояшҡа ҡыҙынырға теҙелеп ултыра торғайны. Ул саҡта балаларҙың ашау-эсеүе лә таҡы-тоҡо булғандыр, ни тиһәң дә нуғыш йылдары. Ҡыҙынып ултырғанда, Харрас тигәненең эсе шатырлай. Аралағы иң ҙур малай тегегә: "Харрас, ниңә эсең көтөлдәй?" - тип һорай, һаҡаулап. Тегеһе үҙенең гәҙәттәге һаҡау теле менән: "Эҫем ойотҡан һолап көтөлдәй, әле ойомаған шул", - тип яуаплай. Берәү ҙә көлмәй, һәр береһенең хәле бер иш бит. Әле лә берәйһенең эсе шытырлаһа, шул хәлде иҫкә төшөрөп, һағышлы ғына көләшәләр. Һәр мәрәкә ҡыҙыҡ түгел шул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы.**

✓ *Өндәшмәү - ул Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеү; өндәшмәү - ул биҙәүестәрһеҙ ҙә матур биҙәүес; өндәшмәү - ул аҡса, хакимлыҡ ҡулланмай ғына ла көслө булыу; өндәшмәү - ул ҡоймаһыҙ ҡәлғә;*



*ӘЙТӘГҮР!*

# ТЕЛ ӨҪТӨҢӘ...

## таш ҡуй

**Хәҙерге көндә кешеләр матди хәленә, йәшенә, енесенә ҡарамай, телен әр һүҙҙәре менән бысрата. Әр һүҙҙәре йәмәғәт урындарында, мәктәптәрҙә, хатта балалар баҡсаларында ишетелә. Кем, дөрөҫөрәге, нимә ғәйепле быға? Балаларын ҡара йәштән тәрбиәләмәгән ата-әсәме, бөгөнгө көндөң ҡаҡшаған әхлаҡ ҡанундарымы? "Head-Hunter" компанияһы рәсәйлеләрҙең эштә иҫерткес эсемлектәр ҡулланыуын һәм һүгенеүен асыҡлау менән шөғөлләнергә ҡарар итә. Һөҙөмтәләр иҫ китерлек! Ун офистың һигеҙендә һүгенепме һүгенәләр! Күберәк журналистар, маркетинг, реклама өлкәһе хеҙмәткәрҙәре, администраторҙар һүгенә икән. Мәҙәниәтле халыҡ булабыҙ, тиһәк, иң беренсе беҙгә телебеҙҙән әр һүҙҙәрен алып ташларға кәрәк. Быны өсөн ниндәй саралар ҡулланып булыр? Һүгенергә яратыусы кешеләрҙе нисек тыяһығыҙ?**

**Регина НАСИБУЛЛИНА, табип:** Һүгенеү - хис-тойғоларҙың "үҙенсәлекле" сағылышы икәнлеген беҙ яҡшы беләбеҙ. Кеше йәне көйгәндә генә түгел, шатланғанда ла насар һүҙ ысҡындырып ебәрә ала. Минеңсә, кеше тәү сиратта тел ярлылығы арҡаһында һүгенә. Ул үҙ тойғоларын һәйбәтләп белдерә алмай, шуға күрә әр һүҙҙәрен ҡуллана ла инде. Йәғни, тел ярлылығы фекерләү ярлылығына килтерә. Был мәсьәләне ғаилә сиктәрендәге тәрбиә өлөшләтә генә хәл итә алыр ине. Сөнки кеше ғаиләлә генә тәрбиәләнмәй. Урам, тиҫтерҙәр тәрбиәһе тигән төшөнсәләр ҙә бар психология фәнендә. Тотош йәмғиәтте тәрбиәләмәй тороп, ниндәйҙер һөҙөмтәләр көтөү файҙаһыҙ эш, минеңсә. Дин, әхлаҡ күҙлегенән, хилаф эшкә күмәкләп ҡаршы тороу мөһим. Уның өсөн рух берҙәмлегенә ынтылырға кәрәк.

**Илһам ИШБИРҘИН, студент:** Ысынлап та, хәҙерге заманда һүгенмәгән кеше һирәк, тип әйтергә лә булалыр ул. Күптән түгел генә автобуста китеп барғанда кондуктор менән бер пассажир нимәгәлер һүҙгә килешеп китте. Бер-берeһенең өҫтөнә әр һүҙҙәрен яуҙырҙылар ғына! Ауылда шундай йәмһеҙ күренешкә тап булғайным. Яңы теле асылған балаларға ололар һүгенеү һүҙҙәрен өйрәтәләр ҙә, баланан ҡабатлатып, шунан мәҙәк табалар. Бала улар көлгән һайын баяғы һүҙҙе ҡабатлай. Етмәһә, кемдәр өйрәтә бит әле былдай йәмһеҙ һүҙҙәргә: өләсәһе, олатаһы, инәй, ағайҙары! Киреһенсә, бала былдай һүҙҙәрҙе бөтөнләй ишетмәй үҫергә тейеш тә баһа! Бына тәрбиә шунан башлана инде: ололар ниндәй үрнәк күрһәтһә, йәштәр шундай булыр. Шуға күрә, иң беренсе ололар һүгенмәһен. Быны булдыра алмай икән, балалар алдында булһа ла телен тыйһын.

**Ләйсән ХӨСӘЙЕНОВА:** Һүгенеү, ул хәҙер эскелек кеүек үк, ҙур проблемаға әйләнеп бара. Был иң беренсе беҙҙең тәрбиәһеҙлекте күрһәтә. Ысынлап та, ҡайҙа барһаң да һүгенәләр. Олоһо ла, кесеһе лә... Бала һүгенеү һүҙҙәрен ҡайҙан өйрәнә? Әлбиттә, ололарҙан. Тимәк, мәҙәниәтле киләсәк тәрбиәләйбеҙ тиһәк, иң беренсе, ололар һүгенмәҫкә өйрәнергә тейеш. Әгәр алама һүҙ әйтеү ғәҙәтеңә ингән икән, уны яҡшы һүҙ менән алмаштыр. Был һис тә ауыр түгел, һинән тик тырышлыҡ ҡына талап ителәсәк. Мәҫәлән, һоҡланған ваҡытта - "Машалла", ҡыуанған, шатлыҡлы хәбәр ишеткән саҡта "Собханалла", ғибрәтле хәл күрһәң, йә ишетһәң - "Әстәғәфирулла", аптыраһаң - "Аллаһ, Аллаһ"... Бына бит, асылыбыҙға тап килгән ниндәй матур ҙа, мәғәнәле лә һүҙҙәребеҙ бар. Шуларҙы әйтеүҙе ғәҙәтебеҙгә индерһәксе!

**Шулай итеп...**

**Хәҙрәти Әбүбәкер әс-Садиҡтың бер ғәҙәте булған. Ул артыҡ күп һүҙ һөйләүҙән һаҡланыу өсөн теленең өҫтөнә таш ҡуйған, ти. "Көтмәгәндә телдән урынһыҙ, кәрәкмәгән һүҙ сыҡмаһын", - тип әйтер булған һәм теленә ишара итеп: "Мине һәләк ҡылыр ошо тел", - тигән. Йәмғиәт мәҙәниәтле булһын өсөн иң беренсе халҡы күркәм телле, алсаҡ йөҙлө, ихлас күңелле булырға тейеш. Тимәк, беҙгә был камилгә етер өсөн иң беренсе телебеҙҙән әр, һүгенеү һүҙҙәрен алып ташлау мөһим. Бәлки, беҙгә лә телебеҙ өҫтөнә таш ҡуйырғалыр?**

**Айытбикә НӘЗИРОВА.**

*ӘҘӘПКӘ ҒӘҘӘТЛӘНҺӘҢ...*

# ӨНДӘШМӘЙ ҠАЛЫУ...

## ете бәхет туплаусы хазина



**Бәйғәмбәребеҙҙең бер сәхәбәһе, әгәр кеше йөрәгендә тыныслыҡ, ә тәнендә хәлһеҙлек тоя икән, был, һис шикһеҙ, уның кәрәкмәгән, буш, мәғәнәһеҙ һүҙҙәрҙе күп һөйләүенән килә, тигән. Ғүмәр сәхәбә, күп һөйләгән кеше хаталар яһай һәм үҙенең намыҫын бысрата, тип күп һүҙ һөйләүҙән һаҡланған. Бәйғәмбәр кешеләргә былай тип мөрәжәғәт иткән: "Асығыусыларҙы ашатығыҙ, һыуһағандарҙың һыуһынын ҡандырығыҙ, изгелеккә өндәгеҙ, яуызлыҡты тыйығыҙ. Әгәр ҙә быға көсөгөҙ етмәһә, яҡшылыҡ килтермәгән һүҙҙәрҙән булһа ла һаҡланығыҙ". Өндәшмәү - ғалимды биҙәй һәм наҙанды ҡотҡара. Бөйөк кешеләрҙең береһе өндәшмәүҙе үҙендә ете бәхет туплаусы хазина менән сағыштырған. Уны ете һөйләм менән аңлатып була, бына улар: өндәшмәү - ул Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеү; өндәшмәү - ул биҙәүестәрһеҙ ҙә матур биҙәүес; өндәшмәү - ул аҡса, хакимлыҡ ҡулланмай ғына ла көслө булыу; өндәшмәү - ул ҡоймаһыҙ ҡәлғә; өндәшмәү - ул бер кемдән дә ғәфү үтенергә кәрәкмәгән шундай хәл; өндәшмәү - ул беҙҙең ғәмәлдәребеҙҙе яҙып тороусы фәрештәләр өсөн ял; өндәшмәү - ул етешһеҙлектәрҙе йәшереү.**
**Ә һеҙ ниндәй кеше? Күп һөйләйһегеҙме, әллә күп осраҡта өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәһегеҙме? Өндәшмәй ҡалыу яҡшы сифатмы?**

**Рәмил ХӘЙРУЛЛИН, уҡытыусы:** Ысынлап та, өндәшмәү, тын ҡалыу кешегә үҙен, йөрәген эске күҙлектән ҡарарға мөмкинлек бирә. Шым булған ваҡытта кешенең йөрәге бер ваҡытта ла буш булмай. Шул ваҡытта үҙеңә дөрөҫ йүнәлеш бирергә кәрәк: мәҫәлән, матур уйҙар уйларға, алдағы көндәргә пландар ҡорорға... Өндәшмәй ҡалып, кеше үҙен хаталарҙан, ғәйбәттән, ялғанлауҙан, ике йөҙлөлөктән, мин-минлелектән һаҡлай. Үҙеңә ҡағылмағанға ҡыҫылма, тиҙәр бит. Был осраҡта ла өндәшмәү ярҙам итә. Үҙенең эске тынлығын һаҡлап, йәғни эстән һөйләшеүҙәрҙе туҡтатып, кеше Йыһанды тыңлай, күп нәмәләрҙе төшөнә ала. Бер аҡыллы кешенән: "Һеҙ Аллаһы Тәғәләне таныйығыҙмы? Һеҙҙең Уның тураһында ғилемегеҙ бармы?" - тип һорағандар. Был аҡыллы кеше башын эйгән һәм бер аҙ ваҡыт үткәндән һуң: "Кем уны таныған, шул тын ҡалыр һәм һәр ваҡыт фекер йөрөтөр", - тигән. Бәйғәмбәребеҙ ҙә (салаллаһу ғәләйһи вә сәләм) үҙенең сәхәбәләренә нәсихәт биргәндә баҫалҡы, тыныс, әҙ менән ҡәнәғәт, тын ҡала белеүсе кешеләр менән бергә булырға кәңәш иткән. Сөнки ундай кешеләр ваҡытында өндәшмәй ҡала беләләр, һәм шуның менән аҡыллылар. Был ысулды үҙем дә ҡулланғаным бар. Ҡайһы ваҡыт асыуланған ваҡытта кешегә ҡаршы өндәшке килә, шунан, ярай, өндәшмәйем әле, түҙәйем, тип ҡалам. Һуңынан, әл дә әйтмәгәнмен, тип ҡыуанам. Бына шундай осраҡта өндәшмәй ҡалыу - файҙалы.

**Эльвира ҺАБАНАҠОВА, студент:** Ғөмүмән, мин аҡыл эйәләре, ғалимдарҙың кәңәштәрен, әйткән һүҙҙәрен уҡып, үҙемә фәһем алыусы, тормошта ҡулланыусы кеше. Өндәшмәүҙе лә аҡыл эйәләре, ғалимдар һәр ваҡыт яҡшы, тип һанаған. Кәрәкмәгән, насар һүҙҙәр, ысынлап та, күңелһеҙ күренеш. Өндәшмәй ҡала белеү бигерәк тә кәйеф булмаған, асыуланған осраҡта файҙалы, сөнки ундай осраҡта ғәҙел булыуы ауыр, бөтәһен дә әйтеп бөтөп, аралашҡан кешене ғәйепләүең бар. Ә һуңынан үкендерһә лә "Терһәкте тешләп булмай". Ошондай осраҡтарҙа шымып ҡалһаң, һуңынан намыҫың ғазапланмаҫ, бүтән кешеләрҙе лә юҡҡа ғәйепләмәҫһең. Минең дә, алай ҙа әйтмәгәнмен, тип ҡыуанған ваҡыттар булғаны бар. Әйткән булһам, аралар боҙолған булыр ине. Шулай уҡ ололар шелтә биргәндә лә өндәшмәй ҡалыу хәйерлерәк. Һуңынан яйлап, фекер йөрөтөп, үҙеңә кәрәгенсә эшләргә мөмкин. Ә ололарға ҡаршы өндәшеү - беҙҙең халыҡта элек-электән әҙәпһеҙлек һаналған.

Шул уҡ ваҡытта, әгәр ғәҙелһеҙлек күрһәң, өндәшмәй ҡалыу - гонаһ булыр ине. Был осраҡта, шымып, "ҡасырға" түгел, ә ғәҙелһеҙлекте төҙәтеү, дөрөҫлөктө өҫкә сығарыу мотлаҡ.

**Илнур ИСКУЖИН, программист:** Һәр осраҡта сама белергә кәрәктер, тип уйлайым мин. Кеше ҡасан әйтергә, ә ҡасан өндәшмәй ҡалырға кәрәк икәнлеген белергә тейеш. Кемдеңдер хоҡуғы кәмһетелгән, закондар боҙоп күрһәтелгән осраҡта шымып ҡалыу енәйәткә тиң булыр ине. Шул уҡ ваҡытта үҙең ғәйепле булып та, ҡаршы өндәшеү, йә кемдәрҙер үҙ-ара ниндәйҙер мәсьәләне хәл иткәндә ҡыҫылыу насар күренеш. Ҡайһы бер кешеләр кәрәкһә, кәрәкмәһә лә күп хәбәр һөйләргә ярата. Улар был саҡта үҙҙәрен алсаҡ, ихлас кеше итеп күрһәтергә тырыша. Ләкин күп хәбәр һөйләгән ваҡытта йыш ҡына шаяртып булһа ла алдашыуҙар китә, йә яңылыш кемделер кәмһетеүең мөмкин. Шуға күрә, артыҡ күп хәбәр һөйләп, кешене ялҡытырға ла ярамай. Әҙәм балаларының күбеһе теле арҡаһында гонаһҡа бата. Юғары әхлаҡлы кеше бер ваҡытта ла шашып, күп хәбәр һөйләп ултырмай ул һәм шуның менән бәхетле лә.

**Шулай итеп...**

**Ысынлап та, һәр эштә сама белеү мөһимдер. Өндәшмәү - диндә лә әҙәплелек билдәһе. Бәйғәмбәребеҙ (салаллаһу ғәләйһи вә сәләм) күп һөйләргә һәм үҙенә ҡағылмағанға ҡыҫылырға яратыусыларҙың күп хата яһауы тураһында әйтә. Шуға күрә беҙ ҙә хаталарҙан йыраҡ торорға тырышайыҡ, тик шулай ҙа ғәҙелһеҙлек күргән саҡта шымып ҡалмайыҡ.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# БОРСОЛМА

Борсолма. “Аллаһ биргән ҡөҙрәтте бер кем дә туҡтата алмаҫ, Аллаһ бирмәгәнде Унан башҡа бер кем дә бүләк итә алмаҫ. Сөнки Ул - Бөйөк, Аҡыллы”.

Борсолма. Ҡайғы, мәшәҡәттәре булмаған берәүҙе лә тапмаҫһың был донъяла. Күңелеңде изге эштәр менән киңәйт.

Борсолма. Йөрәгеңде, тыныслыҡ һәм зекер торошондо һаҡла.

Борсолма. “Был донъяла тыныслыҡ юҡ” - Бәйғәмбәр шулай тигән.

Был донъя һынауҙар урыны булмаһа, бында ауырыуҙар ҙа, ҡайғылар ҙа, ҡытлыҡ та булмаҫ ине. Сүрә уҡыуҙар, изгелек ҡылыуҙар, ваҡытында бөтә нәмәне башҡарыу, уратып алған иманлы кешеләр, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр уҡыу - былар барыһы ла иң ауыр мәлдәрҙе еңеп сығырға ярҙам итәсәк.

Борсолма. Эшләй алғаныңды эшлә һәм Аллаһтың ярҙамына, ҡөҙрәтенә ышан.

✓ ***Баҡтиһәң, халҡыбыҙ бөтөнләй эсмәй икән, ә был йылдар беҙгә оло һынау ғына булған. Иманыбыҙ шуға камил булһын, яңынан 35-45 йылдан беҙҙең халыҡ иблис һыуынан бөтөнләй азат буласаҡ.***



ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 14-се һабаҡ: "Башҡорттар эсмәй"

Бер заман гәзит-журналдарҙа "Халҡыбыҙ эсә, үләбеҙ, ҡырылабыҙ", - тигән һымағыраҡ әрнеү-һыҡтау һүҙҙәре күбәйеп китте лә, был зарланыу тулҡыны нисек башланып киткән булһа, шулай уҡ тынып ҡалды. Ни өсөн шулай: әллә мәсьәлә үҙенән-үҙе ыңғай яҡҡа хәл ителдеме, йәғни эсеүселәрҙең барыһы ла тәүбәгә килдеме, әллә эсеү беҙгә оҡшап уҡ ҡалдымы?

Юҡ! Ваҡытлы матбуғатта былдай яҙмаларҙың күренмәй башлауының сәбәптәре бөтөнләй икенселә. Дөрөҫөн әйткәндә, халҡыбыҙ бөтөнләй эсмәй. Шуға күрә "Халҡыбыҙ эсә", - тигән былдай һүҙбәйләнеш, үҙе уҡ ысынбарлыҡҡа тап килмәгәнлектән, оҙаҡ йәшәй алманы.

XX быуат аҙағында һәм XXI быуат башында кемдәрҙер иблис һыуы менән "шаярып" алған икән, бер нисә мең йыл йәшәгән тотош халыҡты эсә тип әйтеү - яҙыҡ һүҙ. Был йылдар дөйөм халыҡ ғүмеренең бер процентын да тәшкил итмәй, йәғни кеше ғүмеренең бер көнө лә түгел. Тормошоноң бер көнөндә кемдер бераү ниндәйҙер яҙыҡ эш башҡарһа, барлыҡ ғүмере улай түгел бит. Икенсенән, бер тапҡыр яңылған хата ғүмерлек мөһөр була алмай. Шуға күрә, "Халҡыбыҙ эсә" тип әйтеү Урал батыр рухын йөрөткән халыҡтан, ерһыуыбыҙ, милли асылыбыҙ өсөн йәнен ҡорбан итеүселәрҙең әруаҡынан көлөү булараҡ яңғырар ине. Үҙ кәйефенең, нәфсеһенең ҡоло булғандар иблис һыуына йөгонған икән, улар бит халыҡ түгел, бары айырым бер вәкилдәре генә.

Мәсьәләгә бөтөнләй икенсе яҡтан килеү зарурҙыр. Әйтәйек, шундай билдәләмә тәҡдим итәм: "XX быуат аҙағында һәм XXI быуат башында башҡорт милләтенең ҡайһы бер вәкилдәре дин юлынан тайпылып, иблис һыуы эсеп, юлдан яҙлыҡып алды. Әммә эскелек был халыҡтың йолаһына әүерелә алманы, сөнки ул башҡорттоң әхлағына ҡаршы килде, милләтте эске яҡтан тарҡатыу, тәбиғи асылын ҡыйратыу ҡурҡынысы менән янаны. Шуға күрә оло илдә тәрән кисереш мәле еткәс, милләттең аҫыл улдары һәм ҡыҙҙары эскелекте бөтөнләй инҡар итте..."

Күрерһегеҙ, милләтебеҙ был сирҙән башкөллә арынғас, ошо билдәләмә үҙенән-үҙе тыуасаҡ. Шулай тип әйтергә минең тулы ышанысым бар һәм был ҡоро оптимизм түгел.

"Халҡыбыҙ эсә" тигән кеше үҙенең дә эсеүен аҡлар өсөн әйтә был һүҙҙәрҙе. Йәнәһе, үҙе лә ошо уҡ халыҡтың вәкиле һәм "халҡыбыҙ" тигәнгә үҙен дә индереп, үҙенең ихтыярһыҙ булыуын шулай йәшерергә маташа. Тотош милләтте эсә тип әйтеү өсөн халыҡ яралғандан алып үткән ваҡыттың яртыһынан күберәге ошо йөгонтола үтергә тейештер, минеңсә. Ҡайһы бер халыҡ вәкилдәренең генә юлдан яҙлығыуын, оло хатаһын тотош халыҡҡа япһарыу - дошман һүҙе ул.

Ысынында иһә, башҡорттар эсмәй. Дәлилдәрме? Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр"енә генә туҡталайыҡ. Унда "Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайы" (Ә.В. Туған "Хәтирәләр", Өфө -1996, "Китап", 205-се бит) тигән бүлектә шундай юлдар бар: "... Үҫәргән кантонында, батша тарафынан дөйөм мобилизация мөнәсәбәте менән араҡы һатыу тыйылғанлыҡтан, Самакиндың араҡы фабрикаһында бик күп араҡы йыйылғайны. Уны конфискациялап, рустарға һатырға ҡарар иттек. Был яҡтағы бөтә рус ауылдарынан, хатта Ырымбур казак ауылдарынан рустар сәйнүк, шешә, биҙрә, ҙур шешә, мискә менән килделәр. Осһоҙ хаҡҡа һатылды. Ярты миллион һум тирәһе рус аҡсаһы йыйылды... Ҡыҙыҡ ваҡиғалар ҙа булғыланы. Рустарҙың күбеһе шунда уҡ эсеп, фабрика янында аунап ятты. Стакан менән эсеп туя алмай, ҡайһылары мискә кранына ауыҙын ҡуйып эсә башланылар. Береһе бер нисә метр бейеклектәге мискәнең өҫтөнә менгән, иҫерек булғанлыҡтан, мискә эсенә ҡолап, тонсоғоп үлгән. Башҡорт һалдаттары, рустар белеп ҡалһа, был мискәләге араҡыны алмаҫ, тип, үлгән русты йәшерен рәүештә сығарып күмгәндәр һәм бер кемгә лә һөйләмәгәндәр. Башҡорттар араҡы эсмәй ине..."

Әхмәтзәки Вәлиди Туған һөйләгән ваҡиғалар 1917 йылда бара. Беҙҙең халыҡ вәкилдәре асылда Бөйөк Ватан һуғышында тәүге тапҡыр араҡыны тәмләп ҡарай. Был турала күп яҙҙылар инде, ҡабатлап-тәфсирләп тормайым. Шулай ҙа иң күп эскән йылдар тип 1970-1990-сы йылдарҙы атарға кәрәктер. Һәр төрлө социаль-иҡтимағи сәбәптәр менән бер рәттән, күпләп эсеүҙә психологик сәбәптәр ҙә ҙур урын алып тора. Беҙҙең халыҡ өсөн ул ике ҙур тетрәнеүгә бәйлелер тип уйлайым. Беренсеһе - һуғыштан атеизмдың дингә ҡаршы һуғышына бәйле булһа, икенсеһе - халыҡтың тәбиғәттән айырылыуы, йәғни донъяға яралғандан алып булмышына ереккән йәйләү, сәхрә хозурлығын юғалтыу. Дингә яйлап ҡайтабыҙ ҙа ул, тик йәйләү менән мәңгелеккә хушлашҡанбыҙҙыр. Ул беҙҙең ҡан тибештәрендәге оло юҡһыныу, иркенлекте һағыныу тойғоһо ғына булып йәшәй. Шул уҡ ваҡытта йәйләүһеҙ ҙә йәшәргә өйрәндек.

Һуңғы ваҡытта бигерәк тә йәш быуындың спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй инҡар итеүен мин тап шунда, йәйләүһеҙ йәшәргә өйрәнеүҙә күрәм. Был йөгонтоға бирелгән йәштәр аҙ ғына бар, улары ла ауыл ерендә, йәғни йәйләүгә яҡын урында. Күрәһең, ауыл кешеһенең күңелен сәхрә хозурлығы һәр саҡ елкендереп торғас, йәйләүҙе һағыныу тойғоһо ла оҙаҡ йәшәйҙер. Хәҙер 70-се йылдарҙа тыуған йәштәрҙең ҙур өлөшө бөтөнләй эсмәй һәм эсмәйәсәк тә, 80-селәр ҙә араҡыны инҡар итә. Бигерәк тә ошо ике быуын йәштәренең ҡала ерендә тыуғандары араҡыға әйләнеп тә ҡарамай. Улар, киреһенсә, үҙ эшен асырға ынтыла, мал таба, спорт менән шөғөлләнә, үҙебеҙҙең милләт йәштәре менән ғаилә ҡора һәм тағы ла шуныһы ғәжәп: балаларына инде онотолоп бөткән боронғо башҡорт исемдәре ҡуша. Хәҙер күбеһенең балалары Сыңғыҙ, Буранбай, Ирәндек, Ирәмәл, Ирхан, Хансура, Зөлхизә, Сәлимәкәй, Фатима һәм башҡа исемдәрҙе ғорур йөрөтә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, хәҙер ҡала ерендәге йәштәрҙең 99 проценты тик үҙ милләте вәкиле менән ғаилә ҡора.

Шулай итеп, эскелек беҙҙең халыҡ араһында тамыр йәйә алманы, бары үткәнде, ундағы йәйләү иркенлеген һағыныу, юҡһыныу юшҡынын ваҡытлыса баҫыусы бер "әмәлһеҙ сара" ғына булып ҡалһын. Уның шулай икәнлеген элек эскән кеше булараҡ, мин беләм. Беҙҙекеләр саҡ ҡына эсеп алдымы, үҙҙәрен йәйләүҙә тип хис итә, ирәүәнләнеп ала ла китә. Күңел торошо ла, һөйләгән һүҙ ҙә киңлеккә тартыла башлай, һөҙөмтәлә самалар онотола, сиктәр ҡыйрала. Бына шуға ла инде беҙгә эсеү бөтөнләй ситен, тәбиғи асылыбыҙға ҡаршы килә. Эсеү беҙҙең ҡанды ҡайнатып, ваҡытлыса ғына булһа ла гендарыбыҙҙа ойоған йәйләүгә алып китә лә, шул уҡ сәхрә хозурлығындай тәбиғи асылыбыҙҙы ҡыйрата. Йәғни зыяны күберәк. Тегенеһе уның хыял булһа, икенсеһе, хәтәрерәге, ысынбарлыҡ.

Өлкән быуындың күбеһе дин юлына баҫып, эскелектән арына алды, Аллаға шөкөр, ләкин ҡайһылары һаман да ул һаҙлыҡтан ҡотола алмай йонсой. Йәштәребеҙ, әйткәнемсә, эскәндәрҙән ғибрәт, замандан фәһем алып эсеүҙән баш сөйә. Былар барыһы ла нимә тураһында һөйләй һуң: баҡтиһәң, халҡыбыҙ бөтөнләй эсмәй икән, ә был йылдар беҙгә оло һынау ғына булған. Беҙ уны йырып сығып киләбеҙ. Иманыбыҙ шуға камил булһын, яңынан 35-45 йылдан беҙҙең халыҡ иблис һыуынан бөтөнләй азат буласаҡ. Мин шуға ышанам. Ышанғығыҙ килһә, һеҙ ҙә эсеүгеҙҙе ташлағыҙ. Ул саҡта рухығыҙ мин юғарыла килтергән дәлилдәрҙе һеҙгә лә һөйләп бирер.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## "Иҫәрҙәр йәшниге"нең ҡоло булма

Визуаль мәғлүмәт саралары йыш ҡына трансҡа индерә, шуға күрә лә телевизор ҡарарға яратыусылар йоғонтоға тиҙ бирешеүсе кешеләр булып тора. Тапшырыуҙарҙы оҙаҡ ваҡыт ҡарағанға күрә, кешеләрҙең зирәклеге кәмей, улар еткерелгән хәбәрҙең ҡиммәтен дә, эстетик сифатын да иғтибарға алмайынса, бер ҡатлы, вайымһыҙ ғына ҡабул итә башлай. Мәғлүмәттең визуаль образдар рәүешендә, баш әйләндергес эҙмә-эҙлектә алмашыныуы, тиҙ һәм агрессив килеп тороуы мейе көсөргәнешен арттыра һәм мәғлүмәт аң кимәлендә бөтөнләй тиерлек эшкәртелмәй. Уйларға ваҡыт бирмәгәс, аң ялҡаулана, шул уҡ ваҡытта төпкөл аң эшкәртелмәгән мәғлүмәт менән тула.

Телевидение ысынында һинең иғтибарыңды әсир итә. Телевидение беҙҙең уйыбыҙҙағы донъяны ысынбарлыҡтағына ҡарағанда тағы ла сағыуыраҡ итә, шул уҡ ваҡытта тормошта барған реаль ваҡиғаларҙы яңылыҡтар таҫмаһында ҡыҫҡа репортаждарға тиклем кесерәйтә. Ул ысынбарлыҡты боҙоп, уның өҫтөнән идара итә һәм беҙҙе ошо ымһындырғыс, үҙгәртелгән күренештәр менән күңел асырға саҡыра. Әгәр ҙә телевидение был әйберҙәрҙе һөҙөмтәле итеп күрһәтмәһә, ул кешеләрҙең иғтибарын шунсама сәғәттәр буйы йәлеп итә алмаҫ ине. Беҙгә был массалы гипноздың тормошобоҙҙо ярлыландырыуын аңларға кәрәк. Былдай пассив күңел асыуҙарға бирелеү тәбиғәттән һалынған ижади һәләттәребеҙҙе юғалтыуға алып килеүе ихтимал. Ҡайһы саҡта ваҡытлыса ғына көндәлек тормош мәшәҡәттәренән арынып тороу ҙа яҡшы. Көндәлек хеҙмәт бурыстары баҫымынан һәм бер туҡтауһыҙ ҡарарҙар ҡабул итеүҙән онотолоп тороу йыш осраҡта файҙаға була. Тулы ҡанлы тормош менән йәшәү өсөн беҙ көсөргәнешле хеҙмәтте алмаштырыусы эшмәкәрлек төрҙәренә мохтажбыҙ. Әммә беҙ шул уҡ ваҡытта ял итеүҙең күңелле яғынан тыш, файҙалы ла булырға тейешлеген күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Ял итеү мәлендә беҙ үҙебеҙгә хас төрлө ысулдар менән энергиябыҙҙы көйгә һалабыҙ, ул беҙгә ижади потенциалыбыҙҙың яңы үҫешенә булышлыҡ итә. Ял күп төрлө була, әммә шулар араһында беҙҙең ғәҙәти эшмәкәрлеккә ҡапма-ҡаршылары күберәк һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, кем көнө буйы өҫтәл артында ултырып, компьютер менән эш итә, ул саф һауала йөрөүҙән файҙалыраҡ ял алыр, моғайын. Былдай кешенең тирә-яҡ мөхите компьютер мониторы сиктәренән сыҡҡанда донъя тураһындағы күҙаллауҙары үҙгәрә, интеллекты яңырыу кисерә һәм яңы мәғлүмәтте эшкәртә башлай. Унан бигерәк, саф һауала йөрөгән ваҡытта ҡапыл зиһен асылып, быға тиклем хәл итә алмаған мәсьәләләр буйынса яңы идеялар тыуыуы мөмкин. Шулай итеп, эш көнөнөң бер ни тиклем ваҡытын ял итеүгә бүлгән кеше яңы ҡараш туплап, эшкә тулы энергия һәм энтуазиазм менән тотона.

"Иҫәрҙәр өсөн йәшник"кә ылығып, "диван-чипсы" синдромын эләктереү өсөн бер нисә көн дә етә. Ул саҡта инде саф һауала йөрөү, китап уҡыу йәки ижади фекерләүҙе талап иткән башҡа төрлө шөғөлдәр ялҡытҡыс кеүек тойола башлай. Ҡайһы саҡта беҙ нормаль көндәлек тормоштан арыныуҙың был ысулына шул тиклем күнегеп китәбеҙ, хатта күңел асыуҙарҙан башҡа әйберҙәр ҙә барлығын онотоп ебәрәбеҙ. Әммә пассив күңел асыу эҙләргә юлланғанда, бының өсөн түләү хаҡы барлығын да иҫтән сығарма. Шулай итеп, уртаса тормошмо йәки бөйөклөкмө? Үҙең һайла.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# МИЛЛИ ЙӘШТӘР ТЕАТРЫНА - 20 ЙЫЛ!



**Горизонталь буйынса: 1.** Ҡыҙыл йәки һары емешле эре сәнскеле ҡыуаҡ ағасы. **6.** Берәй нәмәгә килгән тотҡарлыҡ. **12.** Үтә күренмәле йоҡа тауар. **14.** Тула өлкәһендәге ҡала. **15.** Диңгеҙ генералы. **26.** Ун берәрҙән айырып, бер епкә теҙгән утыҙ өс төймә. **29.** "Һөнәре бар (...) өҫтөндә кәмә йөрөтөр". **34.** Һүҙһеҙ аңлатыу өсөн яһалған төрлө ҡул, баш хәрәкәте. **36.** Европалағы баш ҡала. **37.** Бер үркәсле дөйә. **39.** Икенсе дәүләт территорияһында урынлашҡан дәүләт, мәҫәлән, Лесото. **42.** Генерал Миңлеғәле Шаймуратовтың хәрби дәрәжәһе. **45.** Һөңгө япраҡлы, һары сәскәле, бәпембәгә оҡшаған үлән (сәскәһе иртәнсәк асыла, төштән һуң йомола). **55.** Һүҙ, һүҙлек. **56.** "Ваҡ балыҡ (...)е менән йөрөй". **57.** Матәм. **58.** Бәйләнгән туҡыманан тәнгә һылаштырып теккән спорт йәки театр кейеме. **59**. Европалағы баш ҡала.

**Вертикаль буйынса: 2.** Ауырыуҙарҙы дауалау менән бергә ғилми эш һәм студенттар практикаһы үткәрелә торған медицина учреждениеһы. **4.** Махсус һайлап алынған ҡатышма. **5.** Ағалы-ҡустылы совет академиктары, береһе - генетик, икенсеһе физик булған. **9.** Скандинав мифологияһының Зевсы. **10.** Яҡтырта торған төрлө төҙөлөшлө прибор. **16.** Емеш-еләк һутынан яһалған һалҡын эсемлек. **17.** Ҡытай кесерткәне. **19.** "Хужаһы ҡайһы яҡҡа (...)ын борһа, эте шул яҡҡа ҡойроғон борор". **22.** Ҙур сауҙа комплексы. **23.** Грузин аҡсаһы. **24.** Күсеп йөрөмәгән, бер урында эшләгән учреждение. **28.** Көньяҡ Уралдағы һырт. **30.** Японияла ғы мегаполис. **33.** Тәҙрәнең быяланы тирәсләп торған өлөшө. **34.** "Ат яҡшыһы - тауҙа, (...) яҡшыһы яуҙа беленер". **37.** Талаш, ыҙғыш, ғауға. **38.** Ҡояштан яҡынса 160 тапҡыр яҡтыраҡ Арыҫлан йондоҙо. **40.** (...) Маркс. **43**. Себерҙәге мегаполис. **44.** Әрмәнстан аҡсаһы. **48.** Кәңәшмә. **49.** Тәмәке ағыуы. **52.** Төрлө тауарҙы күрһәтеп ҡуя торған магазин тәҙрәһе. **53.** Белдереү. **54.** Ныҡ характерлы кеше.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**Яуаптарҙы дөрөҫ сисһәгеҙ, күрһәтелгән шаҡмаҡтарҙа пароль уҡырһығыҙ. Еңеүсене театрға саҡырыу ҡағыҙы көтә. Купонды редакцияға ебәрегеҙ.**

**КУПОН**

**Фамилияһы** ______________________

**Исеме** ______________________

**Адресы, телефоны** ______________________

**Пароль:**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының рус труппаһы егерменсе ижад миҙгелен **2-3 октябрҙә** М.Рощиндың "Валентин һәм Валентина" спектакле премьераһы менән аса. Уны сәхнәгә Мәсәлим Күлбаев ҡуя. Башҡорт труппаһы иһә үҙ тамашасыларына **4-6 октябрь** көндәре И.Зәйниевтың "Люстра" трагикомедияһын тәҡдим итә. Шулай уҡ был труппа быйыл Өфө дәүләт сәнғәт академияһының театр бүлеген тамамлап килгән йәш көстәр ҡатнашлығында "Донъяның ярҙары икәү..." спектакле премьераһы менән сығыш яһай. Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса Таңсулпан Бабичева сәхнәләштергән был тамашаны **17 октябрҙә** ҡарарға буласаҡ. Сәлихйән Әфләтүнов Наил Ғәйетбаевтың "Һөйгәнемдең ҡәҙерен бел" пьесаһы өҫтөндә эшләй. Спектакль сәхнәгә ноябрь айында сығасаҡ.

Әйткәндәй, 14 октябрҙән 20 октябргә тиклем Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған республика театр фестивале үтә. Был фестиваль сиктәрендә Милли йәштәр театры Мостай Кәримгә арналған биш тамаша күрһәтәсәк. Улар "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Йәйәүле Мәхмүт", "Донъяның ярҙары икәү", "Йәләлетдин атай" спектаклдәре һәм рус труппаһы тарафынан әҙерләнгән музыкаль-поэтик композиция.

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

Театр үҙенең 90-сы юбилей миҙгелен асыу тантанһын 25 сентябрҙә киске сәғәт алтыла йылдағыса дәртле концерт программаһы менән башлай. Артабан тамашасылар Төрки телле театрҙарҙың IV халыҡ-ара "Туғанлыҡ", Рәсәй кимәлендәге "Алтын битлек", Түбәнге Новгород ҡалаһында уҙғарылған "Реаль театр" фестивалдәре еңеүсеһе һәм ҡатнашыусыһы "Кәкүк ояһы" спектаклен ҡарай аласаҡ. Әйткәндәй, Айрат Абушахманов ҡуйған был психологик триллер октябрҙә Минск ҡалаһында үтәсәк "Панорама" халыҡ-ара театр сәнғәте фестиваленә юлланасаҡ. Ә ике аҙнанан коллектив Мәскәү сәхнәһендә сығыш яһаясаҡ. Мәскәүҙәр А.Пушкин исемендәге театр залында Фидан Ғафаров менән Нурия Ирсаева ҡатнашлығында "Йәшлектәргә ҡайтайыҡ әле..." исемле театрлаштырылған концерт һәм "Шәүрәкәй" спектаклен ҡарай аласаҡ.

*ИҒЛАН*

**Хөрмәтле яҡташтар!**

Изге Рамаҙан айында Баймаҡ районы Әмин ауылы мәсете халыҡҡа ҡайтарып бирелде. 100 йылдан ашыу элек ата-бабаларыбыҙ төҙөгән изге йорт кире ҡайтты, ата-олатайҙарыбыҙҙың быуындан-быуынға әйтеп ҡалдырған аманаты үтәлде. Мәсетебеҙҙе рәтләп-йүнәтеп алһаҡ, иншаллаһ, беҙҙең Әминебеҙ өҫтөнән дә, иман нуры таратып, көмөш аҙан яңғырар. Бинаның торошо маҡтанырлыҡ түгел, ярым емерек хәлдә. Уны йүнәтер өсөн байтаҡ аҡсалата сығымдар талап ителәсәк. Был изге эшкә битараф булмаҫығыҙға ышанып, кем күпме хәленән килә, ярҙам итеүегеҙҙе һорайбыҙ! Мәсет төҙөүҙә ихлас ярҙам иткәндәр, оло сауап алып, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтендә булыр, иншаллаһ.

Әмин ауылы ололары тәҡдиме буйынса мәсетте төҙөкләндереү файҙаһына аҡса йыйыуҙы Фәйзулла Үтәбаев атҡара. Иғәнә биреүселәрҙең, өмәләрҙә ҡатнашыусыларҙың исемлеге теркәләсәк, мәсет эшләй башлағас та мәсет архивына һаҡлауға тапшырыласаҡ.

**Банкының реквизиттары: Уральский банк Сбербанка России; Баймакское отделение 4583/0011; ИНН 7707083893; БИК 048073601; к/с 30101810300000000601; р/с 47422810706529940001; л/с 42307810306522554752; Утябаев Ф. С. (для мечети)**

**38-се һандағы сканворд яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** Совнарком. Хоҙайбирҙин. Тартай. Умиак. Шәкәр. Фабрика. Тоҡол. Молдаван. Лайғы. Майҙансыҡ. Шланг. Авангард. Бәү. Ахун. Зат. Мосолман. Ревматизм. Сапан. Маскарад. Баҡса. Тана. Диуана. Рыленко. Грогги. Яҙыусы. Хәсәнов. Арба. Гарнизон. Фекер. Имамат. Ихтыяр. Алешин. Атай.

**Вертикаль буйынса:** Буер. Фәйрүзов. Ҡауҙы. Транса. Рента. Тары. Хаси. Хата. Шалҡан. Мунса. Екатерина. Старт. Онагр. Йыртыш. Наиб. Ирен. Ураҡ. Агроном. Аҡса. Криминолог. Обоз. Клумба. Матәм. Натрий. Вето. Аларих. Сүмес. "Динамо". Корпус. Лайка. Алым. Дежнев. Диваев.

*Бер кеше лә һинең күҙ йәштәреңә лайыҡ түгел, ә лайыҡ булғандар һине илатмаясаҡ.*

*(Габриэль Маркес)*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# АШАҒАН РИЗЫҒЫҢ...

## хәләлме?

**Мосолман кешеһенә харам аш тыйыла. Харам тигәндә, беҙ, ғәҙәттә, сусҡа ите һәм спирт эсемлектәрен генә күҙ алдына килтерәбеҙ. Ә асылда улай ғынамы һуң? Беҙ хәләл ризыҡты харамдан дөрөҫ айыра беләбеҙме, мосолман кешеһенә ниндәй аҙыҡтар ашарға ярай? Бына ошо һорауҙарҙың актуаллеген һәм мөһимлеген күҙ уңында тотоп, Ураҙа байрамы көндәренең береһендә Башҡортостан мосолмандарының милли аш-һыу конкурсы үтте. Уны Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының М.Солтанова исемендәге мәҙрәсәһе, БР кулинарҙары ассоциацияһы, "БР дөйөм туҡланыу уҡыу-курс комбинаты" предприятиеһы ойошторҙо.**

- Бөгөн халыҡ араһында хәләл ризыҡты харамдан айырғандар аҙ. Һатып алыусы ғына түгел, туҡланыу предприятеларында аҙыҡ етештереүселәр ҙә шәриғәт ҡанундары буйынса хәләл ризыҡтың нисек әҙерләнергә тейешлеген белмәй. Бәйғәмбәребеҙҙең шундай хәҙисе бар: "Берәү һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡыла. Ләкин уның ашаған ризығы ла, тәрбиәләнгән мөхите лә харам була. Был кешенең доғалары ҡабул буламы ни?" Аллаһы Тәғәлә менән арабыҙҙы яҡынайтыу өсөн беҙҙең туҡланған ризығыбыҙ ҙа хәләл булырға тейеш. Тап шуға ла беҙҙең тәү маҡсат - халыҡты харамдан хәләлде айырырға өйрәтеү, уның милли рухын, дини рухын күтәреү, - ти М.Солтанова исемендәге мәҙрәсә директоры Илдар хәҙрәт Малахов.

Ә хәләл ризыҡ ниндәй була һуң? Хәләл ризыҡ, тимәк, Аллаһы Тәғәлә тарафынан рөхсәт ителгән аҙыҡ. Ҡулланылған аҙыҡ хәләл булһын өсөн мосолман кешеһе малды "Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим. Аллаһу әкбәр" тип әйтеп, ҡибла яғына ҡаратып салырға тейеш. Хайуанды һуйған ваҡытта уны быуырға, туҡмарға, электр тогы менән үлтерергә ярамай, юғиһә, уның ҡанында ҡурҡыу гормоны һәм адреналин барлыҡҡа килә һәм был ҡан иткә һеңә. Шәриғәт ҡағиҙәләре тулыһынса үтәлеп эшкәртелгән ит кенә хәләл һанала һәм ул ашауға ла татлы һәм сифатлы була. Кеше сәләмәтлеге өсөн дә тап ошондай ит яҡшы һәм файҙалы һанала. "Хәләл - ул ит аҙыҡтары ғына түгел, - тине БР мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө урынбаҫары Әйүп хәҙрәт Бибарсов. - Составына хайуан майы ҡушылған майонез, соус, кондитер изделиелары ла шулай уҡ ошо стандарт буйынса әҙерләнергә тейеш. Косметика тауарҙары ла хәләл була ала, йыш ҡына уларҙы етештергәндә лә хайуан майы файҙаланыла".

Тағы ла шуға иғтибар итеү мөһим: хәләл продукция әҙерләү процесы, тауарҙы етештерә башлауҙан алып магазинға оҙатҡанға тиклем, башҡа продукциянан айырым алып барылырға тейеш. Тик, үкенескә ҡаршы, халыҡҡа "хәләл" марҡаһы аҫтында аҙыҡ тәҡдим итеүсе предприятеларҙың барыһы ла был шарттарҙы күҙәтмәй. Тап шуға ла күптән түгел БР мосолмандары Диниә назараты эргәһендә "хәләл" стандарты буйынса комитет төҙөлдө.

- Хәләл ризыҡтары баҙарын тикшереп, беҙ унға яҡын ялған аҙыҡ етештереүсене асыҡланыҡ, - ти комитет етәксеһе Илшат Ғиззәтуллин. - Әлегә беҙ уларҙың мәнфәғәтен ҡайғыртып, язаға тарттырмаясаҡбыҙ. Ни тиһәң дә, улар аҙыҡ-түлек баҙарында үҙ урынын тапҡан һәм, бәлки, продукцияһы "хәләл" стандартына тура килмәүҙә уларҙың ғәйебе лә юҡтыр. Быға тиклем был ойошмаларҙың эшен контролдә тотоусы структура булманы, хәҙер беҙҙең бурыс был етештереүселәргә ярҙам итеү.

Әлеге мосолман аштары конкурсында 12 предприятие ҡатнашты. Шулар араһында: "Lido на Пушкина", "Башҡортостан" ҡунаҡханаһының "Айтон", "Первая кальянная", "Изюм", "Дуҫлыҡ" рестарандары, "Фитнес-бар" кеүек халыҡ араһында киң билдәле булған абруйлы туҡланыу урындарының хәләл ризыҡтан әҙерләнгән әллә күпме аш-һыу төрө тәҡдим итеүе сараның мәртәбәһен күтәрҙе. Шулай ҙа конкурстың еңеүсеһе тип табылған Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Ватрушкин" кафеһына етеүсе булманы. Улар аш-һыу төрҙәренән Башҡортостан, Ислам донъяһын һынландырған композиция булдырғайны. Бына иң ҡалҡыу урында Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Нур Аль-иман" мәсете, уртала башҡорт тирмәһе тора. Улар бауырһаҡтан эшләнгән. Шулай уҡ бында Һомай ҡошто ла күрергә мөмкин. Бына өләсәй менән олатайҙы һынландырған ике тауыҡ бер-береһенә һыйынған. Йәштәр йылына ҡарата эшләнгән экспозицияла ике өйрәк-егет ултыра. Аҫтараҡ Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың тыуған яғы һүрәтләнгән. Унда ҡамырҙан яһалған Айыу тауы тора, Моҡас йылғаһы аға, туҡмас үләндәр йәйелеп ята. Ауыл өйө ултыра. Стәрлетамаҡтарҙың өҫтәле сараның сағыу бер биҙәге булһа, улар яңғыратҡан ҡурай моңо, ҡумыҙ сыңы, халыҡ йыры байрам кәйефен күтәрҙе, башҡорт милли мөхитен тыуҙырҙы.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәлә үткән был изге башланғысты хуплап, артабан уның дауамы хәйерле булыуын, хәләл ризыҡтар менән туйындырыусы ойошмаларыбыҙ, аҙыҡ етештереүселәребеҙ артыуын теләргә генә ҡала. "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән әйтемгә таянып, шуны ла өҫтәге килә: тән сәләмәтлеге физик тәрбиә менән бер рәттән, ниндәй аҙыҡ ашауыбыҙға ла бәйлеләр. Аллаһы Тәғәлә тарафынан рөхсәт ителгән хәләл ризыҡтар ғына беҙҙең тәнебеҙҙе нығыта, һаулығыбыҙҙы яҡшырта ала, ә был, үҙ сиратында, рухи камиллыҡҡа, әхлаҡи юғарылыҡҡа ынтылған юлда бер этәргес булып торалыр. Был турала "Әл-Бәҡара" (һыйыр) сүрәһенең 168-се аятында шулай тиелгән: "Эй, кешеләр! Ерҙәге пак, хәләл ризыҡтарҙы ғына ашағыҙ! Үә шайтан эҙенә төшмәгеҙ, шайтан һеҙгә хас дошман ул".**

**Буранбикә ЙӘНСУРИНА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - Көйөргәҙе районынан **Вәсилә Бураншинаны**, Мәләүез ҡалаһынан **Рауза Хазиеваны**, **Нәзифә Ильясованы**, Өфө ҡалаһынан **Рәйлә Бүләкованы**, Сибай ҡалаһынан **Фәрит Әхмәровты**, **Миңнур Амангилдинаны**, Хәйбулла районы Бакал ауылынан **Әлфирә Ишимованы**, **Гөлйемеш Исәнъюлованы**, Сиҙәм ҡасабаһынан **Флүрә Аслаеваны**, Уфимка ҡасабаһынан **Рәфҡәт Алгушаевты**, Йәнтеш ауылынан **Фәхирә Исҡужинаны**, Баймаҡ районы Беренсе Этҡол ауылынан **Тамъян Моталлаповты**, Билал ауылынан **Нәркәс Кәримованы**, Ярат ауылынан **Ғәйшә Мырҙабаеваны**, Бөрйән районы Исламбай ауылынан **Роза Әҙелбаеваны**, Иҫке Собханғол ауылынан **Рәмилә Юлсуринаны**, Стәрлебаш районы Стәрлебаш ауылынан **Г. Хафизованы**, Ҡырмыҫҡалы районы Шәрипҡол ауылынан **Йәғәфәр Лотфуллинды**, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан **Мәрйәм Яҡшинаны**, Әбйәлил районы Ишҡол ауылынан **Р. Муллахмәтованы**, Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан **Минзилә Фәхретдинованы**, Ейәнсура районы Бәләкәй Муйнаҡ ауылынан **Гөлназ Аҡбашеваны,** Абзан ауылынан **Айгөл Ғәлиеваны** һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

**Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, аҡ бәхеттәр, ғаилә именлеге теләйбеҙ. Һәр көнөгөҙ ҡояшлы, мөхәббәтле, шатлыҡ-ҡыуаныстарға, изге эштәргә бай булһын, айыҡ аҡыл һәм фекер ҡеүәһе бер ҡасан да ташламаһын.**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙЫЛМАЙЫУҘАН ТУҠТАМА,

## бәлки, кемдер йылмайыуыңа ғашиҡ булыр...

Мин һине һин булған өсөн түгел, һинең эргәңдә мин үҙем бөтөнләй икенсе кешегә әйләнгән өсөн яратам.

Моғайын, һин кем өсөндөр бары тик кешелер, ә кем өсөндөр һин - бар донъя.

Һинең менән ваҡытын үткәрергә теләмәгән кешегә ваҡытыңды әрәм итмә.

Бер ваҡытта ла, һиңә бик ауыр булғанда ла, йылмайыуҙан туҡтама, бәлки, кемдер һинең йылмайыуыңа ғашиҡ булыр.

Бер кеше лә һинең күҙ йәштәреңә лайыҡ түгел, ә лайыҡ булғандар һине илатмаясаҡ.

Яҡшыны булдырам, тип, ул ҡәҙәре көс һалма, сөнки бөтөн яҡшы нәмәләр көтөлмәгәндә була.

Ысын дуҫ - ул ҡулдарыңдан тотоп, һинең йөрәк тибешен тойған кеше.

**(Габриэль Маркес)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Һиндостанда бер кеше сәйәхәт итеп йөрөгән мәлдә көтмәгәндә "ожмахҡа" барып эләгә. Был илдә теләктәреңде үтәй торған ағасты тап итеүҙе ожмахҡа эләгеү һымаҡ ҡабул итәләр. Сәйәхәт итеүсе был кеше бик ныҡ арыған була, шуға ла ул ағас төбөнә ята ла, ҡаты йоҡоға тала. Уянғас, шул тиклем асыҡҡанын тоя һәм:"Ҡайҙандыр ашарға табырға ине бит әле", - тип уйлай. Уйлап та өлгөрә, алдында ризыҡтар пәйҙә лә була. Ул шул тиклем ныҡ асыҡҡан була, шуға ла был ризыҡтың нисек барлыҡҡа килеүен дә уйлап тормаҫтан, уларҙы ҡомһоҙланып ашап та ҡуя. Ашап туйғас ҡына тирә-яғын байҡап ала, шунан ҙур ҡәнәғәтләнеү кисереп: "Эсергә лә кәрәк ине бит әле", - тип уйлай. Уйлауы була, алдына шарап шешәһе килеп ултыра. Кеше ағас күләгәһендә ҡырын төшөп ятып, шарап һемерә башлай. Бер аҙҙан: "Был ни булды әле? Бәлки, мин йоҡлайымдыр? Әллә күҙгә күренмәҫ ен-пәрейҙәр шаяртамы мине?"- тигән уй килә башына. Шул саҡта уның алдында ысынлап та ҡот осҡос ен-пәрейҙәр пәйҙә була. Кеше ҡото осоп: "Былар хәҙер мине үлтерәсәк бит" ,- тип уйлай. Уны, ысынлап та, үлтерәләр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4128